ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 сентябрь (һарысай) 2025

№36 (1180)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

## "Башҡорт аты" - мәртәбәле байрам



2

## Венгрия мәмләкәтендә юғалыу



6-7

## Баһалы халыҡ булайыҡ, тиһәк...



Тыуған телебеҙҙе көҙәрләйек 8-9,11

## Әсәләр көтәләр улдарын



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!*** ***Баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл етте: 2026 йылдың 1-се яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы бара. ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 1054 һум 50 тин. Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле "Киске Өфө"гә яҙылырға ашығығыҙ - үкенмәҫһегеҙ.***

***Мөхәрририәт.***

ҺӨЙӨНСӨ!

# "ТОРАТАУ" ГЕОПАРКЫ...

## халыҡ-ара хоҡуҡи яҡлау алды!



**Чилиҙа үткән ЮНЕСКО Советы ултырышында эксперттар бер тауыштан "Торатау" геопаркын ЮНЕСКО-ның глобаль геопарктар селтәренә индереү өсөн тауыш бирҙе.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ғариза 2021 йылда уҡ ебәрелгәйне. 2022 йылда "Торатау" геопаркы үҙен баһалау маҡсаты менән килгән Ирландия һәм Испания эксперттарын ҡабул итте. Республика шул саҡта эксперттар ҡалдырған тәҡдим-кәңәштәрҙе яйлап бойомға ашырҙы. Һөҙөмтәлә геопарк геотуризм һәм белем биреү инициативаларының мөһим үҙәгенә әйләнде. Торатау түбәһенә экоһуҡмаҡ һалынды, Евразия климат консорциумы - Карбон полигоны федераль проекты сиктәрендә йорт-музей асылды. Быйыл йәй "Усолка" һәм "Алыҫ Түлкәҫ" ҡырҡымдары кеүек ике майҙансыҡ эшләй башланы.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең социаль селтәрҙәге сәхифәһендә: "Торатау" геопаркы - Башҡортостан биләмәһендә глобаль селтәргә ингән икенсе тәбиғи объект. 2020 йылда беренсе булып ЮНЕСКО-ның глобаль геопарктар селтәренә Янғантау ингәйне. Быйыл Өфө фән һәм технологиялар университетында ЮНЕСКО-ның "Геопарктар һәм тотороҡло үҫеш биләмәләре" кафедраһы асылды, унда халыҡ-ара кимәлдәге белгестәр әҙерләнә башланы. Шулай уҡ Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәр бөтә донъя мираҫы исемлегенә индерелде", - тип яҙҙы һәм ғалимдарға, геопарк командаһына, профилле ведомстволар хеҙмәткәрҙәренә, республиканың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты вәкилдәренә һәм бөтә ҡатнашыусыларға яйға һалынған эштәре өсөн рәхмәт әйтте.

Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәге етәксеһе Василий Мартыненко "Торатау"ҙың ЮНЕСКО-ның глобаль геопаркы статусын алыуын киләсәк быуындар өсөн тәбиғи мираҫты һаҡлауға индергән оло ҡаҙаныш ул, тип баһаланы: "Торатау" геопаркын булдырыу - һуңғы йылдарҙағы маҡсатлы күп йыллыҡ эш. Әйтергә кәрәк, 2018 йылдың октябрендә Радий Хәбиров аҡыллы ҡарар ҡабул итте. "Торатау" республика геопаркын булдырыу идеяһы - уныҡы. Ул шул ваҡытта уҡ команда алдына был парк ЮНЕСКО геопарктарының "татыу ғаиләһенә" инергә тейеш, тигән бурысты ҡуйғайны" - тип билдәләне эксперт.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# СИБАЙҘА БАР БЕР МӘКТӘП!

**Сибай ҡалаһының Рамазан Өмөтбаев исемендәге Башҡорт лицейы яңы уҡыу йылына әҙерләнеп, мәктәп ҡапҡаһын башҡорт телендәге мәғлүмәти стендтар менән биҙәгән.**

"Бөйөк шәхестәрҙең фекерҙәренән тыш, башҡорт теле ҡағиҙәләре лә уҡыусылар өсөн файҙалы буласаҡ, - ти лицей директоры Дилә Фәтҡуллина. - Был эште мәктәп коллективы һәм атай-әсәйҙәр менән берлектә тормошҡа ашырҙыҡ. Эстафетаны Башҡортостан Республикаһының милли һәм полилингваль мәктәптәренә тапшырабыҙ".

Телһөйәр, илһөйәр балалар тәрбиәләү - белем усағының төп маҡсаттарының береһе. Ә был маҡсатты тормошҡа ашырыуға китап йә уҡытыусы ғына түгел, ә барлыҡ саралар, шулай уҡ Сибай лицейының фиҙакәр уҡытыусылары уйлап тапҡан ошондай стедтар ҙа булышлыҡ итә икәненә бер ниндәй ҙә шик юҡ. Афариндар!




12+

ҠЫҪҠАСА

## ӨФӨ АРЪЯҒЫНДА ЛА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров видеобәйләнеш аша төбәкте үҫтереү буйынса РФ Хөкүмәте комиссияһы президиумы эшендә ҡатнашты.** Уны Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары Марат Хөснуллин алып барҙы. Көн тәртибендә коммуналь инфраструктура объекттарын төҙөүгә ҡаҙна кредиттарын алыуға төбәктәрҙең ғаризаларын ҡарау сығарылды. Хөкүмәт комиссияһы президиумы 2025 йылдың августында Башҡортостандың Өфө аръяғы биләмәһенә һыу үткәреү һәм уны ағыҙыу селтәрҙәре менән тәьмин итеү проектының беренсе сиратын тормошҡа ашырыуға 8,5 миллиард һумлыҡ ғаризаһын хуплағайны. Комиссияның әлеге ултырышында проекттың икенсе сиратын төҙөүгә республиканың 5 миллиард һумлыҡ заявкаһы ҡаралды һәм ыңғай хәл ителде.

✓ **Башҡортостанда яңы мәктәптәр талап ителгән ҡалалар билдәле булды.** Өфө һәм Өфө агломерацияһы, Стәрлетамаҡ, Нефтекама, шулай уҡ Иглин һәм Өфө райондары яңы мәктәптәр талап ителгән өҫтөнлөклө муниципалитеттар иҫәбенә инә. Республика мәғариф министрының беренсе урынбаҫары Светлана Антипина ошо хаҡта һөйләне. Уның мәғлүмәттәре буйынса, киләһе уҡыу йылына республикала 41 уҡыу йорто капиталь ремонтлана. "Шуларҙың 36-һы - бер йыллыҡ цикллы мәктәп, улар 1 сентябргә үҙ ишектәрен аса, ҡалғандары ике йыл дауамында яңыртыла. Төбәктә белем биреү объекттарының артыҡ тулы булыуы мәсьәләһе системалы рәүештә хәл ителә. Беҙ Рәсәйҙә яңы мәктәптәр төҙөү һәм булғандарын капиталь ремонтлау буйынса өс лидер араһында. Был төбәк һәм федераль аҡса, шулай уҡ муниципалитеттар иҫәбенә эшләнә", - тине Антипина. Әйтерегеҙгә төшөрәбеҙ, баш ҡаланың Кузнецов затонында мәктәп төҙөлөшөн 30 октябргә тамамлау планлаштырыла.

✓ **26 сентябрҙә Башҡортостанда Салауат Юлаевтың Хәтер көнө билдәләнә. Был хаҡта "Янгантау" геопаркының телеграм-каналы хәбәр итә.** Балтик диңгеҙенең һалҡын ярҙарында батырҙың яҡынлы йөрәге тибеүҙән туҡтауға 225 йыл ваҡыт үтеп китте. Милли геройыбыҙҙың тыуған төйәге Салауат районының Тәкәй ауылында кенотаф (символик ҡәбер ташы) ҡуйылған. Данлы батырҙың вариҫтары Салауат атаһы Юлай менән ғүмеренең һуңғы йылдарын үткәргән Балтика еренең тупрағы һалынған капсула алып ҡайтты. Геройҙарҙың исемдәрен мәңгеләштереү һәм уның бөйөк ударына тыуған илендә изге урын биреү өсөн кенотафҡа тупраҡ һалырға, шул рәүешле геройҙарҙы символик рәүештә тыуған иленә ҡайтарырға ҡарар ителде. Йөрәктәрендә Салауат исеме ата-бабаларының ҡаһарманлығына тәрән ихтирам һәм ғорурлыҡ тойғоһо уятҡан һәр кемде 26 сентябрҙә иртәнге сәғәт 11-ҙә тантаналы сарала ҡатнашырға саҡыралар.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

## УРАЛ БУЙЫ ҺУҠМАҠТАРЫ

**"Көньяҡ Урал" һуҡмағын Башҡортостандан, күрше төбәктәрҙән һәм хатта сит илдәрҙән күп туристар белә. Был маршрутты республикала билдәле блогер Рәйес Ғәбитов әҙерләгән. Сибайҙа "Урал аръяғы" Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы сиктәрендә ул проектты үҫтереү буйынса планы тураһында ентекле һөйләне.**

"Көньяҡ Урал һуҡмағы" бай тәбиғәтле Башҡортостан һәм Силәбе өлкәһенең матур урындары буйлап 1000 километр араға һуҙыла. Һуҡмаҡ Яҡтыкүлдән башлана, артабан Абҙаҡ курорты, Белорет ҡалаһы, Ирәмәл тәбиғәт паркы, Йөрәккүл милли парктары, Златоуст ҡалаһы, Таганай милли паркы аша үтеп, Турғаяҡ һыртында тамамлана.

Республика Башлығы үҙенең сәхифәһендә "Көньяҡ Урал" һуҡмағы тураһында бына нимәләр яҙҙы: "Йыл һайын ирекмәндәр һәм активистар һуҡмаҡтың яңы участкаларын билдәләй. Һуңғынынан Шихандарҙан Шүлгәнташ мәмерйәһенә тиклем Ғүмәр тарлауығы һәм Күк-Ҡарауыҡ шарлауығы аша алып барған участка эшләй башланы. Хәҙер һуҡмаҡ Башҡортостандың Урал аръяғына, Сибайҙан Талҡаҫ күленә тиклем оҙайтыла. Бөгөн беҙ был маршрутта беренсе тамға яһаныҡ. Шулай уҡ мин Рәйескә "Башҡорт оҙон ғүмерлелеге" буйлап сәйәхәт иткән оло йәштәге туристарға участкаларҙың береһен яраҡлаштырырға тәҡдим иттем. Туризм - иҡтисадыбыҙ нигеҙе. Әммә был мөһим тармаҡты үҫтереп, тәбиғәтебеҙ тураһында ла оноторға ярамай. Яңы иҫтәлекле урындарҙы асып, уларҙы нисек һаҡлап ҡалыу тураһында уйлау мөһим. Һәм бындай проекттар ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә".

## БЫЛ ДА ҺАБАНТУЙ!

**4-6 сентябрҙә Сибай ҡалаһында "Урал аръяғы-2025" VII Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы үтте. Башҡортостандың тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Болычева хәбәр итеүенсә, уның сиктәрендә дөйөм суммаһы 30 миллиард һумлыҡ 17 килешеү төҙөлгән. Сарала Рәсәйҙең 30 төбәгенән 2,5 меңдән ашыу кеше, шулай уҡ Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Белоруссия, Ҡытай, Төркиә һәм башҡа сит илдәр вәкилдәре ҡатнашҡан.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Урал аръяғы" инвестиция һабантуйының пленар ултырышында ҡатнашты. Үҙенең сығышында иҡтисадты һәм бөгөнгө заман шарттарында инвестиция эшмәкәрлеген үҫтереүҙең төп бурыстарына туҡталды. Был йүнәлештә эште эре иҡтисади үҙәктәр биләмәһендә генә алып барырға ярамай, тине ул һәм бәләкәй ҡалалар мөмкинлектәренә лә иғтибар итеү кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Билдәләнеүенсә, һуңғы ете йыл эсендә Сибай иҡтисадына 14 миллиард һумдан ашыу аҡса инвестицияланған. "Полиметалл" компанияһы 2028 йылға байыҡтырыу фабрикаһын яңыртыуҙы тамамлай. Шулай уҡ "Новопетровское" алтынбаҡыр ятҡылығын сафҡа индереү буйынса эш алып барыла. Инвестицияларҙың дөйөм күләме өс миллиард һум күләмендә ҡаралған.

Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы барышында Сибайҙа республика Хөкүмәтенең күсмә ултырышы уҙҙы. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров билдәләүенсә, яҡын аралағы эш планында ҡаланың Йәштәр һәм Бала табыу йортон, Сибай төҙөлөш һәм сервис колледжы бинаһын һәм урындағы Енеү паркын төҙөкләндереү ҡаралған. "Беҙҙең өсөн "Шифа" балалар һауыҡтырыу һәм ял үҙәге, балалар өсөн белем биреү-реабилитациялау үҙәге, Төйәләҫ йылғаһында гидротехник ҡоролма төҙөү - айырыуса мөһим мәсьәлә. Был объекттар айырым контролдә тотола", - тип билдәләне Хөкүмәт рәйесе.

Шулай уҡ инвестиция һабантуйы сиктәрендә "Төбәктән-төбәккә: тәжрибә уңышы юлы" IV халыҡ-ара бизнес-шарифтәр форумы булды. Дәүләт менән бизнес араһында үҙ-ара эш итеүҙең һөҙөмтәле моделдәрен тикшереү, бәләкәй һәм урта предприятиеларҙың бөгөнгө хәленә баһа биреү һәм бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа дәүләт ярҙамы уның үҙәк темалары булып торҙо.

## "БАШҠОРТ АТЫ" - МӘРТӘБӘЛЕ БАЙРАМ

**Баймаҡ районында үткән IV Халыҡ-ара "Башҡорт аты" фестивалендә, көтөлгәнсә, Ҡытай, Кувейт, Иран, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Көньяҡ Африка Республикаһы, Камерун, Марокко, Конго Демократик Республикаһы, Ангола, Замбия, Мысыр, Гана, Куба, Ҡаҙағстан, Төркмәнстан, Тажикстан һәм Ҡырғыҙстан, шулай уҡ илебеҙҙең 12 төбәге вәкилдәре - рәсми ҡунаҡтар, эшҡыуарҙар, ғалимдар, спортсылар ҡатнашты.**



Сара быйыл VII Бөтә Рәсәй "Урал аръяғы" инвестиция һабантуйы һәм Баймаҡ районының 95 йыллығы сиктәрендә ойошторолдо. Байрам программаһына алты төрлө ат сабышы, "Тай-тулаҡ", "Ауҙарыш", "Ылаҡ", "Бәйге" кеүек милли уйындар, шулай уҡ көрәш, мас-рестлинг, грэпплинг бәйгеләре индерелгәйне. Фестиваль майҙанында төрлө күргәҙмәләр эшләне, эшлекле осрашыуҙар үтте, башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары концерты булды.

"Башҡорт аты" фестивале Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән йылҡысылыҡ һәм ҡымыҙ эшләү традицияларын һаҡлау һәм үҫтереү, ғилми-мәғрифәтселек һәм мәҙәни-спорт сараһы булараҡ 2022 йылдан алып үткәрелә. Сағыу байрамда төбәк етәксеһе быйыл да ҡатнашты. "Бында тағы ла үҙ тарихының ҡәҙерен белгән һәм республикабыҙҙың иң мөһим символдарының береһе - башҡорт атына битараф булмағандар йыйылды. Рәсәй халыҡтарының барыһы өсөн дә, бигерәк тә башҡорт халҡы өсөн, ат элек-электән, ысынлап та, сәфәрҙә лә, яуҙа ла, көндәлек тормошта ла айырылғыһыҙ юлдаш ул. Ат - Башҡортостан иҡтисадының ҙур өлөшө. Башҡорт атын артабан өйрәнеүгә киләсәктә лә ҙур иғтибар бүләсәкбеҙ. 2023 йылда беҙ "Башҡорт аты" атамаһын ҡулланыуға Роспатент танытмаһын алдыҡ. Быйыл башҡорт атының геномын өйрәнә башлаясаҡбыҙ. Тоғро дуҫыбыҙҙың үткән тарихын һаҡлау өсөн йыл һайын аҙлап булһа ла эштәр алып барасаҡбыҙ", - тине Радий Хәбиров.

IV "Башҡорт аты" халыҡ-ара фестиваленең тантаналы өлөшөн театрлаштырылған тамаша һәм башҡорт тоҡомло аттар парады асты. Байрамдың биҙәге һәм кульминацияһы булған тантаналы марш Бөйөк Ватан һуғышында Енеүҙең 80 йыл-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Баймаҡ районының 95 йыллығы хөрмәтенә ойошторолған тантаналы сарала ҡатнашты. Баймаҡтарҙы оло юбилей менән ҡотлап, Башҡортостандың тотороҡло үҫешен тәьмин итеүгә ҙур өлөш индергәндәрҙе өсөн рәхмәт белдерҙе һәм дәүләт наградалары тапшырҙы. "Әле ошо залда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар ҙа бар. Улар - беҙҙең илебеҙ һәм республикабыҙ өсөн бөгөн иң мөһим кешеләр. Ватаныбыҙ һағына баҫҡан бөтә хәрби хеҙмәткәрҙәргә ҙур рәхмәт белдерәм", - тине Радий Хәбиров үҙенең сығышында.

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров Баймаҡ районына эш сәфәре барышында 2024 йылдың декабрендә асылған Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеү үҙәгендә булды. Район башлығы Азамат Иҙрисов хәбәр итеүенсә, йәйгеһен бинаға капиталь ремонт үткәрелгән. Үҙәктә гуманитар ярҙам йыйыла, юристар һәм психологтар бушлай консультациялар үткәрә, студенттар һәм уҡыусылар менән осрашыуҙар ойошторола. Шулай уҡ бында ирекмәндәр штабы урынлашҡан.

✓"Урал аръяғы-2025" инвестиция һабантуйы сиктәрендә Әбйәлил районы үҙәге Асҡарҙа Күп функциялы сауҙа-сервис комплексы төҙөү тураһында килешеү төҙөлдә. Уға Башҡортостан Республикаһының Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығы, "Башмаркет" йәмғиәте һәм Әбйәлил районы хакимиәте етәкселәре ҡул ҡуйҙы. Дөйөм майҙаны 960 квадрат метр тәшкил иткән яңы комплекс кафе һәм сауҙа майҙандарын үҙ эсенә ала.

✓Башҡортостан Башлығы Рәсәй Геройы Риф Сәхәбетдиновтың ҡаҙаныштарын генерал Шайморатов ордены менән билдәләне. "Генерал Шайморатов орденын алыуым менән бик ғорурланам, - тине Риф Сәхәбетдинов. - Тыуған яғыма һәр ваҡыт ашҡынып ҡайтам. Хәҙер тағы ла күңелләрәк, сөнки Башҡортостанда үҙ йортом бар. Рәсәй һәм Башҡортостан мәнфәғәте өсөн бергәләп эшләүебеҙҙе дауам итербеҙ". Риф Сәхәбетдинов Шишмә районында тыуып үҫкән, бар ғүмерен Рәсәйгә хеҙмәт итеүгә арнаған. Әлеге ваҡытта Санкт-Петербург Хәрби комиссариатының инспекторҙар төркөмө инспекторы булып эшләй.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Өфөнөң Көрәш һарайында беренсе курс студенттарына бағышлау байрамында ҡатнашыуы тураһында әйтеп үтте. "Был традицияға әүерелергә тейеш, ә бейеү өсөн генә түгел, - тип йөкләмә бирҙе республика етәксеһе. - Сит ҡалаларҙа уҡыған студенттарыбыҙға ярҙам итеү тураһында муниципалитет башлыҡтарының хәтеренә төшөрәм. Беҙҙең вәкиллектәр ошо эште координацияларға тейеш. Быны контролдә тотоғоҙ".

*✓ "Сибайҙың таш менән эшләү тәжрибәһе бар. Бында уникаль оҫталар эшләй, һәм беҙ уларҙың башланғыстарын хупларға ниәтләйбеҙ. Өфөлә данлыҡлы Гәрәбә бүлмәһенә оҡшаш "Йәшмә бүлмәһе" проекты өҫтөндә эшләйбеҙ".*



лығына, шулай уҡ бөгөнгә көндә Рәсәй мәнфәғәттәрен һәм бойондороҡһоҙлоғон яҡлаған МХО-ла ҡатнашыусы яугирҙарға арналды. Дөйөм алғанда, ат парады республиканың 25 районынан 400-ҙән ашыу һыбайлыны берләштерҙе. Атлылар, өлкәндәр һәм балалар, төрлө осорҙағы башҡорт яугирҙары костюмдарын кейгәйне. Ейәнсура, Ишембай, Мәләүез һәм Ауырғазы райондары командалары ат парадының иң күркәм ҡатнашыусылары булараҡ танылды.

## ҺӨНӘРМӘНДӘРГӘ - ТАНЫЛЫУ

**Башҡортостан һәм Бөтә донъя һөнәрмәндәр советы халыҡ кәсептәре өлкәһендә хеҙмәттәшлекте нығытыуҙы дауам итә. Сибайҙа үткән VII "Урал Арьяғы" Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо Совет делегацияһы ағзалары менән осрашты. Көн тәртибенә республиканың халыҡ кәсептәрен үҫтереү мәсьәләһе ҡуйылды.**




Бөтә донъя һөнәрмәндәр советы президенты Саад Әл-Ҡаддуми, Башҡортостандың тармаҡты һәм туризмды үҫтереү өсөн ҙур потенциалы бар, тип билдәләне. "Һеҙ күп нәмә тәҡдим итә алаһығыҙ - мәҫәлән, традицион кәсептәр, хәләл ризыҡ һәм бик күп мәҙәни аспекттар, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Саад Әл-Ҡаддуми. - Сибайҙа беҙ бындай мөмкинлектәрҙе асыҡ күрҙек. Беҙгә берләшергә ярҙам итәсәк тәҡдимдәр тәҙәйәсәкбеҙ. Бергәләп маркетинг, брендинг, туризмды үҫтереү өҫтөндә эшләй алабыҙ. Бөтә донъя һөнәрмәндәр советы Башҡортостанды үҙенең партнерҙарының береһе итеп ҡарай. Ойошма башҡорт һөнәрмәндәрен халыҡ-ара кимәлдә танытыуға һәм Иран, Ҡытай һәм башҡа илдәрҙең һөнәрселек берләшмәләре менән бәйләнештәрҙе үҫтереүгә булышлыҡ итергә әҙер".

Радий Хәбиров делегацияға визиты һәм төбәккә ҡыҙыҡһыныуы өсөн рәхмәт белдерҙе. "Өфө "Һөнәрмәндәр ҡалаһы" статусын алды ла инде, һәм был ғәмәли сәнғәтте үҫтереү өсөн мөһим стимул булды, - тип билдәләне республика етәксеһе. - Хәҙер һөнәрмәндәр берләшмәһе менән бергәләп тармаҡты яңы кимәлгә сығарырға мөмкинлек биргән саралар планын әҙерләнек. Йыл һайын май айында Өфөлә халыҡ-ара художество кәсептәре һәм һөнәрҙәре фестивален үткәрергә ҡарар иттеләр, унда төрлө төбәктәрҙән һәм илдәрҙән профессионалдар үҙҙәренең эштәрен тәҡдим итә аласаҡ".

Башҡортостан Башлығы шулай уҡ Сибайҙың таш һырлау сәнғәте өлкәһендә "Донъя һөнәрселәре ҡалаһы" булараҡ бар донъяға танылыу алыу өсөн бөтә шарттары барлығын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Сибайҙың таш менән эшләү тәжрибәһе бар. Бында уникаль оҫталар эшләй, һәм беҙ уларҙың башланғыстарын хупларға ниәтләйбеҙ. Өфөлә данлыҡлы Гәрәбә бүлмәһенә оҡшаш "Йәшмә бүлмәһе" проекты өҫтөндә эшләйбеҙ, ә Сибайҙа уның филиалын асырға ниәтләйбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

## ЙҮГЕРҘЕК!

**Быйылғы 7 сентябрҙә XI Өфө халыҡ-ара марафонда 10 150 профессиональ спортсы һәм йүгереү менән даими шөғөлләнеүсе, скандинав йөрөшөн һәм роллер спортын һөйөүселәр ҡатнашты. Улар Башҡортостандың район-ҡалаларынан, шулай уҡ 38 илдән, Рәсәйҙең 52 төбәгенән һәм 185 ҡалаһынан килгәйне. Марафонда йүгереүселәрҙең иң өлкәненә - 87 йәш, ата-әсәһе менән бергә "йүгергән" иң кеселенә алты ай ине. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Денис Назаров белдереүенсә, марафонды уҙғарыу тарихында ҡатнашыусылар һаны буйынса быйыл рекорд ҡуйылған.**

Һәр кем үҙ көсөнә һәм әҙерлегенә ҡарап, йүгереү һәм скандинав йөрөшө өсөн 2 км, 5 км, 10 км, 21,1 км, 42,2 км аралыҡтағы дистанциялар һайлай алды. Балалар старттары 50 - 200 м тәшкил итте. Бишенсе йыл рәттән ҡатнашыусылар тиҙлекле роллерҙарҙа 10 км араға уҙышты. Һәр ҡатнашыусыға фирма футболкаһы, иҫтәлекле бүләктәр, ә финишта эксклюзив миҙал тапшырылды. Трассала туҡланыу нөктәләре эшләне, спортсыларға 400-ҙән ашыу ирекмән ярҙам итте.

42,2 саҡрым арауыҡта Өфө халыҡ-ара марафонында Виталий Дьяконов, Ульяна Шарикова еңеү яуланы. 21,1 км дистанцияһында өсөнсө йыл рәттән беренсе булып Денис Вәлитов килде, ҡатын-ҡыҙҙар араһында "алтын"ды Анна Шобухова алды. 10 саҡрым арауыҡта Дмитрий Крыслов, Галина Зиятдинова еңеүсе булды.

Спортсыларҙы дәртләндереү өсөн БР Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған спорт мастеры, фехтование буйынса олимпия чемпионы Аделина Зағиҙуллина һәм башҡа рәсми ҡунаҡтар стартҡа баҫты."Профессионалдар һәм һәүәҫкәрҙәр өсөн ошондай ҙур спорт байрамының ойошторолоуы бик мөһим. Конкуренттар төрлө ҡалаларҙан килеүе сәм генә өҫтәй. Мин тәүҙә өсөнсө булып килә инем, өсөнсө әйләнештә ҡыҙҙарҙы ҡыуып үтә башланым, ә дүртенсеһендә алға сыҡтым", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты марафон еңеүсеһе Ульяна Шарикова.

## ГЕОЛОГ БУЛЫРҒА ӘҘЕРЛӘНЕП...

**Башҡортостанда "ГеоСаҡырыу" ("Геовызов") халыҡ-ара чемпионаты башланды. Чемпионатта ҡатнашыусыларҙы һәм ҡунаҡтарҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров сәләмләне.**

"Чемпионатты республика өсөнсө тапҡыр ҡабул итә, ул йылдан-йыл популярлаша бара. Сарала иң яҡшы студенттар, буласаҡ геологтар ҡатнаша. Улар ошо һөнәрҙең абруйын күтәрә, ә Башҡортостан геология фәненең үҙәгенә әүерелә. Ер аҫты байлыҡтары, үҙенсәлекле тәбиғәте булған республикабыҙ өсөн был бик мөһим. Йәштәр бер нисә көн дауамында теоретик белемен камиллаштыра, практик күнекмәләрҙе үҙләштерә. Республиканың төрлө төбәктәренә экскурсиялар ойоштороло. "ГеоСаҡырыу" чемпионаты - Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса федераль агентлыҡ менән берлектә алып барылған күп планлы ҙур эштең бер өлөшө. Башҡортостан чемпионатты үткәреү өсөн даими майҙансыҡ булырға әҙер", - тип яҙҙы республика етәксеһе социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл чемпионатта донъяның 16 иленән: Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Беларусь, Алжир, Гана, Эфиопия, Монголия, Палестина, Мозамбик, Гвинея, Көньяҡ Африка Республикаһы, Буркина-Фасо, Ираҡ, Зимбабве, Ҡытай һәм Мысырҙан 300 кеше ҡатнаша. Студент-геологтар ун бер көн буйына ялан шарттарында үҙҙәренең белемен һәм оҫталығын күрһәтә.

*ҠЫҪҠАСА*

## КЕМ ИСЕМЛЕ УРАМДАР?

**Өфөгә ҡараған Нуғай ҡасабаһында 118 урам, тыҡрыҡ һәм бульварға исем бирелде.** Ҡарар Өфө ҡала советы ултырышында раҫланды. Мэрияның матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, яңы атамаларҙа Советтар Союзы Геройҙары Николай Морев, Әнүәр Абдуллин, Нурулла Сафин, Алексей Калганов, Мостафа Ғәзизов исемдәре мәңгеләштерелгән. Урамдарҙың береһенә 2024 йылда һәләк булған Рәсәй Геройы Илдар Суфияров исеме бирелгән. Геройҙар менән бер рәттән ҡаланың топонимик картаһында күренекле мәҙәниәт эшмәкәрҙәре: дирижер Ғәйнетдин Моталов, композитор Сергей Миролюбов, яҙыусы Яныбай Хамматовтың исемдәре сағылыш тапты. Шулай уҡ Рәсәй Геройҙары, Еңеүселәр, Гармония, Шифалы, Шахмат, Яңы Күл, Ышаныс урамдары; Шишмәле, Кристалл, Ҡарамалы, Томанлы тыҡрыҡтары бар.

✓ **Өфө ҡала хакимиәте ҡарары менән алкоголде ваҡлап һатыуға юл ҡуйылмаған ойошмалар һәм объекттар исемлегенең яңы редакцияһы раҫланды.** Исемлектә бөтәһе 1429 объект: мәктәптәр, балалар баҡсалары, юғары уҡыу йорттары һәм колледждар, өҫтәмә белем биреү ойошмалары, медицина учреждениелары, автомәктәптәр, стоматология кабинеттары, ятаҡтар һәм башҡалар. Объекттар исемлеге 2014 йылда төҙөлгән. Өфө хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, яңы редакцияла уны 6 яңы ойошма: 3 шәхси балалар баҡсаһы, "Меги" клиникаһы филиалы, Дим биҫтәһендәге Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн реабилитация үҙәге һәм "Орион" ижад һарайы филиалы индереп киңәйттеләр. Бынан тыш, 10 белем биреү учреждениеһының исеменә үҙгәреш индерелде.

✓ **Өфөлә төҙөлөп ятҡан фатирҙар икенсел торлаҡтан күпкә ҡиммәтерәк.** Хәҙер әҙер торлаҡ менән сағыштырғанда яңы төҙөлгән йорттарҙың ҡиммәт булыуы шулай булырға тейеш һымаҡ ҡабул ителә, ә 2020 йылға тиклем хәл башҡаса ине. "Барыһы өсөн дә ипотека" индерелеү менән яңы фатирҙарҙың хаҡы артып китте, тип билдәләй риэлторҙар. "2020 йылдың уртаһында уҡ яңы төҙөлгән йорттарҙың бер квадрат метры икенсел торлаҡтың "квадраты"нан 3,5 процентҡа, 2021 йылда - 5,1 процентҡа, 2022 йылда - 16,7 процентҡа, 2023 йылда - 12,9 процентҡа, 2024 йылда - 18 процентҡа ҡиммәтерәк тип баһаланды. Хәҙер бөтәһе лә торлаҡ комплекстарындағы объекттарҙың даими баҙарҙағыға ҡарағанда күпкә ҡыйбатыраҡ булыуына күнеккән, был ҡасан да булһа үҙгәрер тип уйламайбыҙ", - тип белдерҙеләр "Фатирҙар донъяһы"нда. Өфөлә яңы төҙөлгән торлаҡтың "квадрат"ы әҙер фатирҙың "квадраты"нан 37 процентҡа ҡиммәтерәк (171,1 мең һум һәм 125 мең һум). Уртаса яңы фатирҙың уртаса хаҡы - 13 процентҡа тиерлек ҡыбараҡ: июль йомғаҡтары буйынса 7,377 миллион һум һәм 6,536 миллион һум.

**Элина ӘХМӘТОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Сибайҙа ҡалаға нигеҙ һалыныуға 70 йыл тулыуға арналған юбилейға арнап, 980 килограмм ауырлыҡтағы сәк-сәк әҙерләнгән. Милли ризыҡтың оҙонлоғо алты метрҙан ашып киткән. Уны 15 көн буйына 22 ашнаҡсы бешергән. Кондитерҙар әйтеүенсә, сәк-сәк өсөн 6,5 мең йомортҡа, 123 килограмм бал һәм 330 килограмм он кәрәк булған.

✓Республика Хөкүмәтенең аҙналыҡ кәңәшмәһендә вице-премьер - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов, республиканың шәкәр заводтары тулы ҡеүәтенә эшләй башланы, тип белдерҙе. Әле майҙандарҙың яҡынса 7 проценты йыйып алынған, 132 мең тонна тамырҙаҡ сығарылған. Шулай уҡ ҡайһы бер хужалыҡтар ҡарабойҙай йыйыуға тотонған, майҙандарҙың 4 процентнан ашыуы һуғылған. Иген менән бер үк ваҡытта майлы культуралар баҫыуҙарында ла эштәр ҡайнай. Әлеге ваҡытта майҙандарҙың 5,5 проценты һуғылған, 60 мең тонна майлы орлоҡ келәттәргә һалынған.

✓Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре Вилдан Ғәлин иҫтәлегенә волейбол буйынса һәүәҫкәр турнир ойоштороло. Республика киң мәғлүмәт саралары журналистары командалары араһында ярыштар Вилдан Ғәлиндың тыуған төйәгендә - Ишембай районының Урман-Бишҡаҙаҡ ауылында үткәрелә. Спорт һөйөүселәр 2025 йылдың 20 сентябрендә йыйыла. Уйындар сәғәт 10-да башлана. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Вилдан Ғәлин 2024 йылдың сентябрендә 45 йәшендә ҡапыл арабыҙҙан китте. Ул үҙе тураһында яҡты хәтирәләр генә ҡалдырҙы, башҡорт журналистикаһы үҫешенә тос өлөш индерҙе. 6+

✓Баймаҡ районынан Гүзәл менән Асҡат Мәжитовтар "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалына лайыҡ. Башҡортостан Республикаһы Башлығының 2025 йылдың 2 сентябрендәге тейешле указы рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. 2014 йылдың 21 ноябрендә булдырылған юғары награда Мәжитовтар балаларын тәрбиәләүҙәге ҡаҙаныштары, ғаилә ҡиммәттәрен һәм традицияларын һаҡлауға һәм нығытыуға ҙур өлөш индергәне өсөн бирелә.

✓Республикала йәй миҙгелдә 9517 кеше талпандан зыян күргән, улар араһында - 3415 бала. Талпан энцефалиты менән зарарланыуҙың 13 осрағы теркәлгән, 22 талпан боррелиозы асыҡланған. Был турала Роспотребнадзорҙың БР буйынса идаралығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. 2024 йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда, талпандан зыян күреүселәр һаны артҡан. Былтыр ҡан эҫкес бөжәктәр 8105 кешене тешләгән. Ведомствонан белдереүҙәренсә, Башҡортостандың 42 административ территорияһы талпан энцефалиты буйынса эндемик йәһәттән ҡурҡынысы. Табиптар әйтеүенсә, көҙгөһөн дә энцефалит һәм боррелиоз менән зарарланыу хәүефе һаҡлана.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## БУЛАТОВ ХОҘАТ СӘЛИМЙӘН УЛЫ

Х.С. Булатов - 112-се Башҡорт (16-сы Черниговский) гвардия кавалерия дивизияһының танкыға ҡаршы орудие командиры, гвардия сержанты. Советтар Союзы Геройы. Ул 1906 йылдың 15 сентябрендә Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙенең (хәҙер Башҡортостан Республикаһы Әлшәй районы) Себенле ауылында Сәлимйән Булатовтың ғаиләһендә донъяға килә. Милләте - башҡорт, ата-бабалары илекәй мең ырыуынан була. Хоҙат тыуған ауылында башланғыс белем ала, ауыл хужалығы эштәрендә әүҙем ҡатнаша, һуғышҡа китер алдынан колхозда ферма мөдире була.

Ҡыҙыл Армияға 1941 йылдың июнендә Әлшәй районы хәрби комиссариаты тарафынан саҡырыла. 1942 йылдың майынан Брянск, Көньяҡ Көнбайыш, Ялан, Үҙәк, Белорус, 2-се һәм 1-се Белорус фронттарында хеҙмәт итә.1943 йылда ВКП(б) сафына инә һәм шул уҡ йылда СССР-ҙың иң юғары наградаһына лайыҡ булырлыҡ батырлыҡ күрһәтә.

Ул 16-сы Черниговский кавалерия дивизияһының (Үҙәк фронт, 61-се армия, 7-се гвардия кавалерия корпусы) 58-се гвардия кавалерия полкы составында танкыға ҡаршы орудие командиры вазифаһында Днепр йылғаһы буйында барған дошмәнле алыштарҙа ысын яугирлыҡ өлгөләрен күрһәтә. Сержант Булатов 1943 йылдың 27 сентябрендә Белорус ССР-ы Нивки ауылы янында Днепрҙы аша сыҡҡанда һәм 29 сентябрҙә Галки ауылы өсөн барған яуҙарҙа айырыуса ҡыйыу алыша, уның расчеты, орудиенан мәргәндәрсә атып, дошмандың пулеметтарын, танкыларын сафтан сығара, байтаҡ һалдат һәм офицерҙарын юҡ итә. Батыр башҡорт артиллеристары, яулап алынған плацдармда ныҡ тороп, беҙҙең частарҙың алға табан барыуына булышлыҡ итә. Ошо алыштарҙа күрһәткән батырлығы өсөн уға, СССР Юғары Советы Президиумының 1944 йылдың 9 февралендә Указына ярашлы, Ленин ордены һәм Алтын миҙал тапшырылып, Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Герой башҡа хәрби ҡаҙаныштары өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, "Батырлыҡ өсөн" һәм "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" тигән боевой миҙалдар менән дә бүләкләнә.

Һуғышты гвардия өлкән сержанты званиеһында тамамлай. 1945 йылда демобилизацияланғандан һуң тыуған ауылы Себенлегә әйләнеп ҡайта. Батыр яугир БАССР-ҙың Эске эштәр министрлығы органдарында хеҙмәт итә, артабан Әлшәй районының "Мир" колхозында балыҡсылар бригадаһы бригадиры, колхозда янғын һүндереүсе булып эшләй.

1982 йылдың 2 ғинуарында Себенле ауылында вафат була, шул уҡ ауылда ерләнгән. Уның тыуған ауылының бер урамы герой исемен йөрөтә. Ауыл уртаһында башҡорт ҡаһарманы Х.С. Булатовҡа һәйкәл ҡуйылған. Ул - райондағы туғыҙ геройҙың береһе. 2020 йылдың май айында Раевка ауылында Әлшәй районында тыуып үҫкән батырҙарға, шул иҫәптән Х.С. Булатовҡа ла бюст асыла.

КӨН ТЕМАҺЫ

# РУЛГӘ УЛТЫРҺАҢ, ХОЛҠОҢДО ҮҘГӘРТ!

**Август көндәренең береһендә таңғы сәғәт 5-тә Шишмә - Ҡырғыҙ-Миәкә юлында транспорт йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм ителгән 20 йәшлек егет ВАЗ-2107 машинаһында ҡаршы һыҙатҡа сығып, "Лада Калина"ның корпусын һыҙырып үткәс, артабан "Газель" менән "маңлайға-маңлай" йәнтәслим бәрелешә. Алынған йәрәхәттәрҙән йәш егет шундуҡ йән бирә, ҡалған ике водитель медицина ярҙамы алырға оҙатыла.**



Беҙ танышып барған яңылыҡтар таҫмаһында республика юлдарында ошондай күңелһеҙ хәлдәр хаҡында хәбәр булмаған көн һирәктәр. Ә был августағы осраҡ айырыуса гәжәпкә ҡалдыра: район-ауыл-ара юлдарҙа, гәҙәттә, транспорт һирәк йөрөй, айырыуса иртәнге сәғәт биштә. Унан ары йәш кенә был егет ошо хәлдән алда юл-транспорт ҡағиҙәләрен боҙоп та өлгөргән була - ул машина йөрөтөргә хоҡуғы булмаған килеш руль артында юлға сыға. Бер һәм берәгәйле ошондай осраҡтарҙа фажиғәгә илтеүсе әллә күпме сәбәптәр асыҡлана, уйлап ҡараһаң. Әмәлгә ҡалғандай, тап ошо көндәрҙә Рәсәй Эске эштәр министрлығы быйылғы йылдың ете айы буйынса мәғлүмәттәр биргәйне. Унда әйтелеүенсә, Башҡортостанда үлемгә килтереүсе юл-транспорт ваҡиғаларының арта барыуы билдәләнә: республикала быйыл ғинуарҙан алып июлгә тиклемге ваҡыт эсендә юл фажиғәләрендә бөтәһе 220 кеше һәләк булған. Был былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда, 5,8 процентҡа күберәк һәм ошо күрһәткес менән республика Волга буйы федераль округындағы 14 төбәк араһында беренсе урында тора.

Хәлдәр торошо кимәле, гәҙәттә, сағыштырыуҙан сығып баһалана. Ошо йәһәттән ҡарағанда, беҙҙән ут күрше Татарстанда юлдарҙа үлем осраҡтары - 163, Нижегород өлкәһендә - 162 һ.б. Рәсәй буйынса дөйөм хәл дә йыуанырлыҡ түгел: быйыл ете ай эсендә Рәсәй буйынса юл-транспорт фажиғәләрендә барлығы 7 мең дә 239 кеше яҡты донъя менән хушлашҡан! Был йәһәттән республика хәленә әйләнеп ҡайтҡанда, үлем менән бәйле юл аварияларының бер бөгөн генә күҙәтелмәүе, ә бынан алдағы йылдарҙа ла көн тәртибендә тороуы асыҡлана. Мәҫәлән, 2023 йылдың 8 февралендә "АиФ-Өфө" хәбәрсеһе Юлия Байджанова республикала дүртенсе йыл рәттән юл фажиғәләрен кәметеү буйынса тырышлыҡтар хаҡында яҙып сыҡҡайны. 2019 йылда юлдағы үлем хәлдәре 500-ҙән ашып киткән булһа, күрелгән ҡайһы бер саралар булышлығында күңелһеҙ күрһәткесте 15 процентҡа кәметеүгә өлгәшелә һәм һөҙөмтәлә 2022 йылда 43 мең аварияла 409 кеше һәләк була, шуларҙың 14-е балалар.

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# НИҢӘ ТҮЛӘҮЛЕ?



**"Атаһы торор - улы һөйләр, әсәһе торор - ҡыҙы һөйләр!" Ниндәй тәрән мәғәнәле, тормоштан алынған хаҡ һүҙҙәр. Ысынлап та, бөгөн нәҡ шундай заманда йәшәйбеҙ түгелме ни?**

Бала-сағалар, йәштәр хәҙер ололарҙы әллә ни һанламай, уларҙың һүҙенә танау сирып, рыя ғына ҡарай. Кемгә өйрәтәһең, йәнәһе. Ахырҙа, күп осраҡта йәштәр, ололар һүҙен аяҡ аҫтына һалып, күрәләтә һәләкәткә барғандарын аңлаймы икән? Һуңлап, бик һуңлап ҡына иҫтәренә төшә лә бит ололар һүҙе. Тик ваҡытты кирегә бороп булмай шул.

Бөгөн халыҡ үҙ асылына ҡайта, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ тергеҙелә, олоһо ла, кесеһе лә күпләп дингә ылыға. Бик хуп, бик мәслихәт, тип әйтергә генә кәрәк тә бит. Тик... Ана шул "тик"тәр генә тынғы бирмәй күңелгә. Кисә генә Алланы ла, мулланы ла танырға теләмәгән бәгзеләр дингә үҙ файҙаһына борорға, ғибәҙәтте бизнес сығанағына әйләндерергә тырыша. Был бигерәк тә ҙур ҡала-ауылдарҙа ныҡ һиҙелә. Ҡайһы бер Аллаһ йорттарында үҙенә күрә таксалар булдырылған хатта: балаға исем ҡушыу, йыназа уҡыу, әрүахтарға аят бағышлап, доға ҡылыу, никах йолаһын атҡарыу һ.б. эштәргә билдәле бер хаҡтар ҡуйылған. Ә дөрөҫмө был, шул ҡәҙәрем бол түгерлек ниндәй көс сығара дин әһелдәре? Был һорауҙар күбеһенсә яуапһыҙ ҡала.

**Мотал РӘМОВ,**
**РФ һәм БР журналистар союзы ағзаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓3 сентябрҙән Бөрө ҡалаһы мэры вазифаһын Өфөнөң Октябрь районы Төҙөкләндереү хеҙмәтенең элекке директоры Юрий Иванов башҡара. Ҡала советында уның кандидатураһын хупланылар, тип хәбәр иттеләр Бөрө районы хакимиәтенән. Билдәле булыуынса, Юрий Иванов 1975 йылдың 8 февралендә тыуған. Бөрө хакимиәтенең финанс идаралығында һәм Башҡортостандың Финанс министрлығында, шулай уҡ "Башавтотранс"тың Бөрө филиалы етәксеһе булып эшләгән.

✓Республикала "Мәктәпкә йыйынырға ярҙам ит" акцияһы барышында 16 миллион һумға яҡын аҡса йыйылған. Йәмғеһе 10 295 балаға ярҙам күрһәтелгән, уларҙың 1882-һе - МХО-ла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренән. Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова йыл һайын ойошторолған изге акцияға йомғаҡ яһап, ошо мәғлүмәттәрҙе еткерҙе. "Балалар мәктәпкә портфелдәр, мәктәп кәрәк-яраҡтары һәм яңы форма менән генә түгел, ә тормошта иң мөһим һабаҡ - башҡаларға ярҙам итеүҙең изге ғәмәл икәнен аңлап барҙы. Ә изгелек әйләнеп ҡайта" , - тип яҙа Ленара Иванова социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы мәғлүмәте буйынса, 2025 йылда ведомствоға айыуға һунар итеүгә рөхсәт һорап, 2,5 меңдән ашыу ғариза килгән. Республикала йәшәгән 130 кеше һунарсы билетын алған. Йәрәбә тартыу беренсе тапҡыр электрон форматта үткәрелгән. Белгестәр әйтеүенсә, төбәктә һоро айыуҙарҙың популяцияһы арта. Урман хужаларының ялан-ҡырҙарҙа ла, ауылдар тирәһендә лә кешеләр менән осрашыуы йыш күҙәтелә. Һунар тәбиғәттә балансты һаҡлауҙың бер ысулы булып һанала. Айыуҙарға һунар йыл һайын август айында башлана.

✓Хәйбулла районының Яңы Ергән ауылы эргәһендә Таналыҡ йылғаһы аша күперҙе капиталь ремонтлау тамамланыуға яҡынлаша, тип хәбәр итә үҙененең социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәһендә район етәксеһе Рөстәм Шәрипов. Әле объектта, балка-ара йөйҙәрҙе бетонлау буйынса эштәрҙе тамамлап, монолит конструкцияларҙы нығыта башлағандар. Аҡъярҙан Ырымбур өлкәһе сигенә тиклем автомобиль юлында ла ремонт бара. Подрядсы 7,6 км участкала иҫке асфальтты алып, юл ҡаҙнаһын нығыта башлаған.

✓Быйыл Башҡортостанда күп фатирлы йорттарҙа файҙаланыу ваҡыты үткән бөтә лифттар, атап әйткәндә, 231 йортта 620 лифт алмаштырыласаҡ, тип хәбәр итә БР Капиталь ремонт фонды. 120 йортта 361 лифт алмаштырылған да инде. Бөгөнгө көндә 39 йортта 71 лифтты алмаштырыу буйынса эштәр бара. Республикала, дөйөм алғанда, алдағы йылдарҙа 4865 лифт йәки уларҙың 40 проценты алмаштырыласаҡ. Быға яҡынса 13,5 миллиард һум йәки капиталь ремонт планын дөйөм финанслауҙың 33 проценты йүнәлтелә.

✔ ***Үлем осраҡтары менән бәйле автоаварияларҙың иң беренсе сәбәбе - эскелек тип табыла. Һәләкәттәрҙең 90 процент самаһы эскән килеш рулгә ултырған водителдәр ғәйебе менән эшләнә.***



Шул йылдарҙа автоһәләкәттәр иң йыш булған трассалар инфраструктура буйынса тәртипкә килтерелә, төҙөкләндерелә, ер аҫты һәм өҫтө юл аша сығыу юлдары, тротуарҙар һалына, светофорҙар, махсус билдәләр ҡуйыла. Һәм, ысынлап та, бөгөнгө көнгә ҡарата юл һәләкәттәрендә үлем һаны ул йылдарҙан алып ныҡ кәмегән. Ләкин шул хәлдә лә әле республика федераль округ буйынса "беренселекте" бирмәй.

Күрәһең, был йәһәттән күп нәмә автотранспорт йөрөтөүсе водителдәрҙең шәхси сифаттарына, ҡылыҡтарына ла ҡағыла торғандыр. Эскән килеш руль артына ултырыусылар, транспорт йөрөтөүгә хоҡуғы булмағандар арҡаһында күпме автоһәләкәт ҡылына! Күпселек осраҡтарҙа, рейд материалдарынан күренеүенсә, ғәйепле водителдәр еңелсә ҡурҡыу менән ҡотола. Юлдарҙа тәртипһеҙ ҡыланыу, хатта ки башбаштаҡланыу сәбәптәренең береһе - яза сараларының тейешенсә ҡулланылмауылыр, бәлки. Юл ҡағиҙәләрен боҙоусыларға ҡарата йомшаҡлыҡ, законды һанламау, язаһыҙлыҡ килтереп тыуҙыра ла инде әлеге үлемесле хәлдәрҙе.

Шуныһы йыуандыра: республикала Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге буйынса дәүләт инспекцияһы даими рәүештә рейдтар ойоштора. Ведомство етәксеһе Владимир Севастьянов хәбәр итеүенсә, 15 августан алып ДПС инспекторҙары участка полицияһы һәм юл хәүефһеҙлеген күҙәтеүсе башҡа ойошмалар менән берлектә автоһәләкәттәр иң йыш булып тороусы Өфө-Бөрө-Өфө, Өфө-Зубово-Шишмә, Өфө-Инйәр-Белорет, Дүртөйлө-Нефтекама, М-5 "Урал" (Шишмә-Ҡырғыҙ Миәкә) йүнәлештәрендәге трассаларҙа контролде айырыуса көсәйттә.

Киң күләм тикшереүҙәр Өфө ҡалаһына ла ҡағыла. 15 августа, мәҫәлән, Комаров һәм Интернационал урамдарына Юл-патруль хеҙмәтенең ҡала полкынан өҫтәмә көстәр йәлеп ителгән. ЮХХДИ постары халыҡ күп йыйылған урындарҙа, ял итеү зоналарында дежурлыҡ итә. Автоһәләкәттәр йәһәтенән ҡаланың үҙ проблемалары: транспорт сараларының күплеге, тар урамдар һәм әлеге лә баяғы "текә" водителдәр ҡылыҡтары. Өҫтәүенә, былай ҙа тығын ҡала юлдары ағымына мопедсылар менән электр самокатында йөрөргә әүәҫтәр килеп ҡушылды һәм улар арҡаһында ла йыш ҡына авария хәлдәре килеп тыуа.

"За рулем" журналының статистика материалдарына таянып үҫкәрелгән тикшеренеүҙәрендә үлем осраҡтары менән бәйле автоаварияларҙың иң беренсе сәбәбе - эскелек тип табыла. Һәләкәттәрҙең 90 процент самаһы эскән килеш рулгә ултырған водителдәр ғәйебе менән эшләнә. Өҫтәүенә, шуларҙың өстөн бер өлөшө транспорт йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм ителгән кешеләр булып сыға.

Икенсе сәбәп тип журнал ҡаршы һыҙатҡа сығыу фактын килтерә. Был, ғәҙәттә, ике һыҙатлы юлдарҙа була һәм күбеһенсә йома, шәмбе, йәкшәмбе көндәрендә, тип тә аныҡлай "За рулем".

Өсөнсө сәбәп - юғары тиҙлек. Был автоһәүәҫкәрҙәр араһында иң киң таралған ғәҙәт, штрафтарҙың да күпселеге тап шуның өсөн сәпелә.

Дүртенсе сәбәп - төндә юл йөрөү. Мәғлүм булыуынса, тәүлектең ҡараңғы мәле автомобиль йөрөтөүселәр өсөн иң хәүефле мәл булып ҡала килә.

Сәбәптәр күп, әлбиттә, ләкин нимә генә тимә - руль артына ултырғанһың икән, ҡылығыңды үҙгәрт, тип әйтке килә водителдәргә, сөнки шул ваҡыттан алып улар үҙҙәре өсөн генә түгел, башҡалар ғүмере өсөн дә яуаплылыҡ ала бит. Ә беҙҙең арала тап машинаһына ултырып алғас та текәлеген күрһәтә башлаусылар байтаҡ: кемгәләр сабырлыҡ, әҙәплелек етмәй; кемдәрҙер бер-береңә юл бирергә теләмәй, хатта туҡталып, машиналарынан сығып, һуғыша башлайҙар. Айырыуса "текә авто" хужалары үҙҙәренең башҡаларҙан өҫтөн булыуын күрһәтергә теләй, ахырыһы. Ләкин уларҙың миллиондарса һумлыҡ ғорурлыҡ предметы бөгөн берәүгә лә ҡыҙыҡ түгел, сөнки еңел автомашиналар, хаҡынамарҡаһына ҡарамаҫтан, кеше аңында йәйләп зиннәтле милек төшөнсәһенән уңайлы һәм тиҙ юл йөрөү сараһына әйләнде. Бары тик һәр ерҙә һәм һәр саҡ, айырыуса юлға сыҡҡанда, кеше булып ҡала белеү мотлаҡ. Тап ошо сифаттар байтаҡ һәләкәттәрҙән аралар ине юлаусыларҙы. Хәйерле юлдар теләйек уларға!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ПЕНТАГОН - ҺУҒЫШ МИНИСТРЛЫҒЫ

**Үткән аҙналағы күңелдә йылыҡкан хәбәрҙәрҙең береһе - күптән көтөлгән һәм донъялағы иң ҡеүәтле проекттарҙың береһенә дәғүә итеүсе "Себер көсө - 2" ("Сила Сибири-2") газ үткәргесен төҙөү хаҡында меморандумға Мәскәү менән Пекиндың ҡул ҡуйыу ваҡиғаһы булды.**

Рәсәй энергетика министры Сергей Цивилев хәбәр итеүенсә, 30 йылға иҫәпләнгән проект әлегә техник-иҡтисади нигеҙләмә алыу өҫтөндә. Йылына 50 млрд кубометр ҡеүәтле һәм 7 мең километрға һуҙыласаҡ был маршрут Монголия аша үтәсәк. Ҡытайҙар иҫәбенсә, улар өсөн ягыулыҡ хаҡы Европалағынан арзан булыуы күҙҙә тотола, ләкин киләсәкке был төҙөлөштөң бөтөн шарттары ла, айырыуса хаҡтар мәсьәләһе лә әлегә билдәһеҙ: экспарттар әйтеүенсә, "меморандум- асылда ниәттәр хаҡында декларация ғына", ә алда - ике-яҡ ара хеҙмәттәшлек һәм контрактҡа ҡул ҡуйыу этаптары тора. Үткәргес төҙөлөшөнөң шулай уҡ тиҙ генә башҡарыласаҡ эш түгеллеген дә аңлау кәрәк.

Ә был ваҡытта Германияның Конституция һәм суверенитет өсөн советы башлығы Ральф Нимайер белдереүенсә, немец сәнәғәте Рәсәй энергия ресурстарына мохтажлыҡ кисерә һәм "Төньяҡ ағым" ("Северный поток") газ үткәргесен тергеҙеү мәсьәләһе менән ҡыҙыҡһына. Әлеге ваҡытта Германияға шыйыҡлатылған тәбиғи газ Норвегиянан танкерҙарҙа АҠШ аша Гамбургҡа ташыла һәм был ифрат ҡиммәткә төшә. Ә "Северный поток-2" аша ҡыуҙылған ҡеүәттәрҙең яртыһы ғына ла ГФР-ҙа энергия ресурстарына мохтажлыҡтың тотош өс өлөшөн ҡаплауға етер ине, тип һөйләй Нимайер ТАСС хәбәрсеһе менән әңгәмәһендә. Немец киң мәғлүмәт саралары яҙып сығыуынса, ягыулыҡты АҠШ-тан һатып алыу - Германияның сәйәси капитуляцияһы ул. Немец хоҡуҡ һағы органдары "Төньяҡ ағым" газ үткәргесен шартлатыуҙа украин махсус хеҙмәттәрен ғәйепләй. Ләкин Рәсәй Президенты ярҙамсыһы, РФ Диңгеҙ коллегияһы рәйесе Николай Патрушев был фаразды тәнҡит утына тотто: Германия власталары үҙ территорияһына теракт маҡсатында килеп ингән сит ил кешеләрен контролдә тотмай икән, тимәк, был еңөйәт туранан-тура НАТО-ның юғары профессиональ кимәлдәге махсус хеҙмәттәре ҡатнашлығында ҡылынған. Рәсәйҙең Европаға һуҙылған "Северный поток" газ үткәргестәренең 1-сеһе лә, 2-сеһе лә 2022 йылдың 26 сентябрендә шартлатылғайны. Америка журналисы Сеймур Херш, билдәле сығанаҡҡа һылтанма яһап, ошо диверсия буйынса тикшереүҙәрҙе баҫып сығарҙы һәм Baltops күнекмәләренә "ышыкланып", Норвегия белгестәре булышлығында АҠШ Хәрби-диңгеҙ көстәре водолаздарының Рәсәй газ үткәргестәре аҫтына шартлатҡыстар һалыуы хаҡында яҙып сыҡты. Уның мәғлүмәттәре буйынса, диверсия хаҡында АҠШ-тың ул ваҡыттағы президенты Джо Байден ҡарар ҡабул иткән. Быйыл 21 августа ГФР прокуратураһы юллауы буйынса терактты башҡарыусыларҙың береһе - 49 йәшлек украин гражданы Сергей Кузнецов ҡулға алынды.

Хәйер, Германия етәкселеген ягыулыҡ мәсьәләһе борсомай, күрәһең. Ил парламентының "Сара Вагенкнехт" партияһы лидеры белдереүенсә, немец властары махсус рәүештә Рәсәй менән ҡапма-ҡаршылыҡҡа бара һәм аҡылһыҙ рәүештә ҡоралланыу сығымдарын арттыра. Франция президенты Макрон да немец әшнәләренән ҡалышмай. Ул илдәге бюджет көрсөгөн, социаль мәсьәләләр, мәғариф өлкәһендәге бөтөн бәләләрҙе лә Рәсәйҙе ғәйепләүҙә ғәҙәт итеп алған. Ләкин Францияның айыҡ аҡыллы сәйәсмәндәре Макрондың ил халҡы алдында яуаплылыҡтан ҡасыу өсөн еңел юл һайлауын күптән аңлаған. Эш хатта шуға барып еткән: парламенттың "Непокоренная Франция" һул фракцияһы лидеры Матильда Маро белдереүенсә, уның партияһы президент Макронға импичмент белдерергә тәҡдим әҙерләй. Украина конфликтына ҡыҫылып, башкөллөй хәсәтсөлөк һәм алдаҡ менән шөғөлләнеүсе Макрон, күренеүенсә, үҙенең Франция президенты бурыстарын бөтөнләй "иҫенән сығарған". Әйткәндәй, 7 сентябрҙә Парижда Макрон етәкселегенә ризаһыҙлыҡ белдереүсе халыҡ ҙур сәйәси митингыға сыҡты.

Үткән йома РФ Президентының Ҡытайға оҙайлы эш сәфәренән һуң Владивосток форумында ҡатнашып, шунан ҡайтышлай Һамарға һуғылыуы һәм "Ростех"тың урындағы "ОДК-Кузнецов" предприятиеһы нигеҙендә двигатель төҙөү мәсьәләһе буйынса кәңәшмәлә ҡатнашыуы икенсе мөһим ваҡиға булды, сөнки унда Владимир Путиндың белдереүенсә, "двигатель төҙөү һәм уның үҫеше, технологик йәһәттән, шулай уҡ Рәсәй суверенитетын билдәләүсе төп күрһәткестәрҙең береһе. Әлеге ваҡытта Рәсәй элеккесә, авиация һәм ракета двигателдәре етештереүсе биш донъя илдәре илдәре (Рәсәй, АҠШ, Канада, Британия, Франция - **авт.**) иҫәбендә, тине Президент кәңәшмәлә сығыш яһап. Һуңғы дүрт йыл эсендә генә лә Рәсәйҙә етештерелеүсе авиадвигателдәр һаны 50 процентҡа артты һәм 791-ҙән 1227 данаға етте. Ә бына Ҡытай, Һиндостан, Иран әлегә был йәһәттән уңышҡа өлгәшә алмай, хатта донъяла иң яҡшы электроника эшләүсе Японияның да үҙ двигателе юҡ.

Мәғлүм булыуынса, 5 сентябрҙә Дональд Трамп Пентагонды уның 1949 йылға тиклемге атамаһын кире ҡайтарып (АҠШ оборона департаменты), Һуғыш министрлығы тип үҙгәртеү хаҡында указға ҡул ҡуйғайны, ошоноң менән бәйле АҠШ хакимиәтендә һәм Пентагонда ризаһыҙлыҡ сығыштары көсәйә бара. Американың Politico медиа-ойошмаһы яҙыуынса, чиновниктар ведомство атамаһын үҙгәртеүҙең ил ҡаҙнаһына миллиардтарса долларға төшәсәге хаҡында борсолоу белдерә: 40-лаған илдәге 700 меңләп объектта мисәттәрҙе алыштырыу, хәрби ведомстволарҙа бланктарҙы яңыртыу, хатта ки уларҙың ашханаларында салфеткаларға тиклем алмаштырыуы талап ителәсәк бит! Хәйер, нимә ул мисәт, салфеткалар... Трамптың указы тап сәптең үҙенә килеп тейҙе түгелме: Пентагондың күптән инде оборона министрлығы түгел, ә төрлө илдәр тыныслығын боҙоп, хәсәт һәм террор ойоштороп, украин нацистары ише террористарҙы долларға күмеп, хәрби ярҙам күрһәтеүсе һуғыш сукмары икәнлеге күптән билдәле бит инде, тик исематамаһы ғына асылына тап килмәй ине. Трамп был хатаны төҙәтте. Уның аңлатыуынса, яңы атама Американың "еңеүҙәргә илтеүсе көсөн" күрһәтеп торасаҡ, имеш.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Башҡортостан уксылары Татарстанда уҙған төбәк-ара турнирҙа 3 миҙал яуланы. Өфөнән уксы, билдәле хореограф Рәйес Низаметдинов уҡ атыу буйынса төбәк-ара турнирҙа еңеү яуланы. Был хаҡта республиканың Спорт министрлығынан хәбәр ителәр. Уҡ атыу буйынса төбәк-ара турнир Әлмәт ҡалаһында үтте. Турнирҙың приз фонды 200 000 һум ине. Миҙалдар өсөн илдең биш төбәгенән спортсылар көс һынашты. Турнир еңеүсеһе - Рәйес Низаметдинов, Дәүләкәндән Илмир Әхмәтйәнов һәм Өфө районынан Венера Юлдашбаева көмөш миҙалдар яуланы.

✔Башҡортостан Башлығы указына ярашлы, күренекле дәүләт эшмәкәре, Өфө ҡалаһының элекке мэры Павел Качкаевтың иҫтәлеге мәңгеләштерелә. Уның исемен Өфөнөң 110-сы мәктәбенә биреү, тормошон һәм ижтимағи әһәмиәтле эшмәкәрлеген сағылдырған документаль фильм төшөрөү ҡарала. Өфө ҡала хакимиәтенә Павел Качкаев исемендәге премия булдырырға тәҡдим ителә. Өфө урамдарының береһе Павел Качкаев исемен йөрөтәсәк. Ул йәшәгән йортҡа мемориаль таҡтаташ ҡуйыла. Өфө ҡалаһының Тарих музейында Павел Рюрикович Качкаевтың тормошона һәм эшмәкәрлегенә арналған тематик экспозиция асылырға тейеш.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө спортсыһы Родион Әлимовты бадминтон буйынса BWF халыҡ-ара серияһы турнирында еңеүе менән ҡотланы. Ул Мәскәүҙән Максим Оглоблин менән сығыш яһаны, финалда беҙҙекеләр Берләүкән Ғәрәп Әмирлектәре спортсыларынан көслөрәк булып сыҡты. 2022 йылдан башлап Рәсәй бадминтонсыларының халыҡ-ара аренаға был тәүге еңеүе, тип билдәләнә республика етәксеһе. Родион Өлфәт Мостафин исемендәге Спорт әҙерлеге үҙәгендә Эдгар Щербий етәкселегендә шөғөлләнә.

✔30 августан Өфө - Белорет - Учалы маршруты буйынса өҫтәмә автобус рейстары асылды. Был хаҡта "Башавтотранс" хәбәр итә. Дәүләт предприятиеһы мәғлүмәттәре буйынса, автобус көн һайын урындағы ваҡыт менән Учалынан - иртәнге 7-се ярты, Белореттан - иртәнге сәғәт 8-ҙә, Өфөнөң Көньяҡ автовокзалынан киске сәғәт 6-ла юлға сыға.

✔Башҡорт эстрадаһы йондоҙо Зәйнетдиндең улы тыуған. Ошо ҡыуаныслы яңылығы менән артист социаль селтәрҙәге сәхифәһендә уртаҡлашҡан. "Улым тыуҙы. 08.09.2025", - тип яҙған артист һәм ҡатыны Регинаға рәхмәт белдергән. Зәйнетдиндең ижадын һөйөүселәр уға улы тыуыу айҡанлы йылы ҡотлау һүҙҙәрен еткергән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Зәйнетдин икенсегә атай булды. 2023 йылда уның ҡыҙы тыуғайны.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Ҡәрҙәштәргә өйләнеүҙе тыйыу

Әйткәндәй, ырыу йәмғиәте ваҡытында ырыу төркөмөнөң нәҫел башы, терәге итеп табынған тотемы (ҡош, йәнлек, үҫемлек) булған. Башҡорттар тотем итеп ҡоштарҙы йөрөткән. Әйле төркөмөнә ҡараған Әйле (Әйҙе), Ялан Әйле, Һарт Әйле (Алтауҙы), Тырнаҡлы, Түбәләҫ, Мырҙалар, Төрөкмән, Дыуан, Ҡаратаулы ырыуҙарының тотемы, йәғни ҡошо - шоңҡар (бөркөт, торна, аҡҡош), төп тамғалары - ай тамға, дөйә муйын, һигеҙле, ағасы - тирәк (муйыл), ораны - һандал (салауат). Көҙәйҙәрҙең ҡошо - бөркөт (ҡарсыға), тамғалары - ҡаҙаяҡ, өҙәңге, һәнәк, тырма, ағасы - имән. Моғайын, борон тотемы - бөркөт, ағасы имән булған ырыуҙаштарға өйләнешеү ярамағандыр. Бер аймаҡ, ара ҡәрҙәштәргә парлашыу, һис шикһеҙ, тыйылған.

Ҡөрьәндең Ән-Ниса (Ҡатындар) сүрәһендә аныҡ билдәләнеүенсә, "һеҙгә инәйҙәрегеҙгә, ҡыҙҙарығыҙға, апай-һеңлеләрегеҙгә, атай-инәйегеҙ менән бер туған ҡатын-ҡыҙҙарға, ир һәм ҡыҙ туғандарығыҙҙың ҡыҙҙарына, һөт инәләрегеҙгә, имсәктәш апай-һеңлеләрегеҙгә, ҡатындарығыҙҙың инәләренә, һеҙ ҡушылған ҡатынға эйәрә килгән аҫрау ҡыҙҙарығыҙға (әгәр ҡатынға ҡушылмаған булһағыҙ, ул ваҡытта ғына гонаһ булмай), үҙ ҡанығыҙҙан булған улдарығыҙҙың ҡатындарына, ике ҡыҙ туғанға бергә өйләнеү тыйыла. Һәм һеҙгә ирле ҡатындарға өйләнеү тыйыла. Әгәр һеҙ тыйылған гонаһтарҙан һаҡланһағыҙ, беҙ һеҙҙе бәләкәй насар әйләрегеҙҙән алыҫ торғоҙ һәм гүзәл индереү менән индерербеҙ".

Башҡорт халыҡ ижадында йәш етмәйенсә ҡушылыу ярамағанлығы ла төҫмөрләнә. "Ғәҙел батша" әкиәтендә Хөсәйенде хан ҡыҙы менән икәүһен аҡ келәткә бикләп ҡуялар. Шул мәлдә егет:

- Мин һинең янда ҡуна алмайым, мин бәлиғ түгелмен, бәлиғ булғас, килеп алырмын, - тигән дә сығып киткән.

- Ярай, мәргән егет, һин ҡасан килеп алһаң да, мин көтөрмөн, - тип ҡыҙ вәғәҙә биреп ҡалған.

## Ир-атҡа үә ҡатын-ҡыҙға тыйыу

Ир-атҡа һәм ҡатын-ҡыҙға тыйыу һәм уны тотмаған өсөн язаға дусар ҡылыныу Әҙәм менән Һауа ғәйебенән килә. Аллаһы Тәғәләнең тыйыуын, әмерен үтәмәгәне өсөн Әҙәм ғәләйһиссәләмгә ун яза бирелә. 1. Аллаһы Тәғәләнең шелтәһе. Ҡөрьән Кәримдә әйтелә: "Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе был ағастан тыйманымы?" 2. Хөлләә һәм таждан яланғас ҡалыу. "Асылды был икәүҙең ғәүрәттәре" (Ҡөрьән Кәрим). 3. Әҙәм ғәләйһиссәләмдең йөҙө, тәне ҡаралды. 4. Ожмахтан сығарылды. 5. Әҙәм Һауанан йөҙ йыл, икенсе риүәйәт буйынса, ике йөҙ йыл айырылып торҙо. 6. Әҙәм менән шайтан араһында дошманлыҡ көсәйҙе. 7. Гонаһлы исемен күтәрҙе. 8. Шайтан Әҙәмдең балаларына һәм малдарына ҡатышты. 9. Донъя зинданына ябылып, һыуыҡ, эҫелек һәм төрлә ауырыуҙар менән һыналды. 10. Тормошона төрлә мәшәҡәттәр бирелде.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ҺУНҒАРИЯ БАШҠОРТТАРЫ

## Инеш һүҙ

**Башҡорт халҡының тарихы бай һәм уның әлегә өйрәнелмәгән өлкәләре байтаҡ. Шуларҙың береһе - боронғо дәүерҙәрҙә төрлә сәбәптәр арҡаһында тыуған иле Уралдан китеп, алыҫ-алыҫ ерҙәргә барып төпләнеп, шунда күп быуаттар йәшәгән башҡорттарҙың тарихы.**

Мәҫәлән, монгол-татар яуына тиклем күп быуаттар элек башҡорттарҙың бер өлөшө Венгрияға барып төпләнгәнлеге билдәле. Ғалим Нияз Мәжитов яҙыуынса, Арал менән Көньяҡ Урал араһында көн иткән бәшнәк ҡәбиләләре менән башҡорттарҙың бер өлөшө яҡын аралашып йәшәгән, союздаш булған. IX быуаттың башында бәшнәктәр уғыҙҙар менән һуғышта еңелгәс, көнбайышҡа, Волганың уң яғына күсенә. Улар менән башҡорттарҙың бер өлөшө лә китә. IX быуаттың уртаһында башҡорттар бәшнәктәр менән Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ яры буйына килеп, мадьярҙарҙы (венгрҙарҙы) көнбайышҡа күсенергә мәжбүр итә. Мадьярҙар IX быуаттың аҙағында Паннонияға (хәҙерге Венгрияға) барып төпләнә. Ә инде XI быуатта башҡорттар менән бәшнәктәр яңынан Көньяҡ Уралға ҡайта.

1236 йылда венгр монахы Юлиандың боронғо ата-бабаларының тыуған илен эҙләп, Башҡортостанға килгәнлеге билдәле. Бында ҡәрҙәштәрен осратыуы, улар менән аралашыуы хаҡында яҙып ҡалдырған. Бәлки, Юлиан христиан динен ҡабул иткән Венгрия башҡорто булғандыр. Сөнки Әхмәтзәки Вәлиди яҙыуынса, Зәкәриә Казвини XIII быуатта (вафаты 1283 йыл) Венгрия башҡорттарының күпселеге христиан, араларында хәнәфи мәҙһәбендәге мосолмандар бар, тип яҙып ҡалдырған. 1246 йылда Рим папаһының илсеһе Плано Карпини монгол ханы ставкаһына сәйәхәт ҡыла. Унда ул Болғарҙың эргәһендә Баскарт иле, йәғни "Бөйөк Венгрия" ("Магна Һунгария") ята, тип яҙа. 1320 йылда Венгриянан тағы бер монах Башҡортостанға сәйәхәт ҡыла. Миссионерлыҡ маҡсаты менән килгән монах Иоганка башҡорт ханының янында була, хандың үҙе һәм яҡындарының мосолман диненә мөкиббән бирелгән булыуы тураһында яҙып ҡалдыра.

Ғөмүмән, башҡорт ғалимдары тарафынан Венгриялағы башҡорттарҙың тарихы етерлек кимәлдә өйрәнелмәгән. Был йәһәттән философия фәндәре докторы Илшат Насировтың бынан байтаҡ йылдар элек "Башҡортостан" гәзитендә баҫылған "Венгриялағы башҡорттар" тигән мәҡәләһе иғтибарға лайыҡ. Ғалим теманы Сәғүд Ғәрәбстанының баш ҡалаһы Эр-Риядта уҡыған сағында өйрәнгән. Илшат Насиров мәҡәләһен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

# ВЕНГРИЯ МӘМЛӘКӘТЕНДӘ ЮҒАЛЫУ



**Һуңғы йылдарҙа башҡорттарҙың үҙенсәлекле тарихына, милли-азатлыҡ көрәшенә ҡағылышлы күп кенә китаптар, ғилми-публицистик мәҡәләләр донъя күрҙе. Мин иһә уларҙа сағылған мәсьәләләрҙең береһенә - Урта быуаттарҙа Венгрияла йәшәгән башҡорттар, уларҙың яҙмышы һәм Ер йөҙөнән юғалыуы сәбәптәре тураһында һөйләмәксемен.**

Миләдиҙең IX быуатының икенсе яртыһында Урал тауҙары битләүенән хәҙерге Венгрия ерҙәренә күсенгән боронғо мадьярҙарҙың (венгрҙар) хәрби-ҡәбилә иттифағы араһында Юрматы, Йәнәй һәм башҡа башҡорт ырыуҙары булыуын шул заманда йәшәгән ғалимдар яҙып ҡалдырған. Венгрия батшалығындағы башҡорттар тураһында иң тулы мәғлүмәттәрҙе Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Башҡорт тарихы" китабынан табырға була. Ләкин Әхмәтзәки Вәлиди Туған Көнбайышта көн күргән башҡорттарҙың Венгрияның ҡайһы урынында йәшәгәнлеге һәм ни сәбәптән Ер йөҙөнән юғалыуҙары хаҡында аҙ яҙған. Поляк ғалимы Т. Левицкий инглиз телендәге "Ислам энциклопедияһы"ның яңы баҫмаһында бирелгән "Мадьярстан" мәҡәләһендә башҡорттар тураһында ғәрәп һәм латин сығанаҡтарына таянып яҙған. Уның әйтеүенсә, Венгрияла йәшәгән башҡорттар тураһында тәүге мәғлүмәттәрҙе ғәрәп ғалимы әл-Масудиҙың "Муруди әл-джаһаб" китабында табырға була. Миләдиҙең X быуатында йәшәгән әл-Масуди боронғо венгрҙарҙың һәм уларҙың иттифаҡташтары бәшнәктәрҙең (урыҫса печенеги) Византия империяһына ҡаршы һуғышын тасуирлаған (932-944 йылдар). Автор "баджгирд" һәм "базгирда" атамаларын ҡулланғанда венгрҙарҙы һәм төрки телле башҡорттарҙы күҙ уңында тотҡан.

Ғәрәп ғалимы әл-Истарһи "Китаб Масалик әл-Мамалик" китабында шулай уҡ венгрҙарҙы һәм башҡорттарҙы "башгирд" тип атаған. Ибн-Һауҡал "Китаб Сурат әл-алрд" әҫәрендә (967 йыл), әл-Истарһи мәғлүмәттәренә таянып, боронғо венгрҙарҙың барыһына ла "башджирд" исеме бирә. Ғәрәп сәйәхәтсеһе һәм яҙыусыһы Әбү Хамид әл-Андалуси әл-Ғарнати "Әл-Миграб ән-бағд чадаиб әл-Мағриб" китабында "Ункурия" (Һунгария йәғни Венгрия) иле халҡын "баджгирд" тип яҙа. Әл-Андалуси Венгрияға 1150-1151 йылдарҙа сәйәхәт ҡылып, өс йыл йәшәгәндән һуң, ерле мосолман ҡыҙҙарына өйләнгән кесе улы менән Венгрияны ҡалдырып китә. Сәйәхәтсе "Төхвәт әл-әлбаб" китабында венгрҙарҙы "башғурд" ти. Ғәрәп ғалимы Яҡут Сүриәләге Халеб (Алеппо) ҡалаһында башҡорт шәкерттәрен осраҡҡан һәм ундағы мосолмандар үҙҙәрен "башғирдиа" тип йөрөтөүҙәрен белгән.

Бер һүҙ менән әйткәндә, Урта быуаттарҙа Венгрия мәмләкәтендә башҡорттар оҙаҡ ваҡыт, биш йәки алты быуат тирәһе йәшәгән фекер бөгөнгө ғилми донъяла шик тыуҙырмай. Ләкин башҡорттар Европаның ҡайһы өлөшөндә көн күргән һуң? Боронғо ғәрәп һәм Көнбайыш тарихтарын ентекле өйрәнгәндән һуң, башҡорттар хәҙерге Венгрияның көнбайыш өлөшөндә һәм элекке Югославияның Босния һәм Герцеговина биләмәләрендә йәшәгән, тигән һығымта яһарға була. Был фекерҙе дәлилдәргә мөмкин.

Ғәрәп географы Ибн Сәйед әл-Мазриби (1286 йылда донъя ҡуйған) боронғо Венгрия халҡын ике төркөмгә бүлгән. Дунай йылғаһынан көньяҡта йәшәгән төрки телле мосолмандар "әл-башкирд", христиан венгрҙар "һункар" тип исемләнгән. Ибн Сәйед әйтеүенсә, был ике халыҡ дин яғынан ғына түгел, тел яғынан да айырылған. Һуңғы факт ҙур әһәмиәткә эйә, сөнки, берҙән, Урал башҡорттарының Венгрияға күсеп килеүен иҫбатлаһа, икенсенән, башҡорттарҙың Венгрия батшалығының ҡайһы тарафында төйәкләнеүен эҙләүҙе еңеләйтә.

Ибн Сәйед, боронғо Венгрияның шәреҡ өлөшөндә - христиан венгрҙар (һунгарҙар), көнбайыш өлөшөндә Венгрия мосолмандары "әл-башғирд"тар йәшәй, тип яҙған. Башҡорттар Дунай буйында германдарға (йәғни Австрияға) күрше булғандар. Ибн Сәйед, "әл-башгирд" иленең

✓ *Тимәк, Европаға күскән башҡорттар боронғо Венгрия батшалығының көнбайыш тарафында, Австрияға күрше яҡта һәм элекке Югославияның Босния һәм Герцеговина йөмһүриәте ерҙәрендә көн күргән.*



баш ҡалаһы - Крат, һәм ул илдең көньяғында урынлашҡан, тип күрһәткән. "Крат" - славянса "град" һүҙенең ғәрәпсә транскрипцияһы. "Белград"тың "аҡ ҡала" икәнен иҫкә төшөрәйек. Т. Левицкийҙың фекеренсә, Урта быуаттарҙа Балҡан славяндары, Сербияның баш ҡалаһы Белградты, шулай уҡ венгр нәселенән Арнауттар батшалығының тәүге баш ҡалаһы Секешфехерварҙы "Белград" тип йөрөткәндәр. Т. Левицкийҙың был фекере Урта быуаттарҙа латинса һәм немецса яҙылған документтар менән раҫлана. Секешфехервар латинса "Алба сивитас редалис" ("Батшаларҙың аҡ ҡалаһы") һәм немецса "Штулвайсенберг" ("Аҡ ҡала") тип йөрөтөлгән. Ғәрәп ғалимы әл-Иҙриси Секешфехерварҙы "Бел(а)града" йәки "Бел(и)града" тип яҙған.

Тимәк, Европаға күскән башҡорттар боронғо Венгрия батшалығының көнбайыш тарафында, Австрияға күрше яҡта һәм элекке Югославияның Босния һәм Герцеговина йөмһүриәте ерҙәрендә көн күргән. Сөнки, беренсенән, Секешфехервар ҡалаһы көнбайыш Венгрияла урынлашҡан. Икенсенән, венгр батшалары мосолмандарҙы, башҡорттарҙы хәрби хеҙмәткә йәлеп иткәндәр. Йәш венгр дәүләтенә көслө Германия тарафынан даими хәүеф янаған. Шуға улар башҡорт һәм бәшнәк ырыуҙарынан ғибәрәт булған ғәскәрҙәрҙе Венгрияның көнбайыш тарафында тотҡан.

Ғәрәп ғалимы Бутрус әл-Бустани (XIX быуат) "Даиретуль - мәғариф" энциклопедияһында, тарихсы Яҡуптың яҙмаларына таянып, Уралдағы башҡорттар һәм Урта быуаттарҙа Венгрия мәмләкәтендә көн күргән "әл-башғирдтар" - бер халыҡ, тип яҙған. Шулай уҡ әл-Бустани башҡорттарҙы һәм Босния халҡын бер халыҡ тип һанаған. Әл-Бустаниҙың "Әл-Башджирд" мәҡәләһенән бер өлөшөн тәҡдим итәм: "Ғәрәп тарихсыһы Яҡут ошолай тип яҙған: "Мин Сүриәнең Халеб ҡалаһында бер төркөм башҡорт талиптарын осраттым. Уларҙың йөҙҙәре бик аҡ, сәстәре лә аҡ-һары. Мин бер башҡорттан "Башғирд" иленең урынын һәм хәл-әхүәлдәрен һораштым. Ул миңә: "Илебеҙ" Константиния (Византия) дәүләтенән бире, икенсе "афранджи" (йәғни Европа)", "Һункар" (йәғни Венгрия) исемле мәмләкәттең эсендә урынлашҡан. Беҙ - мосолмандар һәм венгр батшаһының подданныйҙары. Беҙ утыҙ ауылда йәшәйбеҙ һәм ауылдарыбыҙҙың барыһы ла ҡала ҙурлығында, ләкин венгр батшаһы, үҙенә ҡаршы яу ҡуптарыуынан ҡурҡып, башҡорттар йәшәгән ҡалаларҙы диуарҙар менән уратырға ҡәтғи тыйған. Беҙ, башҡорттар, христиандар иленең уртаһында йәшәйбеҙ. Беҙҙән төньяҡта - славяндар, көньяҡта католик папаһының дәүләте урынлашҡан, көнбайышта - Андалусия, ә көнсығышта Рум (Византия) империяһы ята. Беҙҙең телебеҙ - "афранджи" (Европа) теле, кейгән кейемебеҙ ҙә Европа кейеме. Башҡорттар венгрҙар менән армияла хеҙмәт итә һәм бергә төрлө халыҡтарға һәм дәүләттәргә ҡаршы һуғышҡа йөрөй. Башҡорттар, мосолман булараҡ, Ислам илдәренә ҡаршы хәрби походтарға йөрөмәй", - тип яуап бирҙе. Яҡут, уларҙың Ислам динен ҡабул итеү сәбәптәре тураһында һорағас, ошо яуапты ишеткән: "Ата-бабаларыбыҙ әйтеүҙәре буйынса, борон заманда Булғар иленән ете мосолман, башҡорттар араһында оҙаҡ йәшәп, Ислам динен таратҡан. Һәм башҡорттар, мәжүсилекте ташлап, иман юлына баҫтылар. Аллаһы Тәғәлә һиҙийә ҡылды һәм, Аллаға шөкөр, башҡорттар Ислам динен ҡабул иттеләр. Беҙ, башҡорт талиптары, Ислам ғилеме өйрәнәбеҙ һәм илебеҙгә ҡайтҡас, халҡыбыҙ беҙҙе йыйы ҡаршылаясаҡ һәм дини эштәрен беҙҙең ҡулға тапшырасаҡ". Яҡут уларҙан: "Ниндәй сәбәптән һаҡалдарығыҙҙы европалылар кеүек ҡырыһығыҙ?" - тип һораған. Улар: "Башҡорттарҙан хәрби синыфта булғандары ғына ҡыра, ә ҡалғандары ҡырмай", - тип яуап биргәндәр. "Илегеҙ бынан алыҫ ятамы?" - тигән һорауға башҡорттар: "Сүриәнән Константинияға сәфәр ҡылыу ике ай ярым ваҡыт талап итә, һәм Константиянан илебеҙгә шулай уҡ ике ай ярым ваҡыт эсендә етеп була", - тип аңлатҡандар.

Ғәрәп тарихсыһы әл-Истарһи ҙа, Башҡорт иленән Булғар иленә егерме биш көн эсендә етеп була һәм Башҡорт иленән икенсе төрки халыҡ - бәшнәктәргә ун көнлөк юл, тип яҙған. Был мәғлүмәттәрҙән шул асыҡ - башҡорттар һәм Боснияларғы үә Сербиялағы "бәшнәктәр" ("бочняк") бер халыҡ. Босния Урта быуаттарҙа Венгрия мәмләкәтенең эске өлкәһе була. Боснияға көнсығыш тарафтан Болгария һәм Византия империяһы сиктәш, ә славяндар - көньяҡта була. Боронғо ғәрәп карталарынан, китаптарҙан шул мәғлүм: Боснияға иң яҡын булып төрки телле печенегтар - "бачняктар" йәшәгән. "Бачняктар" "башнаҡтар" (боснактар) түгел. Һәр хәлдә, киләсәктә Европа китаптарында ниндәй генә яңы мәғлүмәттәрҙең табылыуына ҡарамаҫтан, Боснияларғы "башнаҡтар" һәм ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн-Фаҙлан осратҡан "башҡорт" - бер халыҡ". Ошо һүҙҙәр менән тамамлана Бутурус әл-Бустаниҙың мәҡәләһе.

Мин, әлбиттә, әл-Бустаниҙың, Урал башҡорттары һәм Боснияның босняк-мосолмандары - бер халыҡ, тигән фекере менән килешмәйем, сөнки боснияктар антропологик яҡтан да, тел яғынан да балканлы, славян халҡы. Минең уйымса, көнбайыш Венгрия һәм Боснияла йәшәгән башҡорттар, күпселекте тәшкил иткән ерле славяндар араһында тарихи сәбәптәр арҡаһында ассимиляцияға дусар булып, Ер йөҙөнән юғалған. Әммә улар Босния илемнең славян телендә һөйләшкән халҡына "башджирд" ("башҡорт"), "башнаҡ" ("босняк") тигән атамаларҙы ҡалдырған. Тимәк, бөгөнгө Босния халҡының "босняк" атамаһы - "башнаҡ" һүҙенән, ә "башнаҡ" һүҙе "башҡорт" ("башджирд") һүҙенән алынған. Бындай миҫалдар тарихта күп. Мәҫәлән, Дунай Болгарияһы дәүләтенә нигеҙ һалған төрки телле болғарҙар ике-өс быуаттан һуң, аҙ һанлы булыу сәбәпле, ерле славян халҡына ҡушылып, ассимиляцияға бирелгән, ә "Болгария" атамаһы ҡалған. Хәҙер Дунай славяндары "болгар" һүҙен милләт атамаһы итеп ҡуллана.

Венгрия мәмләкәтендә башҡорттарҙың юғалыу сәбәптәрен эҙләп ҡарайыҡ. Т. Левицкий "Ислам энциклопедияһы"нда ике ҙур сәбәпте күрһәтә. Беренсенән, XIII быуаттың беренсе яртыһында Венгрияла мосолмандарҙы суҡындырыу (христианлаштырыу) сәйәсәте көсәйә. Әл-Андалуси яҙыуына ҡарағанда, XIII быуаттың башына тиклем бындағы мосолмандар христиан венгр дәүләте менән яҡшы мөнәсәбәттә булған. Мәҫәлән, батша Геза II дәүерендә лә дини яҡтан ҡыҫым кисермәгәндәр. Батша Андрей II лә (1205-1235 йылдарҙа хакимлыҡ иткән) мосолмандарҙың дуҫы һаналған. Һуңғы йылдарында ғына Андрей II христиан сиркәүе баҫымы һөҙөмтәһендә мосолмандарға мөнәсәбәтен үҙгәртә. 1222 йылда "Алтын Булла" исемле төп документ донъя күрә. Унда мосолмандар ҙа, венгр христиандары кеүек үк, ижтимағи-дәүләт етәкселегендә вазифа биләргә хоҡуҡлы тип рәсмиләштерелгән. "Алтын Булла"ның икенсе баҫмаһында ла (1231 йыл) мосолмандарҙың хоҡуҡтары тағы рәсми тәҫ ала.

Экстергам ҡалаһы архиепископы Роберт 1232 йылда Венгрияны тотош христиан дәүләте итергә әмер бирә, батша Андрей II мосолмандарҙы ижтимағи дәүләт вазифаларына йәлеп итеүҙә ғәйепләй, бөтә христиандарҙы Венгрия мосолмандарына ҡарата бойкот яһарға саҡыра, улар менән сауҙа һәм башҡа мөнәсәбәттәрҙән баш тартырға ҡуша. Архиепископ Роберт, рим-католик сиркәүе башлығы папа Григорий IX баҫымы менән Андрей II мосолмандарҙы ижтимағи-дәүләт хоҡуҡтарынан мәхрүм иткән яңы документҡа ҡул ҡуя. 1232 йылдан мосолман ауылдары һәм ҡалаларында сиркәүҙәр, монастырҙар төҙөлә башлай, халыҡ көсләп суҡындырыла.

Икенсе, Т. Левицкий фекеренсә, 1241 йылда Венгрияны монгол-татарҙар баҫып ала. Венгр ғәскәрендәге башҡорттар дошманға көслө ҡаршылыҡ күрһәтә. Ғәрәп ғалимы Ибн Сәйед, Венгриялағы "Башҡирд" илен монгол-татарҙар 1241 йылда баҫып алған, башҡорттарҙы күпләп ҡырған, тигән. Башҡорттар, венгрҙарҙың иттифаҡташтары булараҡ, шул уҡ йылда герман-венгр армияһына ҡушылып, Хорватияла, Адриатик диңгеҙе буйындағы Шибеник ҡалаһы янында монгол-татарҙарға ҡаршы һуғышта ҡатнаша. Был яуҙа татарҙар тар-мар ителә.

"Рогери кармен мизерблис" исемле латинса тарихи документ, Венгрияла йәшәгән мосолмандар, ҡулдарына ҡорал алып, монгол-татар илбаҫарҙарына ҡаршы яу сапҡан, тип һөйләй. Шул осорҙан ҡалған икенсе бер латинса документта монгол-татарҙар 1241 йылда Венгриялағы "Бей" тигән районда халыҡтың барыһын да юҡ иткән, тигән мәғлүмәт бар.

Был ваҡиғаларҙан һуң Венгрияла Ислам дине 100 йыл самаһы йәшәгән. 1340 йылда Карл-Роберт Анжуй батша (1308-1342 йылдар) христиан булмаған вассалдарына (подданныйҙарына) йә христиан динен ҡабул итергә, йә илде ташлап китергә бойора.

Юғарыла әйтеп кителгәндәрҙең барыһы ла Венгрия һәм Босния башҡорттарының милләт булараҡ юҡҡа сығыуына килтерә. Әммә улар Европа уртаһында, бөгөнгө Боснияла, Ислам мәҙәниәтенең үҫеп китеүендә ҙур роль уйнаған, шулай уҡ бихисап ҡорбандар биреп, Европа цивилизацияһын һаҡлап ҡалырға булышлыҡ иткән. Башҡорттарҙың Европа азатлығы өсөн монгол-татарҙарға ҡаршы ааяуһыҙ көрәше, ҡаһарманлыҡтары ихтирамға лайыҡ.

Башҡорттарҙың Европала булыу тарихы әле ентекле ғилми тикшереүҙәр талап итә.

**Илшат НАСИРОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**Мәскәү ҡалаһы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Һөнәрсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Ҙур һөҙгөс, миңә мәғлүм булыуынса, башҡорттарҙа Ағиҙел йылғаһының түбәнге ағымында ҡулланылған. Ғәҙәттә, уның менән боҙ киткәндә, йылғаларҙа һыу болғансыҡ булғанда яр эргәһендәге балыҡтарҙы һөҙгәндәр.

Балыҡсы балыҡты эҙләп тапҡас, уны һуғып алыу ике төрҙә ҡулланылған: шаңҡытыу һәм төнөн сыраҡ яҡтыһында сәнсеү. Башҡорттар балыҡты тик көҙөн, ҡар яуғанға тиклем боҙ аҫтында шаңҡытҡан. Йоҡаҡ боҙ аҫтында тупланған балыҡ тубын асыҡлағас, шул урынға суҡмар менән ныҡ итеп һуҡҡандар. Шаңҡыған балыҡ эсе менән әйләнеп ятҡан, боҙ уйылған һәм балыҡты һыуҙан һөҙөп алғандар. Был эш менән, нигеҙҙә, малайҙар һәм үсмерҙәр шөғөлләнгән.

Башҡортостанда сыраҡҡа төшөү һәр урында ла ҡулланылған, әммә ҡоралдар һәр урында үҙенсә булған.

Сыраҡҡа төшөүҙең иң ябай ысулы таулы Башҡортостанда күҙәтелгән. Унда, үтә күренмәле, саф, таҙа һыулы тау йылғаларында балыҡты осонда суҡмар кеүек ороһо булған ябай таяҡ менән дә һуғып алғандар. Бик йыш был маҡсатта нәҙек, әммә оҙон ҡалаҡ файҙаланғандар. Сыраҡҡа төнөн, бер нисә кеше йыйылып төшкәндәр. Балыҡсыларҙың бер нисәһе ҡалаҡтар менән һыу эсенән, ә башҡалар арҡаларына туҙлы йәки сайырлы сыраҡтар тултырылған тоҡ аҫып, яр буйынан барған һәм даими рәүештә сыраҡ яндырып, йылғаны яҡтыртҡан. Ҡайһы берҙә балыҡсылар үҙҙәре лә һыу эсендә сыраҡ яндырып барған. Балыҡтарҙың тупланған урынын табыу менән яҡтылыҡ сығанағын шунда уҡ ситкә алып киткәндәр. Был балыҡтарҙы йоҡоһонан уятмау өсөн эшләнгән. Ҡалаҡ йәки һалдау менән балыҡтың башы тирәһенә, умыртҡа һөйәген һындырырлыҡ итеп һуҡҡандар. Ҡайһы берҙә балыҡтың башы өҙөлгәнсе һуғылған. Ҡалаҡ менән уңышлы итеп төптә ятҡан йәки йылға төбөнә яҡынараҡ ятҡан балыҡты ғына һуғыу мөмкин булған. Бик йыш был ысул менән балыҡ тотҡанда һалдау, сәнске ҡулланғандар. Һалдауҙар дүрт йәки биш тешле булған. Балыҡты көмәлә йөрөп, сыраҡ яҡтыһында сәнсеп алыу бик һирәк күҙәтелгән.

Күлдәр эргәһендә йәшәүсе башҡорттар балыҡты иртә яҙҙан, ул ыуылдырыҡ сәскән ваҡытта һуҡҡан. Күл ситтәренән һыҙалар барлыҡҡа килеү һәм ҡамыш араһында боҙ ирей башлау менән балыҡтар күпләп шунда йыйылған һәм ыуылдырыҡ сәскән. Уларҙы балыҡсылар ҡарап ҡына торған һәм һалдау ярҙамында алған.

Ағиҙел йылғаһының урта ағымында башҡорттар балыҡты ҡаты һыуыҡтарҙа тотҡан. Был ваҡытта балыҡтар тәрән урындарҙа, сөңгөлдәрҙә йыйылған. Сөңгөл өҫтөндә ҡойо уйылған һәм шул урынға балыҡ йыйылыу менән уларҙы һалдау менән сәнсеп алғандар.

Ҡайһы берҙә башҡорттар балыҡты ҡоралдан атып та тотҡан. Был ысул уларҙың ыуылдырыҡ сәскән ваҡытында тормошҡа ашырылған. Атыу ҡоралы итеп махсус эшләнгән уҡтар файҙаланылған.

**(Дауамы бар).**

**Мәңгелек тема ул туған тел, уны һаҡлау, уны заманға ярашлы алым-ысулдар менән киләһе быуындар һағына тапшырыу, уны өйрәнеүҙе һәр быуын балалары, йәштәре өсөн модалы, ҡыҙыҡлы итеү. Был юлы тағы ошо темаға әйләнеп ҡайтып, туған телгә ҡағылышлы мәсьәләлә беҙҙең башҡорт теле уҡытыусыларынан да аҡыллыраҡ, тосораҡ, фәһемлерәк итеп әйтеп булмаҫ, тип, хеҙмәт юлын, ғүмерен, бар ҡеүәтен балаларға башҡорт теленән һабаҡтар, дәрестәр биреүгә арнаған, ир-егет затынан булған юғары категориялы башҡорт теле уҡытыусылары - Ейәнсура районынан Ғайса ИШМӨХӘМӘТОВ, Наил ЮЛДАШБАЕВ һәм Ишембай ҡалаһынан Рифат ӘЮПОВ менән ситтән тороп диалог ҡорҙоҡ.**

**Туған телебеҙҙе һаҡлап алып ҡалыу, киләсәктә лә йәшәтә алыуҙың төп проблемаһы - башҡорт балаларының халҡыбыҙ телен яҡшы кимәлдә белеүе, аңлауы, уҡый-яҙа һәм иркен һөйләшә алыуы. Хәҙеге осорҙа ошо маҡсатҡа өлгәшеүе еңелдәрҙән түгел, оҙайлы эш талап итә. Ҡыҙғаныс, телебеҙҙе бар нескәлектәрендә белеүсе балалар, йәштәр аҙайғандан-аҙая бара. Теләк етешмәй, мотивация тәрбиәләнмәгән. Ни эшләргә беҙгә?**

**Ғайса Ишмөхәмәтов:** Ә бит уйлап ҡараһаң, теләк бер ҡасан да үҙенән-үҙе барлыҡҡа килмәй. Теләк тыуыр өсөн ниндәйҙер сәбәптәр булырға, тәүшарт, файҙалы орлоҡ, ошо һау орлоҡто сәсер, шыттырыр, үҫтерер уңыш алыр өсөн "уңдырышлы тупраҡ" та кәрәк бит әле. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙә ошо шарттар юҡ. Ошоноң һөҙөмтәһе булып "теле боҙолған" йәш быуын үҫеп килә лә инде.

аптырата. "Беҙгә нимә эшләргә һуң?" тиерме атай-әсәйҙәр? Әйткәндәй, был һорау йыл һайын ҡуйыла һәм бик күп тәҡдимдәр әйтелә. Улар үтәләме һуң? Әйҙәгеҙ, шуларҙы иҫкә төшөрөп, анализлап үтәйек әле. Иң популяр тәҡдимдәрҙән береһе - "Үҙебеҙҙән башлайыҡ". Бик дөрөҫ тәҡдим, ул бөгөн дә актуаль булып ҡала: беҙ, ололар, атай-әсәйҙәр, өләсәй-олатайҙар, үҙебеҙ балаларыбыҙ менән дә, милләттәштәр менән дә әсә телендә һөйләшәйек, башҡорт баҫмаларын алдырайыҡ, башҡорт китаптарын уҡыйыҡ, төрлө сараларҙа үҙебеҙҙең телдә сығыш яһайыҡ... "Тамыр"ҙың тапшырыуҙарын, йәнһүрәттәрен балалар менән бергә ҡарау, фекер алышыуҙар ойоштороу ҙа уларҙы ошо башҡорт контентына йәлеп итер ине...

Юҡ шул, йыш ҡына үҙебеҙҙән башларға теләмәйбеҙ. Әйтәйек, быйыл май айында Бөтә Рәсәй башҡорт теле уҡытыусылары съезы үтте. Шунда ҡайһы бер коллегаларыбыҙ рус телендә һөйләйҙәр. Әлбиттә, шул йүнәлештәге эштәрҙе артабан да дауам итергә кәрәк. Шулай уҡ беҙҙең балалар өйҙә - ата-әсәләренең, урамда башҡа оло кешеләрҙең башҡорт телендә һөйләшкәнен һәр ваҡыт ишетеп торһа, район һәм республика кимәлендәге төрлө сараларҙа абруйлы етәкселәр әсә телендә сығыш яһаһа, бик көслө стимул буласаҡ. Һәм был да телебеҙҙе популярлаштырыуға булышлыҡ итәсәк.

Өсөнсө мәңгелек тәҡдим - "Ғаиләнән башларға кәрәк". Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы бер ата-әсәләр ғаиләлә туған телгә өйрәтмәү генә түгел, мәктәптә балаларын әсә теле төркөмөнә биреүҙән баш тарталар. Балалары уҡырға теләк белдерһәләр ҙә. Ҡайһы бер ата-әсәләрҙә милли рухтың, аң кимәленең шундай түбән булыуы аптырата. Уҡытыусыларҙан бына шундай ата-әсәләр менән эшләү ҙә талап ителә. Улар менән йыйылыштарҙа йәки айырым шарттарҙа осрашырға, һөйләшергә, аңлатыу эштәре алып барырға кәрәк.

Һәм тағы. Шундай күренештәр күҙгә салына: ҡайһы бер башҡорт теле уҡытыусылары балаларҙы әсә теле төркөмөнән биҙҙерерлек итеп, үтә ҡаты ҡылаланалар: күп итеп өйгә эш бирәләр, әйләнгән һайын "ике" ҡуялар, дәрестән ҡыуып сығаралар. Йәки бөтөнләй бер нимә лә эшләмәйҙәр - уҡыусылар дәрестә бушты бушҡа ауҙарып ултыралар һ.б. Башҡорт теле дәрестәре башҡаларынан шуныһы менән айырыла: тәрҙә ултыра. Улар быны теләйме? Юҡ, әлбиттә! 60-70 йәшлек кешеләр генә ул 7 сәғәт түгел, көнө буйы бер төрлөлөккә риза булып оҙаҡ ултыра ала, сөнки уларҙың психикаһы ҡатып ҡалған, фән телендә әйткәндә, кристаллизацияланған. Ә балаларҙың психикаһы бөтөнләй икенсе, ул - һығылмалы, йәнле, аҡылдары һәр ваҡыт яңылыҡ талап итә. Шуға бер төрлөлөктә оҙаҡ ултыра алмайҙар.

Ҡыҫҡаһы, минең нимә әйткем килә: 7 дәрестең йөкмәткеһе генә түгел, ә формалары ла төрлө булырға тейеш. Уларҙың бер-икеүһе генә Дәүләт стандарттарына ярашлы төҙөлөргә мөмкин, ә башҡалары бөтөнләй икенсе төрлө форматта булғанда ғына балалар дәрестәрҙән ялыҡмаясаҡ, киреһенсә, ҡыҙыҡһынып уҡыясаҡ.

**Ғайса Ишмөхәмәтов:** Эйе, стандарттар ҡабул ителгән, программалар үҙгәреп тора, тик башҡорт мәктәптәре өсөн ҡыҫҡартылған дәрестәр һанына, программаға тап килгән, яраған дәреслектәр башҡорт теленән дә, әҙәбиәттән дә юҡ. Дөрөҫ уҡытабыҙмы һуң? Юҡ. Дөрөҫ уҡытмайбыҙ. Элек дөрөҫ уҡыта инек, ә хәҙер юҡ. Дөрөҫ уҡытһаҡ, һандуғас телендәй бай, яғымлы, көслө, һығылмалы әсә телебеҙҙең яңғырашын боҙоп, вата-емерә, баҫымдарҙы дөрөҫ ҡуймай, русса һүҙҙәр ҡулланып, мин башҡортса таҙа һөйләшәм, тип йөрөүселәр, уйлаусылар күп булмаҫ ине. Грамматик, стилистик хаталары күп булған яҙмаларҙы уҡый, аңлай алмай йонсомаҫ инек. Ниндәй методика ме-

# БАҺАЛЫ ХАЛЫҠ

## Туған телебеҙҙе

**Рифат Әюпов:** Бөгөнгө көндә йәштәрҙең телде ныҡлап белеп етмәүенең сәбәптәре бик күп: башҡорт телендә китаптар аҙ уҡыла, мәктәптәрҙә әҙәбиәт дәрестәре лә бик ҡыҫҡарҙы, аҙнаға бер сәғәт кенә ҡалды, ата-әсәләр ҙа үҙҙәре уҡымай, күберәк ваҡытты телефон, компьютер артында интернетта ултыра, күп балалар бәләкәйҙән телевизор, интернетта русса төрлө йәнһүрәттәр, тапшырыуҙар ҡарай. Тимәк, ғаиләлә лә, йәмғиәттә лә башҡортса мөхит юҡ, барыһы ла русса ғына, шуға бала руссаны еңелерәк үҙләштерә. Хәҙерге балаларҙың үҙенсәлеген, талаптарын иҫәпкә алып, интернет селтәрҙәрендә күберәк башҡортса контенттар булдырырға кәрәк тә бит. Ә былай теле ныҡлап асылып килгән 3-4 йәшлек балала әле мотивация тиғән төшөнсә юҡ инде, ул күберәк ниндәй телдә ишетә, шул телде яҡыныраҡ күрәсәк.

**Наил Юлдашбаев:** Әллә ни өмөтһөҙләнеп китергә лә ярамайҙыр. Әйтәйек, ҡасандыр совет осоронда беҙҙең район үҙәге Иҫәнғолда башҡорт телендә һөйләшеп булмай тиерлек ине. Ә хәҙер уның урамдарында, магазиндарында һәм башҡа төрлө шундай халыҡ күп булған урындарҙа башҡорт теле яңғырап тора. Хәҙер ҙә һәр ауылда башҡорт әҙәбиәтен яратып уҡыған кешеләр бар, тип әйтергә була. Шулай уҡ бөгөнгө көндә беҙҙең республикала төрлө кимәлдә телде һаҡлау һәм үҫтереү буйынса бик күп эштәр башҡарыла. Иҫкә төшөрөп тормайым, бөтәгеҙ ҙә беләһегеҙ.

Эйе, хәл ителмәгән проблемалар ҙа етерлек. Хатта баштан ашҡан, тиһәң дә була. Бигерәк тә башҡорт ауылдарында балаларҙың рус телендә һөйләшеүе ғыш яһаны. Аптырайым, башҡорт теле уҡытыусылары съезы, ә сығыштары башҡорт телендә түгел! Съездың ҡасан булыры ярты йыл алдан билдәле булды, сығыш яһаусыларға ла алдан хәбәр ителде. Шул ваҡыт эсендә 15-20 минутлыҡ сығыштарын башҡорт телендә әҙерләй алалар ине бит. Тәржемәсе яллап булһа ла. Уларҙы бит телевизорҙан күрһәттеләр, радионан ишеттерҙеләр... Быларҙың барыһын да халыҡ ҡараны һәм тыңланы. Башҡорт теле уҡытыусыларының шундай ҙур форумдағы рус телендәге сығыштарын ишеткәс, уларҙың баштарында ниндәй һорауҙар тыуҙы икән, нисек уйлайһығыҙ? Ошондай күренештәрҙән һуң уҡытыусылар нисек итеп балаларҙы туған телгә ылыҡтыра ала ла, нисек итеп халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып бара ала?

Икенсе популяр тәҡдим -"Башҡорт телен популярлаштырыу". Был да мөмкин булмаған ғәмәл түгел! Әйтәйек, быйылғы йылда донъя кимәлендә популярлыҡ яулаған "Әй Йола" төркөмөнөң башҡорт телендәге йырҙарын мәктәптәрҙә хатта рус балалары ла йырлап йөрөйҙәр! Ошо күренеш күп уҡыусылар икенсе предметтарҙы теләйме-юҡмы уҡырға тейеш, ә әсә телен улар һайлай ала. Шуға ла улар был дәрестән баш тартмаһын өсөн беренсе сиратта уҡытыусыларға тырышырға, төрлө саралар һәм алымдар менән башҡорт теле дәресенә мөхәббәт тәрбиәләргә тейештәр. Балалар дәрескә шатланышып, йүгереп килһен.

Ғөмүмән, әсә теленең йәшәйеше өс тағанға терәлгән булырға тейеш: ғаилә тәрбиәһенә, белем биреү системаһына, йәмғиәттәге популярлыҡ кимәленә.

> ***Өсөнсө мәңгелек тәҡдим - "Ғаиләнән башларға кәрәк". Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы бер ата-әсәләр ғаиләлә туған телгә өйрәтмәү генә түгел, мәктәптә балаларын әсә теле төркөмөнә биреүҙән баш тарталар. Балалары уҡырға теләк белдерһәләр ҙә. Ҡайһы бер ата-әсәләрҙә милли рухтың, аң кимәленең шундай түбән булыуы аптырата. Уҡытыусыларҙан бына шундай ата-әсәләр менән эшләү ҙә талап ителә. Улар менән йыйылыштарҙа йәки айырым шарттарҙа осрашырға, һөйләшергә, аңлатыу эштәре алып барырға кәрәк.***

**Башҡорт теле буйынса стандарттар ҡабул ителгән, программалар эшләнгән, дәреслектәр әҙерләнгән. Бөтөн уҡытыусыларыбыҙҙы бер төрлө уҡытабыҙ, методикалар ҙа бер иштән. Дөрөҫ уҡытабыҙмы һуң?**

**Наил Юлдашбаев:** Әлбиттә, дөрөҫ түгел. Һәр уҡытыусы дәресен төҙөгәндә Берҙәм дәүләт стандарттарын үтәргә тейеш икән, бөтә дәрестәр ҙә бер төрлө форматта булып сыға: бер төрлө башланалар, бер төрлө темалар үтелә, бер төрлө итеп тамамланалар. Хәҙер күҙ алдына килтерегеҙ әле: 6-7 сәғәт буйы уҡыусылар бер төрлө төҙөлгән дәреснән эшләү уҡытыусының үҙенән тора: эш шарттарынан, ҡуйған маҡсаттарынан, ижади һәләте, ҡараштарынан. Һуңғы ваҡыт педагогик эшмәкәрлегебеҙҙә сит илдәрҙең яңғырауыҡлы, беҙҙең булмышыбыҙға тап килмәгән технологияларҙы, методикаларҙы өҫтөнлөк итә һәм хуплана башланы, сөнки үҙебеҙҙеке юҡ...

**Рифат Әюпов:** Эйе, һәр уҡытыусының үҙенең уҡытыу методикаһы, алымы бар, ул шул алым менән эшләй, әммә заман ныҡ үҙгәрҙе, ә башҡорт телен уҡытыу методикаһы ошо заман ҡалыптарына яраҡлашмаған. Әле совет осоронда сыҡҡан ғилми ҡулланмалар ғына бар, шуға ла башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу методикаһын мотлаҡ яңынан ҡарап сығырға кәрәк.

**Рәсәй мәктәптәрендә новатор-педагогтарҙы ишеткән дә, күргән дә юҡ. Бөгөн башҡорт теле уҡытыусыһы новатор була аламы?**

**Ғайса Ишмөхәмәтов:** Бөгөн башҡорт теле уҡытыусыһы новатор була ала, ләкин ысын педагог-новатор булмаясаҡ, сөнки башҡорт телен һәм әҙәбиәтен аҙнаһына 1 сәғәт уҡытып, йәғни уҡыу йылы буйына 34 сәғәт уҡытып, нисек үҙеңдә, мин яңы йүнәлеш индерҙем, иң кәрәкле, дөрөҫ юл күрһәттем, тип йөрөргә мөмкин, күҙ алдыма килтерә алмайым. Әле бит үҙең аҫҡан яңылыҡтарыңды, йүнәлешеңде практик эшмәкәрлеккә йүнәлтергә, практикала ҡулланырға, таратырға, киң ҡулланыусыға сығарырға ла кәрәк.

✓ ***Уҡытыусы - ул ябай эшсе генә, ул күп нәмәне хәл итә алмай, уның өҫтөндә етәкселәре бар. Уҡытыусы булған проблеманы һәр саҡ етәксеһенә еткерә тора, ә етәксеһе әллә ни өндәшә һалып бармай, сөнки уға үҙ урыны ҡәҙерле.***

Хәҙерге көндә ауыл мәктәбендә эшләгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, дәрестәр һаны кәмеү сәбәпле, башҡа предметтарҙы уҡытыуға күстеләр. Мин үҙем дә рус әҙәбиәте һәм физкультура дәрестәре уҡытырға мәжбүрмен. Эйе, район үҙәге мәктәптәрендә, профилле гимназияларҙа хәлдәр күпкә яҡшыраҡ, һүҙем ауыл мәктәптәре тураһында бара, хатта класта балалар һаны етмәү сәбәпле төрлө кластарҙы ҡуша уҡытыу тураһында һүҙ бара.

**Наил Юлдашбаев:** Ысынлап та, һуңғы йылдарҙа уҡытыусы-новатор тигән төшөнсә бөтөнләй ишетелмәй тиһәң дә була. Уның сәбәптәре бер нисәү.

Беренсеһе. Егерменсе быуаттың 90-сы йылдарында, шулай уҡ 2000 йылдар башында үҙ методикаһы өҫтөндә эшләгән педагогтар күп ине. Һәр мәктәптә лә тип әйтерлек шундай эҙләнгән, ижади эшләгән уҡытыусы бар ине. Район, хатта республика кимәлендә билдәлелек яулағандары ла булды. Йыш ҡына РМО ултырыштары шундай уҡытыусыларҙың тәжрибәләре менән уртаҡлашыу форматында үтә торғайны. Ғөмүмән, мин уларҙы йәшел яланда үҫеп ултырған төрлө-төрлө сәскәләр менән сағыштырыр инем.

2008 йылдарҙа Берҙәм дәүләт стандарттары барлыҡҡа килде лә, комбайн һымаҡ, шул сәскәләрҙе сабып, яланды тигеҙләп үтте лә китте. Ни өсөн тигәндә, һәр уҡытыусы дәресен төҙөгәндә шул Берҙәм стандарттарҙы үтәргә тейеш ине. Һәм бындай талаптар бер төрлөлөккә килтерҙе. Ә был күренеш, әлбиттә, ижади эшләүсе уҡытыусыларға аяҡ сала башланы. Ни өсөн икәнен аныҡлабыраҡ һөйләп үтәйем...

Философия фәнендә йөкмәтке һәм форма тигән төшөнсәләр (категориялар) йәшәй. Улар бер-береһе менән бик тығыҙ бәйләнештә: йөкмәтке үҙгәрә икән, форма ла үҙгәрә; һәм ниндәй форма - шундай йөкмәтке. Йөкмәткене үҙгәртеп, форманы бер нисек тә элеккесә ҡалдырып булмай. Мин нимә әйтергә уйлайым? Берҙәм дәүләт стандарттарының авторҙары дәрес төҙөлөшөнә булған талаптарҙы Эльконин-Давыдовтың үҫтереүсе методикаһынан алған. Ә ул методиканың төп маҡсаты - уҡыусыларҙы үҙаллы эҙләнергә өйрәтеү. Шулай итеп, баяғы философия күҙлегенән ҡараһаң: үҙаллы эҙләнергә өйрәтеү методикаһы - йөкмәтке, ә шул йөкмәтке нигеҙендә барлыҡҡа килгән дәрестең төҙөлөшө - ул форма. Шуға уҡытыусылар ниндәй генә маҡсат ҡуймаһындар, дәрес формаларын стандарттарға ярашлы төҙөһәләр, теләйҙәрме-юҡмы, үҫтереүсе методикаһы өҫтөндә эшләй башлайҙар. Сөнки форманы элеккесә ҡалдырып, йөкмәткене үҙгәртеп булмай. Ә ниндәйҙер яңы методика өҫтөндә эшләй икәнһең, ул яңы форма талап итә, әйтәйек, дәрестең төҙөлөшө бөгөнгө стандарттарға бөтөнләй тап килмәҫкә мөмкин. Шуға новатор уҡытыусыларға ике фронтта эшләргә тура килә: стандарттарҙы ла үтәргә, шулай уҡ үҙҙәренең идеяһы өҫтөндә лә эшләргә кәрәк. Әлбиттә, был бик ауыр, шуға күптәр эҙләнеүҙән бөтөнләй баш тартты.

Икенсеһе. Әгәр уҡытыусылар бер ставкаға эшләһә, йәғни 18 сәғәт алып барһа, ижади эҙләнергә ваҡыт ҡала. Әйтергә кәрәк, ҡасандыр ставканы ҡабул иткән ғалимдар шуны күҙ уңында тотҡандар ҙа инде. Бөгөнгө көндә ул ставканың эш хаҡына бөтөнләй йәшәп булмай. Шуға уҡытыусыларға 35-40 сәғәт алып барырға йәки тағы ҡайҙалыр эшләргә тура килә, һәм улар, йыш ҡына телдәрен арҡыры тешләп, өйҙәренә ҡайтып йығылалар. Ундай шарттарҙа ниндәйҙер идея өҫтөндә эшләп буламы ул? Эҙләнеү, ижади эшләү өсөн, беренсе сиратта, ваҡыт һәм азатлыҡ кәрәк. Башҡорт теле уҡытыусыһы аҙнаһына бер сәғәт бирелгән башҡорт теле дәресендә балаларҙы телгә өйрәтергә тейеш. Бындай шарттарҙа ысын мәғәнәһендә белем бирәм тигән уҡытыусы, теләйме-юҡмы, интенсив юлды һайлаясаҡ, йәғни уҡытыуҙың һөҙөмтәле юлдарын эҙләйәсәк.

**Рифат Әюпов:** Ә шулай ҙа уҡытыусы-новаторҙар бөгөн дә бар, әммә улар әҙ, һәр кем үҙ ҡаҙанында ҡайнай. Уларҙы күрә белергә һәм ярҙам итергә кәрәк тә бит...



# БУЛАЙЫҠ, ТИҺӘК...

## ҡәҙерләйек

▸ **Тел проблемаһы тураһында һүҙ ҡуҙғатһаң, социаль мөхиткә зарланалар. Хатта башҡорт ауылдарында ла тик русса аралашыу модаға инеп киткән. Ни өсөн шулай килеп сыға? Ни өсөн уҡыусыларыбыҙҙың зиһенен, хис-тойғоларын әсә теле биләмәй, башҡортса һөйләшәбеҙ тип, йөрәктәре янмай, күҙҙәре нур сәсмәй?**

**Ғайса Ишмөхәмәтов:** Эйе, ауыл мәктәптәрендә лә русса аралашыу киң тарала бара, бигерәк тә мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында күҙәтелә был хәл. Бөтә бәләне социаль мөхиткә генә ҡайтарып ҡалдырыу, һылтаныу дөрөҫ түгел. Илдең алып барған сәйәсәте шундай. Был турала мин ҡурҡмай әйтәм. Бына һеҙгә асыҡ миҫал: быйылғы уҡыу йылына Үҙәктән төшөрөлгән федераль уҡыу планында башҡорт телен 4-се класта аҙнаһына 0,5 сәғәт, туған әҙәбиәтте 0,5 сәғәт, 9-сы класта ла 0,5 сәғәт өйрәнеү ҡаралған. Был нимә тураһында һөйләй? Уҡытыусы дәресте 45 минут урынына 22,5 минут алып барырға тейешме йәки бер аҙнала уҡытып, ә икенсеһендә уҡытмаҫҡа тейешме? Ошо хәлдең дөрөҫ түгел икәнен нисек аңлатайыҡ Үҙәктәгеләргә? Әллә был файҙаһыҙмы? Шулай икән, ниңә һәр милләттәш туған телде үҙ ғаиләһендә һаҡлауҙы төп бурыс итеп алырға ашыҡмай?

**Рифат Әюпов:** Эйе, барыһы ла тел проблемаһын мәктәпкә генә ҡайтарып ҡалдыра, үкенескә күрә. Мәктәп кенә был проблеманы тамарынан хәл итә алмай. Ғаилә, мәктәп һәм дәүләт берҙәм булып, ошо юҫыҡта эшләгәндә генә ниндәйҙер уңыштарға ирешергә булыр ине, әммә берҙәмлек юҡ, һәр ҡайһыһы ғәйепте башҡанан эҙләй. Шулай булғас, уҡыусы күҙендә лә ут янмай. Телем тип өҙөлөп торғандар юҡ түгел, бар улар, ләкин уларҙы һәр саҡ күреп етмәйҙәр.

***Барыһы ла тел проблемаһын мәктәпкә генә ҡайтарып ҡалдыра, үкенескә күрә. Мәктәп кенә был проблеманы тамарынан хәл итә алмай. Ғаилә, мәктәп һәм дәүләт берҙәм булып, ошо юҫыҡта эшләгәндә генә ниндәйҙер уңыштарға ирешергә булыр ине, әммә берҙәмлек юҡ, һәр ҡайһыһы ғәйепте башҡанан эҙләй. Шулай булғас, уҡыусы күҙендә лә ут янмай. Телем тип өҙөлөп торғандар юҡ түгел, бар улар, ләкин уларҙы һәр саҡ күреп етмәйҙәр.***

▸ **Һуңғы йылдарҙа туған тел предметы тураһында ниҙәр генә һөйләнмәй, ә уны "киҫтеләр", прокурорҙарҙан тикшерттеләр, ата-әсәләрҙән ғариза яҙҙырттылар һ.б. Бер заман Рәсәй Думаһында милли мәктәптәрҙе ябыу хаҡында ла низағлы ҡарар ҡабул итергә йыйынғайнылар. Ә беҙҙең уҡытыусыларыбыҙ тел сәйәсәтендә үҙ һүҙҙәрен әйтергә баҙнат итмәй. Етәкселәргә халыҡ теләген кем еткерергә тейеш?**

**Ғайса Ишмөхәмәтов:** Башҡорт теле уҡытыусылары тел сәйәсәтендә үҙ һүҙҙәрен әйтергә баҙнат итмәй, ләкин уларҙың һәр береһенең тел мәсьәләһе, уның бөгөнгө яҙмышы, киләсәге тураһында йөрәге һыҙлана. Уҡытыусының хоҡуҡтары сикле, ҡыҫымдан да ҡурҡаларҙыр, әйтер һүҙҙәре тейешле урынға барып етеп, уға ҡолаҡ һалыуҙарына ла шикләнәләрҙер. Дөйөм алғанда, йәмғиәтебеҙҙә бит битарафлыҡ, вайымһыҙлыҡ биләп алған. Битарафтарҙан ҡурҡырға кәрәк, тигән бит бер аҡыл эйәһе. Яңыраҡ булып үткән Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының съезында ла беҙҙән проблемалар тураһында әллә ни фекер әйтеүсе булманы. Шулай инде, рухи кимәлебеҙ түбән, аңыбыҙ томаланған икән, беҙҙә берәү ҙә ишетмәйәсәк.

**Рифат Әюпов:** Уҡытыусы - ул ябай эшсе генә, ул күп нәмәне хәл итә алмай, уның өҫтөндә етәкселәре бар. Уҡытыусы булған проблеманы һәр саҡ етәксеһенә еткерә тора, ә етәксеһе әллә ни өндәшә һалып бармай, сөнки уға үҙ урыны ҡәҙерле. Бында йәмәғәт ойошмалары ағзалары, бигерәк тә урындағы ҡоролтайҙар күберәк эшләргә тейеш. Үкенескә ҡаршы, уларҙың күбеһе мәктәп менән, башҡорт теле уҡытыусылары менән эшләмәйҙәр, үҙҙәренең сараларын үткәрәләр ҙә, шуның менән ҡәнәғәтләнәләр.

**Наил Юлдашбаев:** Бөгөнгө көндә проблемалы мәсьәләләрҙе депутаттар аша хәл итергә булалыр, уларҙы беҙ шуның өсөн һайлайбыҙ бит. Минең уйымса, халҡын, тыуған төйәген яратҡан рухлы депутат мәғариф системаһындағы тап туған телде уҡытыуға ҡағылышлы проблеманы күрмәй ҡалмаҫ, тигән өмөт бар. Әгәр һанап киткән сифаттары юҡ икән, ул ишетмәмешкә һалышасаҡ. Ә бына "Беҙҙең уҡытыусыларыбыҙ тел сәйәсәтендә үҙ һүҙҙәрен әйтергә баҙнат итмәй" тигән фекерегеҙ менән килешмәйем. Бөтәһе булмаһа ла, әйтеп барыусылар етерлек.

▸ **Туған тел дәресенә аҙнаһына 1 генә сәғәт ваҡыт бирелһә, яҡшы һөҙөмтәгә өлгәшеү икеле. Йылына 40 сәғәт самаһы килеп сыға. Әммә педагог-методист Вәкил Хажин, әгәр дөрөҫ уҡытмай икәнһегеҙ, 4-5 сәғәт тә етмәйәсәк, тип әйтә. Был хаҡта ни тиерһегеҙ?**

**Ғайса Ишмөхәмәтов:** Һәр уҡытыусы үҙен дөрөҫ уҡытам, тип һанай, ә һөҙөмтә-өлгәш, сифат - киреһенсә. Заман башҡа, заң башҡа, тигәндәй, хәҙерге шарттарҙа замана балаһын аҙнаһына 1 сәғәттә, 0,5 сәғәттә нисек итеп дөрөҫ уҡытырға һуң? Балаларҙың күп төп башҡорт һүҙҙәренең лексик мәғәнәһен аңламауы мине ғәжәпләндерә. Шуның арҡаһында һүҙ байлығы ла һай, ә инде инша яҙа башлаһаҡ, уҡытыусы тәржемәсегә әйләнә. Уҡыусыларҙы: "Һүҙ байлығы 180 һүҙҙән торған (яртыһын һүгенеү һүҙҙәре тәшкил итә) Африкалағы ҡәбиләләр хәленә ҡалып ҡуймайыҡ!" - тип шаяртып та алам.

Туған әҙәбиәтте, башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу, бай әҙәби мираҫыбыҙҙы йәш быуынға еткереү буйынса айырым һөйләшеү талап ителә. Ҡулъяҙма әҙәбиәттән башлап хәҙерге әҙәбиәткә тиклемге шағирҙар, мәғрифәтселәр, яҙыусыларҙың ижадын нисек итеп уҡыусыларға еткерергә, художестволы әҫәр уҡырға, матур, ифрат бай, фәһемле әҙәбиәтебеҙгә ҡыҙыҡһыныу уятырға? Бына ҡайҙа ята ул илһөйәрлек, рухи-әхләҡи тәрбиә сығанағы! Мине шулай уҡ киләсәктә ошолай итеп уҡытһаҡ, китап уҡыусылар булырмы, тигән һорау ҙа борсой.

**(Дауамы 11-се биттә).**

**✓ Мөнир ипләп кенә ҡулын Гуляның яҫтығы аҫтына тыҡты. Һәм, ҡото осоп, үҙен ауыр көүҙәһе менән баҫҡан аҡ халатлы бәндәне танырға теләп, башын күтәрҙе. Илназ ҡурҡышынан ҡысҡырып ебәрҙе.**




Был хәл онотолоп та өлгөрмәне, малайҙар тағы ла Варвара Николаевнаның ҡулына барып ҡапты. Көндәрҙең береһендә Мөнир Илназға ҡағыҙ аҡса күрһәтте. Усына йомғайны уны.

- Сәлдерҙем... Гуляныҡын... Уға гел дә апаһы килә бит: һорап алғанын күрҙем, ҡайҙа һалғанын ҡарап торҙом аҙаҡ. Шунан сәлдерҙем, - тине бышылдап ҡына.

- Урлашырға ярамай бит, Мунька, - Илназ дуҫына аптырап текләне.

- Миңә кәрәк, детдомға ҡайтҡас, общакка аҡса һорарсаҡ старшак, ҡайҙан алайым уға. Гел урлайым мин, - тине уныһы бер ни ҙә булмағандай.

Илназ Мөнирҙең ни турала һүҙ алып барыуын, әлбиттә, аңламаны. Күпме генә аңлатһаң да, барыбер төшөнә алмаҫ ине дуҫын баҫҡан хәстәрҙең айышына. Сөнки яҙмыш ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа осраштырған был ике бала бер-береһенә бөтөнләй оҡшамаған көнитмеш принциптарына, кеше-ара мөнәсәбәттәргә ҡоролған йәмғиәтебеҙҙең ике төрлө ҡатламы ағзалары бит. Уларҙың һәр кеме донъяға үҙ мөхите аша баға, танып белә, ҡылыҡ-фиғел үҙләштерә, шуларға таянып, тормошто үҙенсә ҡабул итә һәм йәшәү рәүешен ҡора.

* * *

Общакка аҡса индереү - Мөнир өсөн ауыр йөкләмә. Биш йәше тулғас башланды был михнәттәре. Киске аш ашағанда, тыуған көнө менән ҡотлап, сәйгә кәнфит менән печенье бирҙеләр. Мөнир ҡыуанды был татлы бүләккә. Шунда уҡ, өҫтәл артында, ашаны - ҡалдырһа, барыбер өлкәндәр тартып аласаҡ. Был дәресте ул әллә ҡасан үткән.

Ашап сығыуға уны малайҙар көтөп тора ине.

- Именинник, әйҙә, беҙҙең менән, - тине Рудик.

Мөнир уның старшак икәнен, нимә ҡылып йөрөгәнен белә. Тәүҙә ҡурҡты, былар ҡайҙа саҡыра икән тип, шунан, һуңғы ваҡытта бер ниндәй ҙә эш боҙмауын, бер кемде лә бинахаҡҡа йәберләмәүен иҫенә төшөрөп, тынысланды.

- Биш йәшең тулды, ҙур үҫтең, инде эштә ҡатнашырға кәрәк, пацан, - тип өҙөлгән һүҙен дауам итте Рудик аулаҡ мөйөштә туҡталып. - Ай һайын общакка йөҙ һум аҡса бирергә тейешһең. Аңланыңмы?

Бәләкәстәрҙән башҡа бөтәһе лә түләгәнен белә Мөнир. Был бәләнең бынан ары үҙенең дә башына төшөүенә эсе бошто.

- Йөҙ һум күпме ул? - тип һораны йөктөн дәүмәлен белә була.

- Пүстәк - ун ҡап шырпы хаҡы ғына. Әлегә шулай. Бер йылдан тағы өҫтәләр. Нисек, хәлеңдән киләме? - старшак бик итәғәтле күренә бөгөн.

- Әллә... - Мөнир ауыр һуланы.

- Бик булмаһа, кәтлитеңде һатырһың. Миңә, мәҫәлән, - тағы йор күңеллек күрһәтте башлыҡ.

Тәүге иғәнәне Мөнир май байрамы хөрмәтенә таратылған әфлисун менән түләне. Ныҡ ашағыһы килһә лә, башҡа сараһы юҡ ине. Бынан ары татлы ризыҡтан ҡолаҡ ҡаҡмаҫ өсөн аҡса урлау юлына баҫты. Кеше күрмәгәндә эленгән кейемдәрҙең кеҫәһенә ҡапыл-ҡапыл ҡулын тығып ала. Юҡ-юҡ та тинлектәргә булһа ла юлыға. Бер мәл тәрбиәсенең ҡарауһыҙ ҡалдырған халатынан ҡағыҙ аҡса сығарҙы хатта.

* * *

...Илназ дуҫына оҙаҡ текләп торҙо. Аяғындағы тәпишкәһенән алып башы осонда тырпайып торған сәстәренә тиклем күҙҙән үткәрҙе. Нимә күрергә теләгәндер был һынамышлы ҡарашы менән, әйтеүе ауыр. Бәлки, Мөнир урынында башҡа берәү күренмәйме икән күҙҙәренә, тип икеләнгәндер шул тороуында.

- Аҡсаны кире бирәйек Гуляға... Денис ағайым килһә, мин һиңә мең һум һорап алып бирәм, яраймы, Мунька. Ул бирә ул... Добрый ул. Мин һораһам, гел бирә... Әтеү, бур, тип үсекләшһәләр, мин һинең менән нисек уйнайым... Кире бирәйек аҡсаны... - Илназ дуҫының бур булыуын теләмәй ине. Ундайҙарҙың насар кеше икәнен яҡшы белә.

- Илназик, һин дурак мәллә? Аҡсаны кире бирмәйҙәр инде... - Мөнир аптырауға ҡалды үҙ сиратында.

- Беҙ урынына һалайыҡ кире... Денис ағайым бирә ул мең һумды, - Илназ ныҡышыуын белде.

Байтаҡ һүҙ көрәштергәс, Мөнир ризалашты. Мең һум барыбер күберәк бит. Усына йомған аҡсаның хисабын белмәһә лә, мең һум тосораҡ, ҙурыраҡ, тип уйланы сабый аҡылы менән.

Бер кем дә күрмәгәндә аҡсаны урынына кире һалырға килеште малайҙар. Уларҙы ситтәрәк күҙәтеп торған Варвара Николаевнаны дуҫтар абайламаны. Үҙҙәренсә бик һаҡ ҡыландылар. Тәрбиәсе апайҙың вайымһыҙ йөҙө лә шик тыуҙырманы - ул башҡалар менән мәшғүл. Мөнир ипләп кенә ҡулын Гуляның яҫтығы аҫтына тыҡты. Һәм, ҡото осоп, үҙен ауыр көүҙәһе менән баҫҡан аҡ халатлы бәндәне танырға теләп, башын күтәрҙе. Илназ ҡурҡышынан ҡысҡырып ебәрҙе:

- Беҙ урынына... урынына һалабыҙ... Алмайбыҙ... Пажалыста, Варвара Николаевна, - илап, Мөнирҙе баҫҡан тәрбиәсенең ҡулына барып йәбеште.

- Брыс, кит бынан! - Тәрбиәсе икенсе ҡулы менән Илназды этте. - Тотолдонмо, бур? Хәҙер мин һиңә күрһәтәм кеше әйберенә нисек тейергә икәнен...

Варвара Николаевна Мөнирҙе йыуыныу бүлмәһенә һөйрәкләп алып инеп китте. Эстән бик һалды. Илназ, илап, уның артынан эйәрҙе. Тик ишектән үтә алманы.

- Варвара Николаевна, пажалыста, - малай ғәҙелһеҙлеккә сыҙай алмай, урынында тыпырсынды, бәләкәй ҡулдары менән ишекте төйҙө.

- Мә, ал дуҫыңды, - бер аҙ торғас, ишек ҡапыл асылып китте лә, Варвара Николаевна башы, өҫтө һыуланған, илауҙан шешенгән Мөнирҙе Илназ яғына этәрҙе. - Һиңә лә кәрәк ине... Ух-х!

Мөнир Илназға әйләнеп тә ҡараманы. Башын эйеп, үҙенең карауаты яғына атланы.

- Мунька... Мунька, - Илназ дуҫы артынан эйәрҙе.

- Предатель, кит бынан... Изза тебя... - Мөнир Илназды ҡаты итеп этәреп ебәрҙе. - Башҡа һин миңә друг түгел... Предатель!

Илназ бөтөнләй миңрәүләнде. Варвара Николаевна бармаҡ янап ҡалды, Мөнир, дуҫ булмайым башҡа, тей. Ни булды? Ул бит яңылышлыҡты төҙәтергә генә теләгәйне. Хәҙер дуҫы ла юҡ, тәрбиәсеһе лә уға ҡаныға.

Бөтөнләй юғалған ҡиәфәттә ултырғысына сүгәләне. Ғәрлектән, ғәҙелһеҙлектән илауҙан башҡа сараны күрмәне. Ығызылып оҙаҡ ултырҙы. Эргәһенә килеүсе булманы. Йоҡларға ваҡыт еткәс, шыпырт ҡына урынына барып ятты ла тағы ҡайғылы уйҙарға сумды: "Инде әсәһе лә, дуҫы ла юҡ. Атаһы ташлап ҡайтып китте. Ҡайҙа яҡты, йылы өйҙәре шаян ағаһы? Япа-яңғыҙ! Уны бер кем дә яратмай... Бынан ары нисек йәшәр, кем менән һөйләшер, уйнар?.."

Илауҙан арыған, бәләкәс башына төшкән бәләнән албыраған бала күп тә үтмәй йоҡлап китте. Һаташып, ауыр йоҡланы. Төшөндә Мөнирҙән ҡурҡып, ҡысҡырып та алды.

* * *

Әгәр сабый, ололар шикелле, ауыр кисерештәрен күңелендә оҙаҡ һаҡлаһа, аҡылға зәғиф булып үҫер ине. Тиҙ онота, кисә булғанды бөгөнгөгә ыҫҡынмалыҡ итеп бәйләп ҡуймай. Бала, ғәҙәттә, йоҡонан пакланып уяна һәм ҡыуанып, яңы көнөн башлай. Илназ менән Мөнир ҙә, иртәнге мәшәҡәттәрен бөтөрөп, ашап алғас, бер ни булмағандай бергә уйнап алып китте. Дуҫлыҡтары ҡаҡшамағайны.

- Мең һум бирер микән Денис ағайың? - тип кенә бер тапҡыр һорап алды Мөнир уйын араһында.

- Бирә, нишләп бирмәһен, мына һиңә, - Илназ шикләнергә урын ҡалдырманы.

Шифахана тормошо һәүетемсә дауам итте. Рәсәй Конституцияһы көнөнә концерт әҙерләү менән янып йөрөй ине был мәлдә тәрбиәселәр. Кем бейей, йырлай, шиғыр һөйләй белә - барыһын да һынап ҡарайҙар, сәхнәгә сығарырлыҡтарынан исемлек төҙөйҙәр.

- Һин нимә эшләй беләһең? - тип Илназдан да һоранылар.

- Йырлай беләм, - тине малай тәүәккәл генә.

Уны уртаға сығарып ҡуйҙылар ҙа йыр башлауын һоранылар. Илназ, ҡыйыу атлап, халыҡ алдына сығып баҫты. Шымып ҡалған балаларға, ололарға баҡты ла йыр башланы:

*"Цыпленок жареный,*
*Цыпленок пареный -*
*Цыпленок тоже хочет жить!*
*Его поймали,*
*Арестовали,*
*Велели паспорт показать..."*

- Тукта, тукта тейем! - тип яр һалып һөрәнләгән директорҙы ишетмәне лә тәүҙә хатта. Йырға бигерәк бирелеп киткәйне шул. - Тукта, паразит малай!

Ярһыған директор урынынан килеп торғас ҡына аптырап туктаны Илназ.

- Кем өйрәтте һиңә был йырҙы? - тине үҙен ярһыуҙан саҡ тыйып торған хужа.

- Үҙем беләм, - Илназға уны махсус рәүештә бер кем дә өйрәтмәне, үҙе отоп алды Мөнирҙән. Шуға ышаныслы яуап бирҙе.

- Мостафин өйрәттеме? Әйт! - Мөнирҙең фамилияһы Мостафин икәнен Илназ белә, исемлек буйынса тикшергәндә бөтәһенекен дә әйтәләр. Ул үҙе - Байтирәков.

- Өйрәтмәне. Мунька йырланы, мин отоп алдым, - Илназ был юлы ла ялғанламаны.

- Концерт бөттө, таралышығыҙ, - директор уғата ныҡ көйһөҙләнде.

Малай, ғәжәпләнеп, аптырауға ҡалды. Ирмәк йыр, нишләп ул тиклем асыуланып ҡысҡырырға инде?

* * *

Директор тәрбиәселәрҙе ашығыс рәүештә биш минутлыҡ кәңәшмәгә йыйҙы.

- Байтирәков интеллигенттар ғаиләһенән. Әсәһе - баш бухгалтер, атаһы - төҙөлөштә мастер. Тәрбиәле, ҡәҙерле бала. Мостафинға эйәреп, тамам хулиган булып китәсәк ошо ике ай эсендә. Режимды боҙоп тотолдолар, уғрылыҡта фашландылар. Инде блатной йыр һуҙа бәләкәй шайтан. Ата-әсәһе беҙгә рәхмәт әйтмәҫ. Министрлыҡҡа ялыу яҙып ебәрһәләр нисек булыр? Онотмайыҡ: ошо йылы урын арҡылы, ҡалъяны артыҡ мул һоғонмаһаҡ та, ярты йыллап аҡса күрмәгән башҡалар ише ҡоро макарон ашап ултырмайбыҙ. Бындағы балалар ҙа асыҡмай, беҙ ҙә өйҙә, ашъяулыҡ йәйеп, унда нимә ҡуйырға белмәй аптыранмайбыҙ. Шөкөр итеп кенә, йорттан яман һүҙ сығармай, эшләргә лә эшләргә һәммәбеҙгә. Байтирәков менән Мостафинды артабан бергә ҡалдырып булмай. Ниндәй тәкдимдәр булыр был йәһәттән? - Хужа барыһына ла һөҙөп ҡарап сыҡты.

- Ваҡытынан алда ҡайтарып ебәрә алмайбыҙ инде. Төрлө төркөмдәргә айырырға кәрәк малайҙарҙы, - Варвара Николаевна башҡаларҙан уҙҙырып һүҙ башланы.

- Илназ Мөниргә бигерәк ныҡ эҫенеп китте. Башҡаларҙы үҙһенмәй бигүк. Мөнир ҙә, уға ҡарап, яҡшыға үҙгәрә. Бәлки, малайҙарға тейергә кәрәкмәйҙер. Күберәк иғтибар бүлһәксе уларға, - Тамара Петровна, тәжрибәле, үҙ эшенә яуаплы ҡараған педагог булараҡ, хәлде тәрбиә эше аша төҙәтергә тәҡдим индерҙе.

- Мин һеҙҙе аңлайым, Тамара Петровна, тик бында бит мәктәп түгел. Балалар ике ай һайын алышынып тора. Мостафин, детдомына ҡайтһа, бындағы булған тәрбиәне шунда уҡ онотасаҡ. Байтирәков та үҙ ғаиләһендә тиҙ генә кире ипкә ултырыр. Беҙгә үҙебеҙҙе янъялдан, ялыуҙан ҡурсалап алып ҡалыу зарур. Коллективҡа өҫтәгеләрҙең иғтибары кәрәкмәй. Кәрәкмәй, эйе... Үҙ эшебеҙҙе beләбеҙ, еренә еткереп атҡарабыҙ. Нимәгә кемдеңдер килеп соҡоноп йөрөүе? Сүптәп сүмәлә өйөргә сәбәп бирмәйек. Шул ғына... Эйе, Варвара Николаевнаның тәҡдимен хуплайым. Малайҙарҙы төрлө төркөмдәргә айырырға кәрәк. Бөгөн үк Мостафинды "Г" корпусына урынлаштырығыҙ, - директор әмерен бирҙе лә, кәңәшмә тамам икәненә ишаралап, өҫтәлендәге ҡағыҙҙарҙы ҡараштыра башланы.

- Яуаплылыҡты үҙ өҫтөмә алһам әгәр...

- Юҡ, юҡ, Тамара Петровна, мәсьәлә хәл ителде... Ҡатмарлаштырмайыҡ уны... Кәрәге юҡ, - директор Тамара Петровнаға һүҙ әйтергә ирек бирмәне.

Варвара Николаевнаның тәҡдиме хупланғас, эште лә уға йөкмәттеләр. Уныһы ҡушылған йомошто оҙаҡҡа һуҙып торманы. Шунда уҡ малайҙар йәшәгән осҡа үтте.

- Мостафин, әйберҙәреңде йый, икенсе корпусҡа күсәһең, - үҙе ҙур ихласлыҡ менән баланың монаятын төйнәргә кереште.

**(Дауамы. Башы 34-35-се һандарҙа).**

***✓ Әсә телебеҙҙең матурлығын, байлығын тулы кимәлдә файҙалана, ҡуллана алыу өсөн, сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе һирәк ҡулланыу өсөн эшләйһе эштәребеҙ күп.***



# БАҺАЛЫ ХАЛЫҠ БУЛАЙЫҠ, ТИҺӘК...

## Туған телебеҙҙе ҡәҙерләйек

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Рифат Әюпов:** Туған тел дәресе аҙнаһына - 1 сәғәт, ә инглиз теле - 3 сәғәт. Әйтегеҙ әле, 11 йыл уҡып, кемдең балаһы саф инглиз телендә һөйләшә? Вәкил Хажин ағайҙың фекере менән килешәм, дөрөҫ уҡытырға кәрәк. Быны өсөн, алдан әйтеүемсә, уҡытыу методикаһын тулыһынса киренән ҡарап сығырға тейешбеҙ. Шул методикаға ярашлы, юғары уҡыу йорттарында буласаҡ уҡытыусыларҙы әҙерләргә тейештәр. Китаптар сыға, методика юҡ.

**Наил Юлдашбаев:** Мин Вәкил ағай Хажиндың "Киске Өфө"ләге сығышында әйткәндәр менән тулыһынса килешәм. Бөгөнгө көндә алдынғы илдәрҙә үҙҙәренең эш алымдарын, шул иҫәптән белем биреү өлкәһендә лә, интенсив юлға күсерәләр: ваҡытты арттырмайҙар, ә методиканың сифатын яҡшырталар. Мәҫәлән, шундай ваҡиға иҫтә ҡалған: кемдер Төркиәгә ял итергә барғас, таксиға ултырып йөрөгән. Төрөк милләтенән булған таксист уның менән рәхәтләнеп рус телендә аралашҡан. "Рус телен ҡайҙан беләһең?" - тип һорағас, ул: "Рәсәйҙән килгән кешеләр менән эшләү өсөн бер йыллыҡ курсҡа йөрөнөм", - тип яуап биргән. Аптырарлыҡ, төрки телле кешене бер йылда һөйләшергә өйрәткәндәр. Ниндәй методика ул?

Ҡыҙғаныска ҡаршы, беҙҙең халыҡта экстенсив фекерләү өҫтөнлөк итә, йәғни күберәк булһа, сифатлыраҡ була, тип уйлайҙар. Шуға, ниндәйҙер предметтан Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләй башлаһалар, мәктәп етәкселәре уларға өҫтәп, тағы дәрес сәғәттәре бирә башлай, хатта ниндәйҙер юлдар менән икенсе предметтың сәғәттәрен тартып алырға мөмкиндәр. Уҡытыусылар ҙа шуға өйрәнеп китте: нимәлер килеп сыҡмаһа, өҫтәп, сәғәт һорай башлайҙар. Эш алымдарын үҙгәртергә уйламайҙар ҙа. Ундай сәғәттәр һаны арттырылған дәрестәрҙән уҡыусылар ҙа йонсой башлай, хатта ҡасып киткән осраҡтары ла күҙәтелә. Ә бит методиканың сифатын күтәрһәң, уҡыу планы буйынса бүленгән сәғәттәр һаны ла етә, хатта баштан ашҡан. Мин дә Вәкил ағайҙың һүҙҙәренә ҡушылып, шуны әйтә алам: әгәр уҡытыу алымдарының сифатын күтәрмәйҙәр икән, предметты өйрәнеүгә 4-5 кенә түгел, 8-9 сәғәт тә етмәйәсәк...

Ә һорауҙың беренсе өлөшөнә килгәндә, әлбиттә, туған телде өйрәтеүгә 1 сәғәт бик әҙ. Әгәр дәрестәр элеккесә 2 йәки 3 сәғәт булып, методикаға ҡараштарыбыҙҙы үҙгәртәбеҙ икән, күп нәмәгә өлгәшәсәкбеҙ.

**Дәрестәр һаны аҙ икән, мәктәптәге барса кластан тыш саралары, тәрбиә эштәрен тулыһынса башҡорт телендә алып барыу фарыз. Һеҙҙең фекерегеҙ?**

**Ғайса Ишмөхәмәтов:** Ауыл мәктәптәрендә былай ҙа бөтә саралар ҙа башҡорт телендә алып барыла.

**Наил Юлдашбаев:** Быныдай фекерҙе хуплайым һәм яҡлайым. Әйткәндәй, башҡорт ауылдарындағы мәктәптәрҙә былай ҙа шулай эшләйҙәр. Ә бына башҡорт-рус, рус мәктәптәрендә хәлдәр икенсерәк. Ундайҙарҙа барыһы ла мәктәп етәкселегенән тора. Әгәр мәктәп етәкселеге рухлы, юғары мәҙәниәтле булһа, саралар ике телдә бара. Был бик яҡшы, шулай булырға тейеш. Ҡыҙғаныска ҡаршы, саралар бер телдә генә алып барылған мәктәптәр ҙә етерлек...

**Туған телебеҙҙә аралашыуҙы "модаға" индерергә кәрәк тиҙәр. Һеҙҙең тәҡдимдәрегеҙ?**

**Ғайса Ишмөхәмәтов:** Тәҡдимем: туған телебеҙҙә аралашыуҙы "модаға" (миңә был һүҙ оҡшамай) индерергә түгел, ә "милли идеяға" әйләндерергә, күтәрергә кәрәк. Әсә телебеҙҙең матурлығын, байлығын тулы кимәлдә файҙалана, ҡуллана алыу өсөн, сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе һирәк ҡулланыу ("модаға" әйләнеп китте), телебеҙҙе "бысратмау" өсөн эшләйһе эштәребеҙ күп. "Тел менән саҡ-саҡ аралашыу - саҡ-саҡ фекер йөрөтөү ул", тигән аҡылды онотмайыҡ. Әгәр ҙә баһалы, ҡәҙерле халыҡ булайыҡ тиһәк, туған телебеҙҙе ҡәҙерләйек.

**Рифат Әюпов:** Башҡортса һөйләшеүҙе модалы эшләргә кәрәк, тип кенә уны модалы итеп булмай. Уның өсөн Берҙәм дәүләт стратегияһы, программаһы булырға тейеш, аҫтан башлап өҫкә тиклем һәр кем ошо стратегия, программаға ярашлы эшләргә бурыслы. Ошо эш башҡарылмай икән, үҙгәрештәр булмаясаҡ.

**Күп кенә йәш-ата әсәләр өйҙәрендә башҡортса һөйләшмәй, ҡартатайолэсәйҙәр айырым йәшәй. Бындай ата-әсәләрҙе "тәрбиәләргә" кәрәктер бит?**

**Ғайса Ишмөхәмәтов:** Йәш ата-әсәләргә һәм ҡартатай, өләсәй, ҡартәсәйҙәргә үҙем ҡартатай булараҡ кәңәшем шул: тел - балаға бирелгән Хоҙайҙың оло бүләге. Башҡорт балаһын ошо бүләктән мәхрүм итмәйек, телен боҙҙоң икән, тимәк, фекерләүен боҙҙон, рухын һындырҙың. Саф башҡорт исемдәрен ҡушыуҙан башлайыҡ эште. Мин үҙем уландарыма Салауат, Айтуған, Тимербулат тип ҡуштым. Ҡаланан ҡайтҡан дүрт йәш ярымлыҡ ейәнсәрем Мәрйәм дә саф башҡортса һөйләшә.

**Рифат Әюпов:** Ә ул ата-әсәләрҙе кем тәрбиәләргә тейеш? Әлеге мәктәп, уҡытыусымы?

**Наил Юлдашбаев:** Тел тәрбиәһен ғаиләлә башларға кәрәк, тип әйтәбеҙ ҙә ул. Тәрлө ата-әсәләр бар бит. Кемдер тәрбиәләй белә, кемдер юҡ. Әйтәйек, миңә йыш ҡына ата-әсәләр киләләр ҙә, нисек итеп өйҙә әсә теленә өйрәтергә икән, тип һорайҙар. Нимәнән башларға ла белмәйбеҙ, тиҙәр. Нимә әйтмәк булам: бөгөнгө көндә ғаиләлә әсә теленә өйрәтеү методикаһы талап ителә. Мин шуға бер-нисә йыл элек Бәйләнештәге үҙемдең битемдә ике пост яҙҙым, йәғни үҙемдең ғаиләләге әсә теленә өйрәтеү тәжрибәләремде системаға һалып, ниндәйҙер кимәлдәге методикаларымды тәҡдим иттем. Аптырап киттем: был яҙмаларыма ихтыяж бик ҙур булып сыҡты! Бик күп репостар яһалды, әллә нисә тиҫтә мең кеше ҡарағандыр. Ошо йүнәлештә эш дауам ителергә тейеш. Башҡалар ҙа үҙ тәжрибәләрен яҙһындар ине. Күпмелер ваҡыттан һуң бөтәһен бергә берләштереп, анализлап, иң һөҙөмтәле тип табылғандарын бергә туплап, ата-әсәләр өсөн "Ғаилә шарттарында әсә телен өйрәтеү" исемле бәләкәй генә, ябай ғына методик ҡулланма сығарырға кәрәк. Ул ҡағыҙ форматында ла, интернетта ла булырға тейеш.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Әңгәмәне уҡып сыҡҡас, һеҙҙә ниндәй һорауҙар тыуҙы? Бәлки, кемдер фекер ялғарға, фекер әйәртергә теләр? Әйҙәгеҙ, һөйләшеүгә ҡушылығыҙ. Ысынында, балаларыбыҙҙың туған телдә һөйләшеү, уҡыу хәле һәр башҡорт ғаиләһен борсорға тейеш һымаҡ. Беҙ, әлбиттә, был проблеманың да сиселеүен ситтән эҙләргә, юғарылағыларҙы ғәйепләргә яратабыҙ. Ләкин ситтәгеләр, юғарылағылар һинең "Ғаилә" тигән дәүләтең эштәренә ҡыҫыла, балаларыңдың туған телдә һөйләшеүен тыя алмай бит. Барыһы ла үҙебеҙҙән тора икәненә төшөнөргә ваҡыт түгелме икән?**

Һорауҙарҙы
Вәли ИҘРИСОВ
бирҙе.

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# ТЫҢЛАУҺЫҘ ӨЙРӘК БӘПКӘҺЕ



Бииик алыҫ бер ерҙә, Африка тигән илдә, зәңгәр күлдең ярында, йәшәгән, ти, өйрәктәр ғаиләһе: атаһы, әсәһе һәм күптән түгел йомортҡанан ярылып сыҡҡан бәләкәй генә өйрәк бәпкәһе. Бәпкә алтын төҫөндәге йомшаҡ йомарсыҡҡа оҡшаған ине, сөнки улар йомшаҡ мамыҡ йөн менән тыуалар, тик аҙаҡ ҡына ҡауырһындары барлыҡҡа килә.

Өйрәктәрҙең ояһы һыуҙан алыҫ булмаған ерҙә, ҡасандыр дауылда ауған ағасты уратып үҫкән ҡуйы ҡамышлыҡ эсендә урынлашҡан була. Атаһы менән әсәһе үҙҙәренең йомшаҡ малайҙарын ныҡ яраталар һәм һаҡлайҙар. Уға күлгә яҡын барырға һәм һыуға төшөргә ҡәтғи рәүештә тыйыла. Улар: "Улым! Күлгә төшә күрмә! Унда гепард, арыҫлан, фил, зебра исемле ҡырағай ат тоҡомдары, антилопа, юлбарыҫ һымаҡ ҙур йыртҡыс хайуандар һыу эсергә төшәләр. Йә тапап, йә ашап, йә йотоп ҡуйырҙар!" - тип иҫкәртеп кенә торалар.

Ата-әсәһе йоҡлаған иртә таң менән аңһыҙ өйрәк бәпкәһе ояһынан сығып, күлдең ярына килә. "Атай менән әсәй әле уянмаған, ҡурҡыныс йыртҡыстар ҙа йоҡлайҙар. Тик бер генә күҙ менән ҡарайым да, береһе лә һиҙмәй ҡалыр, кире инем ятырмын!" - тип фекер йөрөтә тыңлауһыҙ өйрәк бәпкәһе.

Таң һарыһы беленә башлауға күл өҫтөндә күкһел томан йәйелә. Һалҡын елсләк һиҙелә. Күл дә әле тәмле йоҡоһонан уянмаған һәм уның йоҡоло тын алышы яр буйындағы ҡыуаҡлыҡтарҙы, ҡамыштарҙы, үләндәрҙе үҙ ҡосағына алған кеүек тойола. Тик ҡайҙалыр алыҫта, һыу өҫтөндә тегеләй-былай йөрөгән синерҡәләрҙе тоторға ниәтләгән балыҡтарҙың һыу сәсрәтеп сәпелдәүе, ҡарпыуы ғына ишетелә.

"Ә бында матур! Атай менән әсәйҙең күлдә йөҙөргә рөхсәт итмәүҙәре дөрөҫ түгел! Мин бит һәйбәт йөҙәм һәм сума ла беләм!"- тип уйлай өйрәк бәпкәһе. Тәпәйҙәре менән шапылдай-шапылдай һыуға инә һәм күлдең уртаһына йөҙөп китә. Туйғансы йөҙөп, хәлдән тайғансы сумып, өйгә ҡайтыу ниәте менән ярға табан ынтыла бәпкә. Һәм ошо мәлдә уны ҡапыл ҙур тулҡын өҫкә ташлай. Ауыр ҙур нәмәне күлгә ташлағандай, күл өҫтөндә тулҡындар барлыҡҡа килә. Бәпкә, көҙгөләй тигеҙ күлдең ҡаршы ярынан, һыу өҫтөн икегә ярып, үткер тешле ауыҙын ҙур асып, уға табан крокодилдың йүнәлгәнен шәйләй ала.

Ҡото осҡан бәпкәнең кескәй генә йөрәге бәләкәй моторҙай дерелдәй башлай. Ул аяныс әмәтһеҙ тауыш менән: "Крря! Крря! Әсәй!" - тип ҡысҡыра-ҡысҡыра, бар көсөнә тәпәйҙәре менән ярға табан ишергә тотона. Аңра ғына бәләкәй өйрәк бәпкәһе ҙур ҡанһыҙ йыртҡыс крокодил менән ярыша аламы һуң? Крокодил килеп етеп, бәпкәне эләктәрә инде тигәндә, ҡапыл мылтыҡ тауышы яңғырай. Крокодил туҡтап ҡала, күл өҫтөнә бүрәнә һымаҡ һуҙылып ята... Тулҡындар уның кәүҙәһен тирбәтергә тотона... Бәхетенә, һунарсы кисәнән алып уны аңдып күҙәткән икән. Ә аҡылһыҙ өйрәк бәпкәһе күл өҫтөндә уйнап-шаярып, үҙе лә уйламаҫтан, йыртҡысты йәшеренеп ятҡан еренән сығырға мәжбүр иткән.

Атыу тауышы шаңдау булып бөтә тропик далаға тарала һәм ундағы көнитеүселәрҙе ығы-зығы тыуҙырып ҡуҙғыта. Таңғы һиллек быжҡылдау, саңҡылдау һәм ҡаңғырған ҡошҡорттарҙың сөрөлдәү, шыҡырлау ауаздары менән тула. Бәпкәнең ата-әсәһе малайҙарын яндарында күрмәгәс, уны эҙләргә ташлана. Ҡурҡҡан, ҡалтыраған бәпкәне ҡороған үләндәр ҡаплаған түңгәк аҫтынан табып алалар. Тыуған өйөнә ҡайтып тынысланғас ҡына, ата-әсәһенә үҙе менән булған мажараларҙы һөйләп бирә. Улының һөйләгәнен тыңлап бөткәс, атаһы ҡәтғи рәүештә былай тип әйтә: "Улым! Әгәр беҙ, һинең атайың-әсәйең, нимәлер рөхсәт итмәйбеҙ икән, шуны белеп ҡуй: тимәк, беҙ һине яратабыҙ, һине ҡурсалайбыҙ һәм тик яҡшылыҡ ҡына теләйбеҙ! Бөгөн беҙҙең әйткәнде тыңламау сәбәпле, саҡ һәләк булманың бит! Зинһар өсөн, иҫеңдә тот, атай, әсәйҙе тыңлау, һәр саҡ үҙеңә файҙаға ғына булыр... "

Хәҙистән: "Кем Аллаһ Тәғәләгә буйһоноп, атаһын да, әсәһен дә тыңлай, шуға Йәннәттә ике ишек асылыр, ә кем береһен генә тыңлай, уға бер ишек асылыр".

**Энгин НИГАР "Әкиәттәрҙә әҙәп күркәмлеге". Төрөксәнән Мөслимә АСҠАРОВА тәржемә итте.**

✔ *Ҡартаталары Бөйөк Ватан һуғышы ветераны ине. Унан күп тарихты тыңлап үҫтеләр. Ҡартаталарынан фәһем алып, "Беҙ яугир Көсөкбаевтар тоҡомо, ватан саҡырыуы тип ҡабул итәбеҙ, беҙ барабыҙ", тип хәл иттеләр.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИКЕ ТЕЛДӘ ҺӨЙЛӘШҺӘҢ...

■ Ике телдә иркен һөйләшеүселәр инсульт эҙемтәләрен еңелерәк кисерә, ти ғалимдар. Улар белдереүенсә, ике телдә аралашыусылар инсульттан һуң ике тапҡырға тиҙерәк һауыға. 608 пациентты күҙәтеп, улар ошондай һығымтаға килгән. Сирлеләргә иғтибар һәм мәғлүмәтте ҡабул итә алыу сифаттарының кире ҡайтыуы айырыуса ҡыҙыҡһындырған табиптарҙы. Кем ике йәки унан күберәк телдә иркен һөйләшә, инсульттан һуң уларҙың баш мейеһе эшмәкәрлеге 40 процент осраҡта тулыһынса тәҙәлгән, ә бер тел белеүселәрҙең 20 проценты ғына быға өлгәшә алған. "Ике телдә һөйләшеүсе сит телдә һөйләшеүгә күскәндә туған телен "баҫып" тора, юғиһә ул икенсеһен әүҙемләштерә алмай. Баш мейеһе ошо рәүешле даими күнегеү эшләгәс, инсульттан һуң уларға өйрәнелгән тормошона ҡайтыуы еңелерәк була", - ти Шотландия ғалимы Томас Бек.

■ Голландия ғалимдары күп балалы әсәй булыу өсөн нисә йәштә бала таба башларға кәрәклеген иҫәпләп сығарған. Һуңғы 300 йыллыҡ статистикаға таянып, бала табыу өсөн иң идеаль йәш аталған. Әммә был һан ҡатын-ҡыҙҙың психологик торошонан һәм ул йәшәгән илдең экологияһына бәйле үҙгәрә ала. Шулай ҙа бер бала менән сикләнергә теләгән ҡатын-ҡыҙ 32 йәшкә тиклем бала табырға тейеш. Был ваҡиғаны һуңғараҡ ҡалдырыу баланың сәләмәтлегендә сағылыуы ихтимал. Әгәр ҙә ғаиләлә ике бала булһын, тигәндәр тәүге сабыйын 27 йәшкә тиклем ҡулына алырға тейеш. Күп балалы ҡатындар иһә 23 йәштән үк хыялын тормошҡа ашыра башларға бурыслы. Әле биш йыл элек кенә хәбәр итеүҙәренсә, күп Европа илдәре өсөн 30 йәштә тәүгә әсәй булыу ғәҙәти хәл иҫәпләнә ине. Бизнес өлкәһендә ҙур уңыштарға өлгәшкән ҡатын бер ханымдар 35 йәштә лә һуң түгел тип раҫлай. Тағы бер тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе ҡыҙыҡ булыр моғайын - 27 йәшлек ҡатын-ҡыҙҙарҙың балаһы даһи булып тыуа. Ә бына 16-22 йәшлектәрҙең балаһы интеллект кимәле менән артыҡ айырылып тормай. Медицина күҙлегенән ҡарағанда, 15 йәштә әсәй булыу күпкә яҡшыраҡ.

■ Һимеҙ кешеләргә фитнесты С витамины ҡушылған аҙыҡ өҫтәмәләре алыштыра ала, тигән һығымтаға килгән Колорадо университеты ғалимдары. Был файҙалы витаминды даими ҡулланыу йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына күнегеүҙәр һымаҡ кеүек тәьҫир итә икән. Тулы кәүҙәле кешеләрҙә эндотелин аҡһымы әүҙемлеге һөҙөмтәһендә ҡан тамырҙары эшмәкәрлеге боҙола, был иһә йөрәк менән бәйле проблемаларға алып килә. Был аҡһымдың әүҙемлеген даими спорт менән шөғөлләнеү генә түбәнәйтә ала. Шуға ла ғалимдарҙың яңы асышы быңдай категория кешеләр өсөн еңеллек килтерәсәк. С витамины ҡан тамырҙары эшмәкәрлеген яҡшырта. Һис юғында, С витамины ҡабул иткәндән һуң организмға дәрт өҫтәлеп, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән күнегеүҙәр эшләй башлауы ла бар. Шулай ҙа башҡа ғалимдар ҙа был витамин спортсылар өсөн кәрәкле, тип иҫәпләй.

■ Ҡытай ғалимдары шәхси гигиена әйберҙәре сәләмәтлеккә ҙур зыян килтерә, тип белдерә. Пекин университеты белгестәре уларҙың хатта бала төшөү хәүефенә килтереүе тураһында әйтә. Тикшеренеүҙәрҙә 300 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан, 132-һе быңдай проблема менән осрашҡан. Уларҙың анализдарында табиптар ҡайһы бер фталаттарҙың күләме ҙур булыуын асыҡлаған. Быңдай фталаттар шампунда, һабында, шулай уҡ аҙыҡ-түлектең ҡаптары составында бар. Фталаттар артыҡ ауырлыҡ йыйыуға ла булышлыҡ итә, ти ғалимдар.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ӘСӘЛӘР КӨТӘЛӘР УЛДАРЫН

**Бүребай ауылында, оло йәштә булыуға ҡарамаҫтан, әүҙем тормош алып барған һәм күп йәһәттән республика халҡына үрнәк булырҙай рухлы заттарыбыҙ байтаҡ. "Миләшкәй" вокал ансамбле коллективы был йәһәттән айырым урын биләп тора - тәрлә йәштәге әсәләр милли сәнғәтебеҙҙе халыҡ күңеленә еткерер өсөн тырышлыҡ һала, мәҙәниәтебеҙгә үҙҙәренең биҙәктәрен өҫтәй. Улар араһында етмеш йәшлек Миңзәлә Муса ҡыҙы Көсөкбаева ла бар. Заманында дауаханала санитар булып та, почтальон булып та эшләй ул, әле лә хеҙмәт кешене матурлай, тип йәшәй. Ире Булат Көсөкбаев менән тормоштоң төрлө һынауҙарын ауырлыҡтарын кисерергә тура килә. Өс улына ла лайыҡлы тәрбиә бирәләр. Миңзәлә Муса ҡыҙының ике улы МХО-ла хеҙмәт итә. Был үҙгәреш әсәнең тормошона 2022 йылда килеп инә. Улдарҙы ҡыҫҡа ваҡытлы отпускынан ҡаршы алыу һәм оҙатыу менән бәйле йылдар... Әсәнең кисергәндәрен аңлауы ауыр түгел. Уның менән ҡуша беҙ ҙә үткән юлдарға күҙ һалайыҡ.**

- Ирем Булат Көсөкбаев менән ғүмер буйы Бүребай ауылында йәшәнек. Өс улыбыҙ ҙа ошонда тыуҙы. Улдарҙы башлы-күҙле итеп, уларҙың ейәндәрен һөйөргә насип булды. Тик бына МХО-ның башланыуы күптәрҙең тормошона ла, эске донъяһына ла үҙгәрештәр индерҙе. Өлкән улым Азат дүрт йылға яҡын ут эсендә йөрөнө. 22-се йылда киткәйне. "Аҡ барыҫ" ине уның ҡушаматы. Шөкөр, яныраҡ, илле йәше тулғас, бөтөнләйгә әйләнеп ҡайтты. Кинйә улым Марсель МХО-ла йөрөй.

Бына шулай ирем менән өс ул үҫтереп, Бөйөк Ватан һуғышы бөтөүгә һикһән йыл үткәс, тағы ла ғәрәсәт башланыр, тигән уй башҡа ла килмәгәйне. Уландарҙы ҡаршы алыуы бер нәмә лә түгел, бына кире оҙатып ебәреүе ҡыйын.

➔ **Улдарығыҙ МХО-ға китергә ҡарар итеүҙәрен һеҙгә нисек хәбәр итте?**

- Азатым унда китер алдынан шылтыратты, мин, әлбиттә, ҡаршы булдым. Ләкин күптән үҙаллы тормош көткән улан һине тыңлаймы ни инде... Кинйәһе 2023 йылда китте. Ир-егет рухын булдырыуҙа ҡартатаһының тәрбиһе көслө блғандыр, тием. Ҡартаталары Бөйөк Ватан һуғышы ветераны ине. Унан күп тарихты тыңлап үҫтеләр. Хәсәйен ҡайным һуғыштың башынан аҙағына тиклем булып, ауыр яралар менән әйләнеп ҡайта. 1948 йылда минең буласаҡ ирем тыуған. Бына шулай ҡартаталарынан фәһем алып, "Беҙ яугир Көсөкбаевтар тоҡомо, ватан саҡырыуы тип ҡабул итәбеҙ, беҙ барабыҙ", тип хәл иттеләр. Мин уларҙан: "Ҡайҙа йөрөйһөгөҙ, унда нindәй хәлдәр бара?" - тип, төпсөнмәйем дә, һорашмайым да. Үҙҙәре лә: "Әсәй, әҙерәк белһән, тынысыраҡ йоҡларһың", - тинеләр. Шулай. Балалар имен-һау йөрөһөндәр, тип, теләп кенә ултырам.

➔ **Ошондай донъяға етди ҡарашлы улдар тәрбиәләүҙә атай кешенең абруйы кәрәк. Буласаҡ ирегеҙ менән нисек таныштығыҙ?**

- Бүребайҙың беренсе мәктәбендә унынсы класты тамамлағас, Сибай ҡалаһына һөнәри-техник училищеға киттем, унда башня краны машинисы һөнәрен үҙләштерергә ниәт иттем. Ағас эшкәртеү комбинатына, тау-байыҡтырыу фабрикаһына практикаға йөрөнөк. Минең хыялым крансы һөнәре алып, диңгеҙле яҡтарға эшкә китеү ине, шундағы порт кранында эшләрмен, тип уйлай инем. Ағас эшкәртеү комбинатынан бер нисә ҡыҙ практиканан ҡайтып йөрөйбөҙ. Тимер юл аша үтергә кәрәк. Эргәһендә ҙур юл. Бер машина нығ итеп пипелдәтә. Беҙ, ҡыҙҙар, ҡурҡышып ҡасабыҙ, баҡтиһәң, Булат минең иғтибарҙы йәлеп итер өсөн шулай итә икән. Күреп, күҙе тө-шөп йөрөгән. Ул Иҫке Бүребайҙан булып сыҡты. Шунан әсәйҙәргә кәрәк-ярағын тейәп, мине һоратырға барған. Минһеҙ никах уҡыткандар, әсәйҙәр: "Ҡайт, һине кейәүгә бирҙек", - тигәс, Сибайҙан ҡайтырға тура килде. Шулай тейеш тип уйланым, ул саҡта миңә ун туғыҙ йәш ине. Булат менән утыҙ ете йыл бергә йәшәнек. Бик етеш, матур тормош көттөк, Аллаға шөкөр.

➔ **Миңзәлә ханым, ә һеҙҙең бала саҡ нисек үтте?**

- Күнелдә тик яҡты, йылы хәтирәләр генә һаҡлана. Юша ауылында саман өйҙә йәшәнек. Ете бала үҫтек, мин ғаиләлә иң өлкәне. Бәләкәстәрҙең сәңгелдәген бәүетеп, улар илаһа,

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЮРМАТЫ ШӘЖӘРӘҺЕ ТУРАҺЫНДА



**Юрматы ырыуының беҙҙең көнгә тиклем бер нисә шәжәрәһе килеп еткән. Улар күбеһенсә төрлө журнал, китаптарҙа донъя күргән. Әлеге көндә шулар араһынан киң йәмәғәтселеккә һәм хатта ғалимдарға ла аҙ билдәле булған бер шәжәрә тураһында әйтеп үтке килә.**

Был шәжәрәне билдәле йәмәғәт эшмәкәре, тарихсы Сәғит Мирасов (1880-1932) 1912 йылда Ашҡаҙар Аллағыуаты ауылында (хәҙерге Стәрлебаш районы Үрге Аллағыуат ауылы) булып, Сөләймән хажи Асҡарова һаҡланған шәжәрәнән күсереп яҙып алған. Әммә шәжәрәнең бик туҙған булып, ике бите булмай сыҡҡан. 1927 йылда Юрматы ырыуының ошо шәжәрәһен С. Мирасов "Башҡорт аймағы" журналының дүртенсе һанында үҙенең "Башҡорт шәжәрәләре (таира)" мәҡәләһендә баҫтырып сығарған. Сәғит Мирасов яҙыуынса, шәжәрәләге һуңғы дата 1651 йыл булып сыға. Шәжәрә тулы булмаһа ла, уның әһәмиәте ырыу тарихы, башҡорт халҡының тарихы өсөн бик ҙур. Бында беҙ уның башҡа Юрматы ырыуы шәжәрәләренән айырмалыҡтары тураһында ғына ҡыҫҡаса әйтеп китмәксебеҙ.

Шәжәрәлә, беренсенән, Тәтегәс бейҙең ата-бабалары тулы ғына күрһәтелгән: Яфес, уның улы Төрк, Төрк улы Тотоҡ, Тотоҡ улы Баҡты, Баҡты улы Кейек, Кейек улы Әләнчә, Әләнчә улы Илтәҙәр, Илтәҙәр улы Илбарс, Илбарс улы Юлбарс, Юлбарс улы Аҡъегет, Аҡъегет улы Солон (бәлки Солоҡ), Солон улы Дәрбәш, Дәрбәш улы Хәмәт, Хәмәт улы Әмәт, Әмәт улы Юрматы. Юрматының һигеҙ улы булған: Әскәр, Айбаҡты, Көнбаҡты, Илбаҡты, Таймаҫ, Тимер, Тәлтем, Нуғай. Нуғай улы Көнсыуаҡ, Көнсыуаҡ улы Айсыуаҡ, Айсыуаҡ улы Бурнаҡ, Бурнаҡ улы Тәтегәс. Был шәжәрә сылбырының әһәмиәте - Юрматы ырыуы тарихының боронғо төрк (күк төрктәр) халҡы менән бәйле булыуында. Ваҡытында юрматыларҙың аҡкоштан таралыуҙары тура-

✓ *МХО-ла улдары мәрхүм булғандарҙың, әле МХО-ла йөрөгәндәрҙең әсәләре, бергәләшеп, яугирҙар өсөн бетеүҙәр эшләнек. Бетеүҙәрҙе иң өлкән йәштәге әсәйҙәр яһаны.*





бергә илап, йә бергә көлөп, шулай баға торғайным уларҙы. Атай менән әсәйгә ышаныслы ярҙамсы булдым, улар икәүләп ағас өй төҙөнөләр. Йорт алдында ҙур соҡор ҡаҙҙылар. Йөк машиналары шунда балсыҡ килтереп ауҙара. Атай-әсәй һыу ташып ҡоялар. Юлбарыҫтан беҙгә өләсәйем килә торғайны, ул һеҙлем менән мине балсыҡты ебетергә соҡорға төшөрөп ебәрә, беҙ ситкә китеп уйнамаҡыҡ, шул балсыҡ эсендә уйнай торғайныҡ. Эштән ҡайтһалар, әсәй беҙ ебеткән балсыҡты баҫа, атай һәнәк менән әйләндереп тора. Яңы өйҙөң стеналарын эстән һыланылар: атай асыҡ тәҙрә уйымынан балсыҡты эскә ташлай, әсәй стенаға һыу һибә лә, балсыҡты шапылдатып ташлап, стенаны һылай торғайны. Уй, әсәйем эшкә әрһеҙ булды, кәртә тулы мал, ҡош-ҡорт тотто. Үҙем дә кейәүгә сыҡҡас, бына шулай мал тотоп, иркен йәшәргә тырыштым. Уҡыу яғынан да һынатманым. Совет мәктәбендә бөтә кеше тигеҙ кейенде, хәҙерге һымаҡ байҙар ҙа, ярлылар ҙа юҡ ине. Дәрт тә, илһам да етерлек булды.

➔ **Тормошҡа асыҡ ҡараш, хеҙмәткә етди мөнәсәбәт ғаиләлә һалына. Һәм ошоно йәш быуынға ла бирә алыу йәшәүгә мәғәнә лә өҫтәй түгелме?**

- Улдарым хеҙмәтте күреп үҫтеләр, ҡулдарынан һөйөнһөндәр: ағас эшендә, тимер иретеп йәбештереү эшендә - оҫталар. Улар мәктәптә уҡыған сақта машина йөрөргә өйрәтеп, танытма бирә торғайнылар. Миңә нимәһе үкенесле булды - улдарыма танытма бирмәнеләр, үҙ кеше, үҙ кеше түгел, тигән мөнәсәбәт арҡаһында танытманы һуңынан алдылар. Ә бит аталары хаҡлы ялға сыҡҡансы, шофер булып эшләне, бәләкәйҙән улдарын эргәһендә ултыртып йөрөттө. Шуны ғына әйтәм, улдарым бөтөн машиналарҙа ла йөрөй белә. Кинйәһе ил сиген һаҡлаусы булып, Петропавловский-Камчатскийҙа хеҙмәт итте. Унда ауыр техника йөрөткән. МХО-ға барғас, танк, бронетранспортер йөрөтөргә уҡыткандар. Аталары һәр саҡ балаларының эргәһендә булды.

Дөрөҫөн әйткәндә, Булат мине лә тәрбиәләне. Оҙон ҡайын утындарын бысып бирә лә: "Нисек теләйһең, шулай эшлә, үҙең яраһыңмы, өс улыңды ҡушаһыңмы?" - ти ҙә үҙе эшкә сығып китә. Миңә утын ярыу оҡшай торғайны, мин уға физик күнекмә, тип ҡараным. Унан, мин яра башламаһам, балалар ярҙамға сыҡмаясаҡ бит, ә уларҙы өйрәтергә, йәлеп итергә кәрәк. Мин балтаға тотонам, шунан өс малай үҙ-ара ярыша башлай торғайнылр.

Мин инде мал тотҡан сағыбыҙҙы ла иҫләргә яратам. Булат вафаты алдынан, миңә ауыр булмаһын, тип, малды ҡыҫҡартты. Вафатына ла ун дүрт йыл хәҙер. Ғүмер үтә, шулай ҡартайҙыҡ та ҡуйҙыҡ.

➔ **Улай тип әйтергә иртәрәктер. Тормошоғоҙҙоң яңы офоҡтары ла асылып тора. Һеҙҙе Бүребайҙағы "Миләшкәй" вокал ансамбленең әүҙем ағзаһы тип беләләр.**

- Рәхмәт "Миләшкәй"гә, уның коллективы мине стресс хәленән ҡотҡарҙы, ике бала өсөн көнө-төнө көйөп ултырып булмай бит. "Миләшкәй" менән танышлыҡ нисек башланды? Үҙебеҙҙең йолаларҙы күрһәткән йәнле бер спектакль ҡуйҙы улар. Шуны ҡараным да, ҡалай матур уйнайҙар, тип, хайран ҡалдым. Ансамблдең етәксеһе Рәмзиә Ибраһим ҡыҙы өлкән улым МХО-ға киткәс тә саҡырғайны. Бер йылдан һуң ғына: "Гел генә бикләнеп ултырмайым әле, ана, "Миләшкәй"гә минән өлкәндәр ҙә йөрөй", тип, клубҡа килдем һәм ансамблдең репетицияһына барып эләктем. Былдағы мөхит күнеләмә шул тиклем хуш килде. Ҡыҙҙар шәп, бер-береһенә дәрт бирә, күңелдә күтәрә беләләр, мәрәкәселәр. Үҙем дә һиҙ-мәй ҡалдым, араларына инеп киттем. Йома һайын сәйгә саҡырышабыҙ. Фәүзиәбеҙ доға-аяттар уҡый. Хәйер таратабыҙ. Коллективта бөтәһе ун ике кеше. Мин килгән йылды ансамбль Гран-при алды. Мин ҡыҙҙарға: "Тауышым булмаһа ла, йырлай белмәһәм дә, минең арҡала Гран-при алдығыҙ", - тип шаяртам.

➔ **Яугир ир-аттарҙың әсәләре үҙ-ара осрашамы?**

- Эйе, осрашыуҙар булып тора. Бөтә донъя ҡатын-ҡыҙҙар байрамы 8 мартта бөтәбеҙҙе лә районға саҡырып, бүләктәр бирәләр. Хәйер, былдай сараларға күп йөрөнөм, хәҙер бөтәһен иҫләп тә бөтмәйем. Шулар араһынан Тау колледжында үткән осрашыуҙы әйтмәй булдыра алмайым. Уғата йөкмәткеле, хисле кисә булып хәтерҙә ҡалды. МХО-ла улдары мәрхүм булғандарҙың, әле МХО-ла йөрөгәндәрҙең әсәләре, бергәләшеп, яугирҙар өсөн бетеүҙәр эшләнек. Бетеүҙәрҙе иң өлкән йәштәге әсәйҙәр яһаны. Ә йәшерәктәре ҡатмарлыраҡ эштәрҙе атҡарҙы - беләҙек үрҙеләр, уйынсыҡтар яһанылар. Һәр әсәнең күңелендә изгелек эшләү, матурлыҡ тыуҙырыу ынтылышы йәшәй, шуны саҡырыу итеп алып, донъяға таратыу - беҙҙең бурыс. Мине ҡайҙа саҡырһалар ҙа, барам, ҡатнашам. Бөгөн замана шулай, ҡул ҡаушырып, йәки башты эйеп ултырырға ярамай. Әсә йөрәгендәге көс күп нәмәне еңергә, яҡшылыҡҡа юл ярырға ярҙам итә. Бары улдарыбыҙ яу юлдарынан өйҙәренә иҫән-һау әйләнеп ҡайтһын...

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмәләште.**

һында легенданың боронғо төрктәрҙең бер ярсығының килеп сығышына тап килеүе тураһында һүҙ алып барғайныҡ инде. Был шәжәрә юрматыларҙың боронғо тарихы күк төрктәргә барып тоташыуына тағы бер ишара.

Бигерәк тә Төрктең улы Тотоҡтың исеме үҙенә йәлеп итә. Әлбиттә, Тотоҡ - ул бер ниндәй ҙә исем түгел, ә Беренсе һәм Икенсе Төрк ҡағанатында киң таралған титулдарҙың береһе. Билдәле тарихсы А.Н. Бернштам аҙыуынса, "тотоҡ" титулы ике һүҙҙән килеп сыҡҡан: "тот" ("тотоусы", "башлыҡ" мәғәнәһендә) һәм "уҡ" ("оҡ", борон ырыуҙы аңлатҡан). Шулайтып "тотоҡ" һүҙе ырыу башлыҡтарының титулы булып сыға.

Шәжәрәнең өҫкө өлөшөнөң күренекле тарихсы, Хиуа ханы Әбүлғазиның (1603-1664) "Шәжәрәи төрк" әҫәренән алыныуына шик юҡ. Яфестән алып Әләнчәгә тиклемге исемдәр Әбүлғәзи китабындағы мәғлүмәттәргә тура килә. Бәлки, шуғалыр ҙа, Юрматы шәжәрәһенә Илбарс тигән исем дә килеп ингән. Билдәле булыуынса, Хиуа ханлығына 1511 йылда нигеҙ һалыусы угландың (принцтың) исеме лә Илбарс булған (Әбүлғазиның туған-тыумасаһы). Нисек кенә булмаһын, шәжәрәне төҙөүсе юрматыларҙың боронғо төрктәргә барып тоташҡанын, Әбүлғәзи хандың билдәле китабына таянып, бәйләргә тырышҡан.

Икенсе яҡтан, беҙ был шәжәрәлә Тәтегәстең Юрматы бейҙән ир яҡлап нәҫел-нәсәбе икәнен күрәбеҙ. Шәжәрәнең ҡалған өлөшө юрматыларҙың Рәсәй дәүләтенә ҡушылыу ваҡытын һүрәтләй. Был ерҙә ул башҡа шәжәрәләргә тап килә.

Шулай итеп, Сәғит Мирасов баҫтырып сығарған Юрматы шәжәрәһенең әһәмиәте, беҙҙеңсә, ырыуҙың боронғо тарихын күк төрктәргә, Беренсе һәм Икенсе Төрк ҡағанаты осорона бәйләү, һәм Тәтегәс бейҙең генеалогияһының ирҙәр яҡлап Юрматы бейгә барып тоташыуын күрһәтеүҙә. Был ғалимдар һәм ябай уҡыусылар алдында яңы фәнни офоҡтар аса, яңы асыштарға этәргес булып тора, минеңсә.

**Шамил ИҪӘНҒОЛОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

**Әйткәндәй, 13 сентябрҙә Ишембай ҡалаһының Мәҙәниәт һарайында Ишембай, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Федоровка, Мәләүез, Ғафури, Бәҡалы райондарында, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез ҡалаларында, Ырымбур өлкәһендә, Татарстанда йәшәүсе Юрматы ырыуы башҡорттарының йыйыны үтә.**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Һөҙһөт**
**(Удод)**



Һөҙһөт һымаҡтар төркөмөнә ҡарай. Илдең көньяҡ өлөшөндә таралған, дала зонаһын үҙ итә. Барҡылдаҡ ҙурлығында, кәүҙәһенең өҫкө өлөшө балсыҡ төҫөндә-ерәнерәк, аҡлы-ҡаралы буй һыҙаттары бар, башы һәм аҫҡы яғы ерәнһыу. Башында өлтөгө бар, ҡара ҡаурыйҙарҙан тора. Суҡышы оҙон, нәҙек, аҫҡа бөгөлөп тора. Ҡанаттарын йыш-йыш ҡағып оса. Ерҙән яҡшы йүгерә, ағас, төрлө йорт-ҡураға ҡунып ултыра ала. Бөжәк аулау өсөн башын әйеп-әйеп ала, шуға ла башындағы өлтөгө гел хәрәкәттә кеүек тойола. Ғәҙәттә, яңғыҙ, шулай ҙа парлашып та йәшәй. Бик һаҡ ҡош. Тауышы тонөҡ, "ду-ду" йә "пу-пу-пу" тип ҡысҡыра.

Юғалып барған ҡош. Башҡортостан сиктәрендә һөҙһөттөң таралыу ареалы түбәндәгесә: Ағиҙел йылғаһы тамағы - Бөрө ҡалаһы - Иглин ауылы - Көньяҡ Урал һырттарының көнсығыш битләүе - Иҫәнғол ауылы - Ҡаҫмарт йылғаһы үре - Шайтантау һыртының төньяҡ өлөшө. Урал арьяғында һөҙһөттөң йәшәү урыны Уралтау һыртының көнсығыш итәге буйлап Ирәндек һырты аша үтеп, Силәбе ҡалаһы кимәленә етә. Шулай уҡ Краснокама районында, Таналыҡ йылғаһының төньяҡҡа аҡҡан ерҙәренән Оло Ҡыҙыл йылғаһының Ишҡол ауылы тирәһендә аҡҡан урынына еткәнгә тиклемге территорияла ла ғалимдар һөҙһөтте күреп теркәй.

Беҙ иһә уны Нуғай ҡасабаһы эргәһендә күрҙек. Шулай уҡ Белорет ҡалаһында ла осраттыҡ. Ырымбур өлкәһендә һөҙһөт ғәҙәти ҡош иҫәпләнә.

Ағасы һирәк булған урмандарҙы, урмандың да ланыраҡ ерҙәрен үҙ итә. Кешегә яҡын урынлаша. Парына тоғро. Ояны ағас ҡыуышында. Далалы райондарҙа төрлө төҙөлөш объекттарын, өйөлөп ятҡан таш араһын, йәнлектәрҙең ташландыҡ ояларын һайлай. Ояһының төбөнә ағас сөрөгө, үлән, йөн, йылҡы малының ялы, ҡаурыйҙар түшәй. 5-6, һирәгерәк 3-9 йомортҡа һала. 17 көн баҫа. Бәпкәләр һуҡыр, ялағас була, 22-24 көн ояла ултырып, ныҡына. Ата ҡош менән инә ҡош уларҙы төрлө бөжәк, ҡарышлауыҡтар ташып ашата. Ояны ташлап осҡас та йәш ҡоштар ата-инәһе янында булырға тырыша.

Август аҙағы - сентябрҙә йылы яҡҡа оса. Күп райондарҙа һирәк осраһа ла, көньяҡ райондарҙа һөҙһөт күбәйә бара. Шуға ла киләһе 30-50 йыл эсендә ул дала һәм урманлы дала райондарында аҙ һанлы булһа ла, ғәҙәти ҡош буласаҡ тип фаразлана.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



### 15 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 0.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Х/ф "Я шагаю по Москве". [12+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.40 "Время покажет". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бой с тенью". [16+]
23.55 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Спасская-5". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Башкорттар. [12+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Доступный Башкортостан. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**18.50 Хоккей. "Автомобилист" (Екатеринбург) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Кўстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Восемнадцать лун". [16+]**
**1.45 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!". [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

### 16 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бой с тенью". [16+]
0.00 Д/с Премьера. "Обыкновенный фашизм-2. Постскриптум". [18+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Спасская-5". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-3". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Деловая среда. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Д/ф "Уран". [12+]**
**22.00 О чем молчат Памятники. [12+]**
**23.00 "Башкорт аты-2025". [12+]**
**0.00 Х/ф "Му-Му". [16+]**
**1.45 Спектакль "Хаджи эфэнди женится". [12+]**
**3.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 17 СЕНТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бой с тенью". [16+]
0.00 Д/с Премьера. "Обыкновенный фашизм-2. Постскриптум". [18+]
1.15, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Спасская-5". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-4". [16+]**
**11.00, 3.30 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 "Экологично". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 "Территория героев". [6+]**
**17.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Креативный код. [12+]**
**18.20 Хоккей. "Авангард" (Омск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.00 Деловая среда. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2025". [12+]**
**0.00 Х/ф "Пчелка". [12+]**
**1.45 Спектакль "Счастье". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 18 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бой с тенью". [16+]
0.00 Д/с Премьера. "Обыкновенный фашизм-2. Постскриптум". [18+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
15.30 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Спасская-5". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-4". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Формула здоровья. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Шутка ангела". [12+]**
**1.45 Спектакль "Сваха". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

### 19 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.10, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.25 Д/ф "Азнавур глазами Шарля". [16+]
0.45 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 15.30 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.55 Истории Большой Страны. [12+]
0.55 Х/ф "Провинциалка". [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-5". [16+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 20.15 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 23.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 Своих не бросаем. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.50 Хоккей. "Ак Барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.00 Х/ф "Нулевой километр". [16+]**
**1.45 Спектакль "Вой волчицы". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 20 СЕНТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Одна счастливейшая жизнь". К 100-летию со дня рождения Кирилла Лаврова. [12+]
11.05 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Поехали! [12+]
13.10 Х/ф "Укрощение огня". К 100-летию со дня рождения Кирилла Лаврова". [12+]
16.15 Д/ф "Огневое превосходство Аркадия Шипунова". Ко Дню оружейника". [12+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.25 Премьера. "Две звезды". Семейный подряд. [12+]
20.20, 2.20 "Пусть говорят". [16+]
22.00 "Время".
22.30 Международный музыкальный конкурс "Интервидение". Прямая трансляция из Москвы.
3.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.30, 20.00 Вести.
11.30 Наши. Военкоры. [12+]
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Х/ф "Даниловский тупик". [16+]
0.50 Х/ф "Несчастный случай". [12+]
4.10 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 "Башкорт аты-2025". [12+]**
**8.45 Хазина. [6+]**
**9.15 "Курай даны". [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Курсак". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 "Ете егет". [12+]**
**13.30 Башкорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Х/ф "Экипаж машины боевой". [6+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**19.15, 4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байык-2025". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Подкаст. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2025". [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Х/ф "В субботу". [16+]**
**2.15 Спектакль "Пустая колыбель". [12+]**
**5.15 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**6.00 Тайм-аут. [12+]**

### 21 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
12.55 Т/с "Казароза". [16+]
16.00, 19.00 Международный музыкальный конкурс "Интервидение". Трансляция из Москвы. [12+]
18.00 Вечерние новости.
21.00 "Время".
23.00 Х/ф Премьера. "Триггер". [18+]
0.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.30, 2.30 Х/ф "Нелегкое счастье". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 Наши. Военкоры. [12+]
12.00 Д/ф "Атомный прорыв. К 80-летию атомной промышленности". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Парад юмора. [16+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Атомный прорыв". [12+]
4.16 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Кўстәнәс. [12+]**
**9.00 Доступный Башкортостан. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Беседка". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [6+]**
**12.00 "Атайсал. Беҙҙекеләр! Знай наших!" [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Занимательная биология". [12+]**
**13.45, 19.15 Квадратные метры. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [6+]**
**15.00 Честно говоря. [12+]**
**15.45 Формула здоровья. [12+]**
**16.00 Х/ф "Трембита". [12+]**
**17.45 Деловая среда. [12+]**
**18.15 Д/ф "Уран". [12+]**
**19.30 Әлләсе... [12+]**
**20.15 Патриот РФ. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Юлая Касимова. [12+]**
**0.30 Х/ф "Голова классика". [16+]**
**2.45 Спектакль "Кукольный дом". [12+]**
**5.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ
*1447 һижри йыл.*

| Сентябрь (Рәбиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (23) дүшәмбе | 4:56 | 6:49 | 13:30 | 17:28 | 19:33 | 21:26 |
| 16 (24) шишәмбе | 4:58 | 6:51 | 13:30 | 17:26 | 19:30 | 21:22 |
| 17 (25) шаршамбы | 5:01 | 6:52 | 13:30 | 17:24 | 19:28 | 21:19 |
| 18 (26) кесе йома | 5:03 | 6:54 | 13:30 | 17:22 | 19:25 | 21:16 |
| 19 (27) йома | 5:06 | 6:56 | 13:30 | 17:20 | 19:23 | 21:13 |
| 20 (28) шәмбе | 5:08 | 6:58 | 13:30 | 17:18 | 19:20 | 21:10 |
| 21 (29) йәкшәмбе | 5:10 | 7:00 | 13:30 | 17:16 | 19:17 | 21:07 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# МИЛЛИ КЕЙЕМДӘР




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**35-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сталагмит. Юрисконсульт. Кәшәнә. Кетәк. Йәшмә. Дилбегә. Макси. Тәгәрмәс. Шишмә. Баскетбол. Тәкәт. Фирҙәүес. Кит. Үлек. Ирк. Күгәрсен. Әҙәбиәтсе. Артыш. Эмигрант. Томат. Кран. Бүҙәнә. Зилзилә. Етәксе. Эшләпә. Силсилә. Лавр. Әлгәнийәк. Ҡалас. Кәнфит. Икенде. Әфәнде. Ахун.

**Вертикаль буйынса:** Кеҫә. Дисәтинә. Миҙал. Климат. Бетеү. Кәзә. Лифт. Юбка. Йәшлек. Емшән. Зөлҡәғиҙә. Сәскә. Әҙрәс. Әкәмәт. Лена. Кеше. Күрк. Селбәрә. Нужа. Милитарист. Әбей. Картуф. Каноэ. Кәтмән. Иләү. Мәжлес. Гуппи. Әрҙәнә. Гавиал. Рупор. Үнәс. Армани. Сөннәт. Тәрбиә.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**17 сентябрь "Заятүләк менән Һыуһылыу"** (М. Ғафури, М. Малухина, И.Ҡаҙаҡбаев). 6+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 сентябрь "Вот такие пирожки"** (Ш. Перро) Г. Константинов ис. Йошкар-Ола академия рус драма театры спектакле, музыкаль экшен. 6+

**13 сентябрь "Аҡбуҙат"** (З.Буракаева, И.Ҡаҙаҡбаев), фэнтези. 12+

**14 сентябрь "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 12+

*М. Шкетан ис. Мари милли драма театры ҡуя:*

**16 сентябрь "Богатырь из теста"** (Н. Кузьминых, Р. Алексеев), әкиәт. 11:00. 6+

**16 сентябрь "Николаю - телёнок, Якову - невеста"** (А. Арзайн, Р. Алексеев), музыкаль комедия. 19:00. 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**12 сентябрь "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский). 18:00. 0+

**13 сентябрь "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 12:00 һәм 15:00. 0+

**14 сентябрь "Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 12:00 һәм 15:00. 0+

**17 сентябрь "Тьма египетская"** (Е. Гилева). 19:00. 16+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

Театр коллективы Махсус хәрби операция темаһына арналған **"Фәрештәләр беҙҙең янда"** (12+) тамашаһы һәм Сөләймән Латыповтың **"Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** (12+) музыкаль комедияһы менән гастролдәргә сыға. Спектаклдәр:

**10 сентябрь** - Күгәрсен районы Әлмәс ауылы;
**12 сентябрь** - Күгәрсен районы Мораҡ ауылы;
**15 сентябрь** - Әлшәй районы Раевка ауылы;
**16 сентябрь** - Күмертау ҡалаһы;
**17 сентябрь** - Ишембай ауылы;
**18 сентябрь** - Ғафури районы Сәйетбаба ауылы мәҙәниәт йорттарында үтә.

**13 сентябрь "Муха Цокотуха"** (К. Чуковский, Ю. Дунаева), әкиәт. 0+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**12 сентябрь "Беҙгә - 25"** Учалы филармонияһының юбилей концерты. 6+

**17 сентябрь "Һаумы, мәктәп!"**, концерт. 6+

## БР Милли музейы

**12 сентябрь** Милли кейем көнөнә ҡарата **"Этностилендә көн"** музей акцияһы. 11:00-16:00. 6+

**18 сентябрь "Йәш археологтар курсы"** сараһы. 15:00. 6+

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# ЯНҒЫНДАН...

● Өфөнөң Карл Маркс урамындағы 17/19-сы һанлы йортта сыҡҡан янғын тиҙ арала һүндерелгән. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәте белдереүенсә, ут бинаның 3-сө ҡатында сүп-сарға тоҡанған була. 1 квадрат метр майҙанды ялмап алған янғынды Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы ҡотҡарыусылары һүндерә. Зыян күреүселәр юҡ. Үткән быуаттың 30-сы йылдарында постконструктивизм стилендә төҙөлгән йорт архитектура ҡомартҡылары исемлегенә индерелгән. Унда башҡорт яҙыусылары Төхвәт Йәнәби һәм Сәғит Мифтахов йәшәгән. 1936 йылда коммуналь фатирҙа бер нисә тиклем ваҡыт немец драматургы Фридрих Вольф та торған.

● Бәләбәй районының Приют ауылында йәшәүсе Пасашковтар күршеләрен янғындан аялап алып ҡалған. Раиса Пасашкова улы менән өйҙә була. Таңғы сәғәт дүрт тирәһендә егет күршеләренең мунсаһы янғанын күреп ҡала. Бер секунд та уйлап тормай, ул бейек ҡойма аша һикереп сыға һәм ҡапҡаны аса. Пасашковтар йоҡлап ятҡан күршеләрен уята һәм, ҡотҡарыусылар килгәнен көтөп тормай, янғынды һүндерергә керешә. Әсә менән улдың бергәләп эш итеүе арҡаһында бер кем дә зыян күрмәй. Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Раиса Амаран ҡыҙы Республика Фтизиопульмонология үҙәгендә шәфҡәт туташы булып эшләй, дүрт ул тәрбиәләй.

● Архангел районының Ҡыҙыл Еҙем ауылында сыҡҡан янғында ике кеше зыян күргән. РФ Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының БР буйынса баш идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, янғын һөҙөмтәһендә торлаҡ йорт, һарай, гараж, мунса һәм теплица зыян күргән. Ике кеше -26 йәшлек ир һәм 46 йәшлек ҡатын - йәрәхәттәр алған һәм Өфөгә оҙатылған. Утты һүндереүҙә Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы ҡотҡарыусылары һәм Ҡыҙыл Еҙем ауыл советының ирекле янғын һүндереүселәре ҡатнашҡан.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# МУТЛАШАЛАР...

**Башҡортостандың Хәрби комиссариаты мутлашыу осраҡтары тураһында иҫкәртте.**

Ведомство мәғлүмәте буйынса, кемдәрҙер граждандарға шылтыратып, үҙҙәрен хәрби комиссариат хеҙмәткәрҙәре тип таныштыра. Аферистар хәрбиҙәрҙең туғандарына дәүләт наградаларын тапшырыу һылтауы менән уларҙан конфиденциаль мәғлүмәтте, шул иҫәптән СМС менән килгән кодтарҙы белергә тырыша.

Әгәр шундай шылтыратыу булһа, мутлашыусыларға СМС менән килгән бер ниндәй кодтарҙы ла, шәхси мәғлүмәттәрҙе лә хәбәр итергә ярамай. Иң яҡшыһы - шунда уҡ һөйләшеүҙе туҡтатыу. Был хаҡта 102 йәки 112 телефоны буйынса хоҡуҡ һаҡлау органдарына хәбәр итегеҙ. Шулай уҡ (347) 272-69-75 телефоны буйынса Башҡортостандың Хәрби комиссариатына шылтыратырға кәрәк. Уяу булығыҙ һәм үҙегеҙҙе алдарға ирек бирмәгеҙ, тип иҫкәртә Хәрби комиссариат.

✓ *Мин унда корей халҡының боронғо Балхэ дәүләтенең тарихы хаҡында һөйләнем. Мәҙәниәт үҙәгенең директоры минең сығыштан һуң, аптырап, хатта Кореяның үҙендә лә күбеһе белмәгән тарихты һөйләүемә һоҡланды.*



*АФАРИН!*

# ТУҒАН ТЕЛДЕ ЛӘ...

## сит телдәрҙе лә белһен йәштәребеҙ



**Ошо көндәрҙә Дондағы Ростов ҡалаһында Бөтә Рәсәй корей телендәге әҫәрҙәрҙе тасуири һөйләүселәр конкурсы уҙған.**

Өфөнән Арыҫлан Ярмуллин был конкурста еңеү яулаған. Арыҫландың сығышы хатта корей милләте вәкилдәрен таң ҡалдырған. Бер башҡорт малайы сит ҡалаға барып, корей һәм бүтән милләт вәкилдәре араһында еңеү яулаһын әле! Һоҡланмаҫҡа мөмкин түгел.

Арыҫлан Ярмуллин - баш ҡала егете. Өфө фән һәм технологиялар университетын тамамлаған. Студент йылдарында ул корей телендәге йырҙар менән ҡыҙыҡһынып китә һәм ошо үҙенсәлекле телде өйрәнеү теләге менән яна башлай. Әмәлгә ҡалғандай, факультетта корей телен өйрәнеү курстарын иғлан итәләр. Егет был мөмкинлекте ҡулынан ысҡындырмай.

Тырышып өйрәнә торғас, Арыҫлан корей телен уҡытырлыҡ кимәлгә етә. Әле иһә ул Өфөлә "Тонари" клубын ойошторған һәм корей теленән онлайн-дәрестәр бирә. Ситтән тороп Мәскәүҙәге тел мәктәбендә эшләп тә өлгөрә.

"Конкурсҡа Ха Джонхёк исемле уҡытыусым саҡырҙы. Тәүге турҙа еңеү яулағас, дәртләнеп киттем. Ныҡлы әҙерләндем. Ростовта ҙур аудитория алдында сығыш яһарға кәрәк ине. Мин унда корей халҡының боронғо Балхэ дәүләтенең тарихы хаҡында һөйләнем. Мәҙәниәт үҙәгенең директоры минең сығыштан һуң, аптырап, хатта Кореяның үҙендә лә күбеһе белмәгән тарихты һөйләүемә һоҡланды. Һөҙөмтәлә конкурста беренсе урын алдым. Жюри ағзалары, сығышымдан һуң рәхмәт һүҙҙәрен әйтеп, бөгөн үҙебеҙ ҙә быға тиклем белмәгән әллә күпме яңы мәғлүмәт алдыҡ, тип маҡтанылар", - тип уртаҡлашты үҙенең еңеүе хаҡында булдыҡлы егет.

Арыҫлан конкурста ла еңгән, Ростовтағы корейҙар менән тәжрибә уртаҡлашып, киләсәккә идеялар ҙа туплап ҡайтҡан. "Ростовта Корея мәҙәниәте үҙәге эшләй. Мәктәп-университеттарҙа ошо телде уҡыталар. Ә беҙҙә ундай мөмкинлектәр булмауы үкенесле. Киләсәккә маҡсатым - теләгән һәр кемде Корея мәҙәниәте менән таныштырыу, уны өйрәтеү, уларҙың яҡшы яҡтарын өйрәнеү. Ә был халыҡтан беҙгә өйрәнә, фәһем ала торған нәмәләр бик күп. Халҡыбыҙҙың егеттәре һәм ҡыҙҙары, туған башҡорт телебеҙгә өҫтәп, ни тиклем күберәк сит телдәрҙе белһә, мәҙәни кимәлебеҙ ҙә шул тиклем юғарыраҡ буласаҡ һәм был беҙгә халыҡ-ара кимәлдә танылыуға, уңыштарға ирешеүгә юл асасаҡ", - ти Арыҫлан.

Афарин, Арыҫлан!

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӘЗӘ ҺАУҒАНДАН...

## һыйыр һауған һөт һорап килгән

Яман кәзә тартышҡаҡ, яман әҙәм орошҡаҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер хан илендәге халыҡтың аҡыл кимәлен һынап ҡарарға булған һәм шундай иғлан яһаған: "Кем үҙен аҡыллы тип һанай, шул ете көн эсендә минең һарайыма килеп етһен!" Хандың саҡырыуын ишетеп, уның һарайына өс ҡарт килә. Хан уларҙы ҡабул итә һәм: "Һеҙгә нисә йәш?" тип һорай. Барыһының да яуабы бер төрлө була:"Илле йәш", - ти улар.**

**- Һеҙ бер йәштәге кешеләр, - ти хан һәм беренсе ҡартҡа мөрәжәғәт итеп: - Ә ни өсөн һеҙҙең башығыҙҙа бөтөнләй сәс юҡ?- тип һорай.**

**- Мин үҙ тормошомда яҡшыны ла, насарҙы ла күп күрҙем. Кешелеккә нисек яҡшыраҡ йәшәргә һуң, тип, шул тиклем күп баш ваттым, шуға ла башымдан сәсем ҡойолоп бөттө, - тип яуап биргән беренсе ҡарт.**

**- Ә ни өсөн һеҙҙең сәстәрегеҙ сал, ә мыйығығыҙ ҡара?- тип һораған хан икенсе ҡарттан.**

**- Сәстәрем - минең менән бер йәштә. Улар мин тыуған саҡта уҡ бар ине. Ә мыйығым миңә егерме биш йәштә үҫте. Йәғни сәстәрем мыйығымдан егерме биш йәшкә ҡартыраҡ, - тип яуаплаған икенсе ҡарт.**

**- Ә һеҙҙең ни өсөн мыйығығыҙ юҡ?- тип мөрәжәғәт иткән хан өсөнсө ҡартҡа.**

**-Мин ата-әсәмдең берҙән-бер балаһы. Шуға ла, атайымды рәнйетмәҫ өсөн, мин ир-егет булып тыуҙым, ә әсәйемде рәнйетмәҫ өсөн мыйыҡһыҙ булып тыуҙым...- тигән өсөнсө ҡарт.**

**Ханға был ҡарттар оҡшаған һәм ул уларға алтын бүләк итеп, ҡайтарып ебәргән.**

**Хандың бер вәзире был хәлде күреп торған һәм:"Ҡалай ахмаҡ беҙҙең хан! Ниңә был ҡарттарға шул ҡәҙәре алтын бирҙе инде ул? Улар минән аҡыллыраҡ булып сығамы инде былай булғас? Юҡ! Минең һымаҡ аҡыллы кеше донъяла юҡ! Ҡарттарҙы ҡыуып етеп, өс һорау бирәйем дә, ояҡҡа ҡалдырайым әле. Яуап бирә алмаһалар, алтындарын тартып алайым..."- тип уйлаған һәм ҡарттар артынан сапҡан.**

**Беренсе ҡарт арттарынан сабып килгән һыбайлыны күргәс, юлдаштарына:"Был һыбайлы беҙҙең арттан ҡыуа төшкән, ахры. Һеҙ юлығыҙҙы дауам итегеҙ, ә мин ҡалайым, ни әйтерен тыңлайым", - тигән. Юлдаштары ары киткән. Хандың вәзире беренсе ҡарт эргәһенә килеп еткән дә, шулай тигән:**

**- Һин үҙеңде аҡыллы кешегә һанайһың буғай. Улай булғас, минең һорауыма яуап бир әле. Нимә ул донъя?**

**- Донъя - ул көн менән төн. Көндөҙ эшләйбеҙ, төнөн йоҡлайбыҙ, - тигән ҡарт.**

**- Ә нимә ул ер, нимә ул һыу?**

**- Ер - ул кешенең һәм хайуандарҙың әсәһе, ә һыу - балыҡтарҙың әсәһе, - тип яуаплаған ҡарт.**

**- Улай булғас, әйт әле: нимә ул ваҡыт алышыныу?**

**- Ай, Аллам! Был һорауға яуапты ары киткән ҡарттарҙа онотоп ҡалдырғайным бит әле. Бер генә минутҡа атығыҙҙы биреп тороғоҙ әле, юлдаштарымды ҡыуып етәйем дә, яуапты алып киләйем, - тигән ҡарт.**

**"Ә-әә, ҡаптыңмы?" тип ҡыуанған вәзир һәм атынан төшөп, уны ҡартҡа биргән. Ҡарт атҡа менеп ултырған да, вәзиргә юғарынан ҡарап:**

**- Һеҙҙең атығыҙ бар, минеке юҡ ине. Һеҙ атта ултырҙығыҙ, мин ерҙә баҫып торҙом. Һеҙ хәҙер ерҙә баҫып тораһығыҙ, ә мин атта ултырам. Бына шул була инде ваҡыт алышыныуы. Рәхмәт һеҙгә!- тигән дә, атын юрттырып китеп барған. Вәзир шулай атһыҙ ҙа, алтынһыҙ ҙа тороп ҡалған..."**

*АҒИНӘЙ҆ҺҮҘҘӘРЕ*

# КӘРҺЕҘ ҠАЛҺАҢ...

## ҡағылмайҙар ҙа, һуғылмайҙар ҙа

- Бахыр баҡыр тимә: баҡырға баҡҡандың сире китер, хәсрәте кәмер, дәрте артыр.
- Арғымаҡҡа менгәшмә, үҙең өйрәт сабырға; тормошта ла шулай - үҙ юлыңды үҙең тап, кеше юлы мандытмаҫ.
- Кешегә ҡалған көнөң - атмаған таңың, үткәрә алмаған төнөң.
- Хәмер түгел күстәнәс, ул йоҙроҡло дөмбәс (ығы-зығы).
- Ҡылтым кеше - ҡалтайған таҡта.
- Ете ҡат йоҙаҡ менән бикләнгән хазина тиҙ юғалыусан.
- Ике аҡыллы кәңәшләшә, ике йүнһеҙ кәзәкләшә.
- Мөрхәтһеҙ күпкә лә ҡәнәғәтһеҙ, итәғәтле аҙға ла шатланыр.
- Етем тамыры ете ҡат - етемгә баш һалмағыҙ, үҙ тоҡомоң тамырына етемлек орлоғо һалмағыҙ. (Өләсәйем һүҙе).
- Теше сыҡмаған сабый ҡулындағы мәмәйгә ҡарай, тешен ҡаҡҡаны кемлегенде һынай.
- Етем ҡорһағы ете ҡат, туйһаң да ете өҙөп, ете ҡап, тәнеңә булыр йылы ҡат.
- Яңғыҙ кеше - яңғыҙ ҡайын: әсе елдәр бөтә яҡлап килеп бәрелә, йөрәген, тәнен әрнетә.

**Мөнирә БАЙМӨХӘМӘТОВА.**

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# ЭСМӘЙЕЛЛЕ КҮҢЕЛДӘР

**Берәйһе менән юлға сыҡһаң да, күршең йомошҡа инһә лә, эсмәйелле бул, тип өйрәтә ололар. Эсмәйеллек эстәтте лә ишер. Боронғо бик тәрән мәғәнәле һүҙҙәребеҙ һүҙлектәрҙә генә йәшенеп ятмаһын, телмәребеҙгә лә йоҡһон тип, иҫебеҙгә төшөрәйек.**

**Эсергәнеү**. Тән температураһы күтәрелеүҙе шулай атайҙар. Һалҡын тейеүҙән эсергәнһәң, тирләтә торған үләндәр эс. Эсергәнеү ваҡытында ятып тороу ҙа хәйерле.

**Эсерәнке.** Эсерәнкенең мәғәнәһе - һыу эсеүсән. Эҫелә эсерәнкегә әйләнәһең. Эсерәнке малға һыуың әҙер торһон.

**Эсмәйелле.** "Кеше күңелле, кеше ыңғайлы, изге күңелле" тигәнде белдергән һүҙ. Хеҙмәттәшебеҙ - эсмәйелле зат. Туғандар ҙа эсмәйелле.

**Эсмәлек.** Эсмәлек эсергә яраҡлы һыу сығанағын белдерә. Томбойоҡло тәрән күл, эсмәлегем булған күл (халыҡ йыры).Тау итәккәйҙәре шишмәлек, һыуһындарың баҫыр эсмәлек (Т.Ҡарамышева).

**Эстәт**. Тауҙа өйөлөп ятҡан эре-эре таш була эстәт. Эстәт араһында ла ҡылған көмөш сәсен ялбырата. Ә бер ҡарағай эстәтте ярып уҡ ҡалҡып сыҡҡан.

**Шулай итеп, һүҙ-лөғәтебеҙ эсмәлектәй таҙа булһын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.
1 582218 911006 25036

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 11.09.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 11.09.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 12.09.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 1710